ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 ғинуар (һыуығай) 2016

№3 (681)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Яңы йылды… урманда ҡаршыланыҡ



6

Башҡорттар тураһында мәғлүмәт… Бларамберг хеҙмәттәрендә



7

Йәмғиәт фекеренә ҡолаҡ һалыу…



фән өсөн дә, идара итеүселәр өсөн дә кәрәк 8-9

Халыҡсанлыҡ… төп сифаты сибайҙарҙың



11

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Быйыл да "Киске Өфө" менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалыуығыҙ, баҫмабыҙҙы фекерҙәшегеҙ, кәңәшсегеҙ, таянысығыҙҙай ҡабул итеүегеҙ өсөн сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Әйләнә-тирәгеҙҙә ниндәйҙер сәбәптән гәзитебеҙгә яҙылып өлгөрмәгәндәр булһа, хәлде ғинуарҙың 20-нә тиклем төҙәтеп була икәнен иҫкәртегеҙсе әле: ул саҡта "Киске Өфө" уларҙың өйҙәренә февралдән килә башлаясаҡ. Биш айға яҙылыу хаҡы - 454 һум 80 тин (индекс 50665). Артабан да бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары республикала 14 йәштән никахҡа инеү мөмкинлеге биргән законды беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Ошо закон буйынса фекерҙәрегеҙ ниндәй булыр?

***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе:*** Башҡортостан Республикаһы Прокуратураһы инициативаһы менән индерелгән закон проекты күпселек депутаттар тарафынан яҡлау тапты һәм ҡабул ителде. Беҙ был мәсьәләлә яңылыҡ индермәнек, сөнки бындай закондар Рәсәйҙең күпселек төбәгендә, шул иҫәптән Татарстанда, Мәскәү һәм Түбәнге Новгород өлкәһендә күптән эшләй. Бөгөнгө көндә РФ Ғаилә кодексы иртә никахтарҙы рөхсәт итә (13-сө статья), ләкин шул уҡ ваҡытта ҡануниәт мөмкин булған йәштең иң түбәнге сиген дә, был процедураның тәртибен дә көйләмәй. Уларҙы хәл итеү Рәсәй Федерацияһы субъекттарының законына ярашлы эш итеүгә ҡайтып ҡала. Республикала йылына 10-20 иртә никахлашыу осрағы теркәлә. Әлегә тиклем был һорауҙы урындағы власть органдары үҙҙәре теләгәнсә хәл итте. Ҡайһы бер урындарҙа был сетерекле хәлдән сығыу юлын район йәки ҡала хакимиәтенең мәғариф бүлеге эҙләһә, икенсе яҡтарҙа ошо уҡ мәсьәлә менән хакимиәт башлығы шөғөлләнде.

Беҙ тәҡдим иткән үҙгәртеүҙәр 16 йәше тулмағандарҙың никахлашыуына ҡарата ҡағиҙәләрҙе ҡәтғиләштереүҙе күҙ уңында тота. Закон, беренсенән, никахҡа инеү мөмкинлеге биргән түбәнге йәш сиген аныҡлай - ул 14 йәш. Шулай итеп, әлеге закон өйләнешеү өсөн мөмкин булған йәштең сиген күҙҙә тота. Элек иһә, ҡабатлайым, был сиктең билдәләнмәүе һөҙөмтәһендә, теоретик рәүештә, хатта 11-13 йәштә лә өйләнешергә мөмкин ине. Хәҙер иһә бындай мөмкинлек ғәмәлдән сыға.

Икенсенән, закон 14 йәштән никахҡа инеү мөмкинлеге биргән махсус шарттарҙы билдәләй. Улар рәтенә тик ауырлы булыу йәки бала тыуыуы ғына инә. Ә закон ҡабул ителгәнгә тиклем башҡа сәбәптәр ҙә рөхсәт ителә ине. Балиғ булмағандарҙың өйләнешеүенә рөхсәт алыу өсөн йыйылған документтарҙы, тәү сиратта, тикшереү органдары ҡараясаҡ. Һуңғы ҡарарҙы, опека һәм попечителлек органының ризалығы булған осраҡта, Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты ҡабул итәсәк. Тик ошо шарттарҙы үтәгән осраҡта һәм мәсьәлә ыңғай хәл ителгәндә генә ЗАГС-та никахлашыуҙы теркәргә мөмкин буласаҡ.

Шуны ла билдәләп үткем килә: әлеге закон балиғ булмағандарҙы юлдан яҙҙырған йәки көсләгән өсөн яуаплылыҡтан азат итмәй.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*АФАРИН!*

# ТЕЛЕН ҠӘҘЕРЛӘГӘН ХАЛЫҠ...

## үҙе лә ҡәҙерле булыр

**Баш ҡаланың Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернат базаһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада үтте. Был бәйгенең асылын аңлау өсөн Р. Ғариповтың "Туған тел" шиғырын хәтергә төшөрөү ҙә етә. Сөнки олимпиада Башҡортостандың төрлө төбәктәренән, Силәбе, Һамар һәм Ҡурған өлкәләренән, нәҡ ошо халыҡ шағиры кеүек, телһөйәр һәм илһөйәр уҡыусыларҙы бергә йыйған. БР Мәғариф министрлығы тарафынан егерме һигеҙенсе тапҡыр ойошторолған олимпиаданың һөҙөмтәләре менән йомғаҡлау тантанаһында таныштыҡ.**



*Айрат Нурмөхәмәтов фотоһы.*

**Дауамы 5-се биттә.**

12+

✓ *Эшкә, төрлө донъя мәшәҡәттәренә батып, балаларҙың сабыйлыҡтан сығыуын да күрмәй-тоймай ҡалабыҙ. Интернет, телевидение, башҡа төрлө мәғлүмәти сығанаҡтарҙың үҫешеүе балаларға тиҙ өлгөрөргә "булышлыҡ" итә.*



*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЙӘШТӘРЕБЕҘ...
## ауыр эштән ҡурҡмаһын!

***Ҡадир ИШБУЛДИН, Туймазы ҡалаһының мәҙәниәт йорто етәксеһе:*** Мин әйтер һүҙемде йәштәрҙе эшкә өйрәтеп тәрбиәләү мәсьәләһенә йүнәлтер инем. Балалар беҙ күргән ҡыйынлыҡтарҙы күрмәһен, ыҙалап йәшәмәһен, интекмәһен, тип, юғары белем бирергә, анһат ҡына уҡырға индерергә тырышабыҙ. Бына ошондай үтә һаҡсыл ҡараш, йәлләү һөҙөмтәһендә бөгөнгө көндә менеджерҙар, һатыусылар, юристар күп, бөтәһе лә етәксе урындарҙа эшләргә теләй. Шуға күрә лә бөгөн йәштәребеҙ ауылдарҙа төйәкләнмәй, хеҙмәт баҙарында төҙөүсе, һауынсы кеүек эшсе һөнәрен үҙләштереүселәргә ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Береһенең дә боронғо ата-бабаларыбыҙ кеүек мал ҡарарға, ер эшкәртергә теләге юҡ. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, элек бит беҙҙе ололар бала саҡтан төрлө эшкә күнектереп үҫтерҙе. Хеҙмәт өсөн кешене хөрмәт итәләр ине. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тип тәрбиәләндек, һәр кем төрлө яҡлап камиллашырға, төрлө һөнәрҙәрҙе үҙләштерергә тейеш, тигән ҡараш булды. Ошо тәрбиә йәштәргә тормош һынауҙарына бирешмәҫкә ярҙам иткәндер ҙә инде.

Ә хәҙер йәштәр ауыр эштән ҡурҡып, еңел эш эҙләп йәшәй. Уларға эше лә артыҡ ауырлыҡ килтермәһен, аҡсаһы ла күп түләнһен. Әммә заманыбыҙҙың иң алға киткән иле Ҡытай тәжрибәһенә иғтибар итәйек, булмаһа. Тик үҙ ҡулың менән эшләп, тырышып ҡына байлыҡ тупларға һәм юғары уңыштарға өлгәшергә мөмкин. Алдыҡ менән алдырып, тир түкмәй тапҡан малдың бәрәкәте булмай. Һәр ваҡыт үҙ аҡылыңа таянып, физ-аҡәр хеҙмәт итеп йәшәргә кәрәк был донъяла. Шул саҡта кешенең күңеле лә тыныс була, аҡсаһы ла табыла. Йәштәргә ошондай хеҙмәт тәрбиәһе бирер өсөн тәү сиратта ғаиләлә уларҙы төрлө эште башҡарырға өйрәтеп үҫтерергә кәрәк. Бесән дә саба белһен, итек тә текһен, кирбес тә һалырға әүәҫ булһын йәш кеше. Башҡорт милләтенең киләсәге шундай ауыр эштән ҡурҡмаған, тырыш, ынтылышлы йәштәр ҡулында.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

# Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары республикала 14 йәштән никахҡа инеү мөмкинлеге биргән законды беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Ошо закон буйынса фекерҙәрегеҙ ниндәй булыр?

**(Башы 1-се биттә).**

***Азамат ҒӘЛИМУЛЛИН, йәмәғәт эшмәкәре:*** Законды дөрөҫ аңларға кәрәк. Уны ҡабул итеү 2016 йылдан 14 йәше тулған һәр кемгә кейәүгә сығырға йәки кәләш ала башларға мөмкин тигәнде аңлатмай. Өйләнешеү өсөн теләк кенә түгел, ә килеп тыуған ситуацияны башҡаса хәл итеү юлының булмауы шарт булып тора. Әгәр ҙә 14 йәше тулған ҡыҙ ауырға ҡалып, баланың атаһы ла риза булып, икеһенең дә никахҡа инеү теләге булған осраҡта, уларҙың өйләнешеүе һәм балаға ғүмер биреп, уны бергәләп тәрбиәләүе аборт эшләтеүгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ түгелме ни? Баланы төшөрөү йәки йәш әсәнең уны үҙе генә тәрбиәләүе балиғ булмаған ҡыҙҙың артабанғы психик һәм физик үҫешенә ыңғай яҡтан тәьҫир итеүе икеле. Ә ике йәш кешенең бер ғаилә булып формалашыуы, уларҙың бер-береһенә терәк-таяныс булыуы ауырлыҡтарҙы еңелерәк үтеп сығырға мөмкинлек бирәсәк. Бындай хәлдә яңғыҙ тороп ҡалған йәш әсә лә, балаһын ҡарашмаған йәш атай ҙа йәмғиәт тарафынан аҙғын, тотанаҡһыҙ, яуапһыҙ кешеләр булып ҡабул ителәсәк һәм уларға ҡарата мөнәсәбәт тә күптәр яғынан кире буласаҡ. Ләкин балиғ булмаһалар ҙа, ошондай ситуацияға тарыған, әммә законлы никахта тороусы йәш парға ҡараш икенсерәк, түҙемлерәк буласаҡ. Ә был иһә, үҙ сиратында, уларға юғалып ҡалмаҫҡа, тормоштарын артабан дауам итергә көс бирәсәк. Балаларын тулы ғаиләлә үҫтереү мөмкинлеге лә уларға яуаплылыҡ өҫтәйәсәк, тигән фекерҙәмен.

Ләкин быларҙың барыһы ла никахлашыусыларҙың, асылда, йәмғиәттең үҙҙәре балалыҡтан сығып бөтмәгән ике ағзаһы тураһында һүҙ барғанда ғына урынлы. Ә уларҙың береһе үҙенең ғәмәлдәре өсөн яуап бирерлек йәштә булған, эшмәкәрлегенең артабан ниндәй ауыр эҙемтәләргә килтереүен аңлап та, насар юлынан тайпылмаған кеше икән, уны, бер һүҙһеҙ, ҡаты яуаплылыҡҡа тарттырырға кәрәк. Бында башҡаса варианттарҙың булыуы мөмкин түгел, минеңсә.

***Әлфинә БАТТАЛОВА, хужабикә, 4 бала әсәһе:*** Башҡорттарҙа элек-электән ошо йәштә никахлашыу осрағы йыш күҙәтелгән. Мәҫәлән, минең өләсәйем кейәүгә сыҡҡанда үҙе балалыҡтан сығып етмәгән ҡыҙсыҡ булған. "Бикәсем менән бер йәштә булдым, олатайың эштән ҡайтыуға унын менән урындыҡта ҡурсаҡ уйнап ултырыр инем", - тип хәтерләй торғайны. Олатай-өләсәйҙәребеҙ бөгөнгө йәштәргә хас еңел-елпелектән, моңһоҙлоҡтан, яуапһыҙлыҡтан азат булған һәм никахты һаҡлап ҡалыуға ҡатын да, ир ҙә бөтә көсөн һалған.

Ә хәҙер өйләнешеү магазинға барып килеүгә тиңләшә башланы. Кейәүгә сығалар йәки кәләш алалар ҙа, йә холҡобоҙ тура килмәй, йә донъяға ҡарашыбыҙ айырыла, тип, оҙаҡ уйламай, айырылышып та ҡуялар. Ләкин кейәү йәки кәләш магазиндан алынған һәм оҡшамаған осраҡта кире тапшырып була торған әйбер түгел. Никахлашыу - ике кешенең дә тормошона тәьҫир итеүсе яуаплы эш. Ошоно балиғ булғандар аңламағас инде, 14 йәшлек балаларҙың аңына барып етеүе шикле. Донъяға ҡараштары яңы формалашып килгән, күп нәмәгә үҫмерлек эгоизмы аша ҡараған йәш парҙың никахын хатта баланың булыуы ла ҡотҡарып ҡала алмаясаҡ, минеңсә. Шуға күрә, әлеге законды ыңғай яҡтан да, кире йәһәттән дә баһалай алмайым.

Бындай закондың ҡабул ителеүе, тәү сиратта, ата-әсәләргә балаларына ҡарата иғтибарҙы арттырыу кәрәклеге тураһында һөйләй. Эшкә, төрлө донъя мәшәҡәттәренә батып, балаларҙың сабыйлыҡтан сығыуын да күрмәй-тоймай ҡалабыҙ. Интернет, телевидение, башҡа төрлө мәғлүмәти сығанаҡтарҙың үҫешеүе балаларға тиҙ өлгөрөргә "булышлыҡ" итә. Шул иҫәптән, енси йәһәттән дә тиҙерәк етешә хәҙерге балалар. Тимәк, күҙ-ҡолаҡ булыу, артыҡ хәстәрлегебеҙ менән үҙебеҙҙән биҙҙермәйенсә генә тәрбиәүи процесты ҡаты контроль аҫтында тотоу кеүек бурыстар ята ата-әсә иңендә. Ғаиләлә көйләнмәгән тәртиптең төрлө закондар нигеҙендә яйланыуын көтөү мәғәнәһеҙлек һәм аңһыҙлыҡ ул.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# МАҠСАТЛЫ БУЛ!



Бөгөнгө йәштәр ауыҙынан йыш ишетергә тура килә "Алдыма алған маҡсатымды тормошҡа ашырыу юлындамын..." тигән һүҙҙәрҙе. Хәҙергеләр беҙҙең быуын кешеләренән тап шуныһы - маҡсатлы булыуҙары менән айырыла ла шикелле инде...

Маҡсат, тигәндән. Ҡасан үҙегеҙгә маҡсат ҡуйғанығыҙҙы хәтерләйһегеҙме, тип өндәшәм әле уҡыусыға. Эйе, мәктәптә уҡығанда хыялдар менән йәшәй күпселек. Ләкин мәктәпте тамамлап, ҡайҙалыр эшкә урынлашып алдымы, ул хыялдар юҡҡа сыға. Мәктәпте тамамлағандың тәүге йылында уҡырға инмәһәң, икенсе йылына теләк һәм хыялдар һүрелә лә ҡуя инде, тигән ҡараш йәшәй. Ошо дөйөм ҡарашҡа буйһона кеше. Ул йәшәй-йәшәй үҙ хәленә шул ҡәҙәре күнегә, ихтыяжы ла бәләкәсәйә, тапҡан аҡсаһына ла ябаҡлаша. Ихтыяжды ҙурайтыу - нәфсене ҙурайтыу түгел, ә матур йәшәүгә, бай булырға, матди бойондороҡһоҙлоҡ алыуға ынтылыш бит инде ул. Аҡса барыһын да хәл итә алмай, әлбиттә. Ләкин аҡса ярҙамында күберәк мөмкинлеккә, күберәк гарантия һәм яҡланғанлыҡҡа эйә булаһың, мауыҡтырғыс сәйәхәттәр тураһындағы хыялдарыңды тормошҡа ашыраһың, үҙеңде һәм ғаиләңде лайыҡлы тормош менән тәьмин итә алаһың. Аҡсаң бар икән, балалар тәрбиәләүгә ваҡытың ҡала, башҡаларға ярҙам итә, эш урындары, финанс тотороҡлолоғо булдыра, һаулығыңды һаҡлай алаһың...

Хәҙерге быуын вәкилдәре шулай фекерләй. Ә икенсе төрлө ҡиммәттәр өлгөһөндә тәрбиәләнгән минең быуын кешеләре иһә... Тап уларға, ихтыяждарыңды сикләмә һәм хыяллан, маҡсатлы бул, тип әйтмәксе иткәйнем...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Төп макроиҡтисади күрһәткестәр буйынса Башҡортостан йылды уңышлы тамамланы. Республика Башлығы әйтеүенсә, бюджет 144,5 миллиард һумға үтәлгән, был 2014 йылғы күрһәткестәрҙән 12 миллиард һумға күберәк. Сығым өлөшө - 145 миллиард һум. Шулай итеп, бюджет дефициты минималь күләмгә еткерелде - 500 миллион һумдан ашманы. Республиканың тупланма бюджеты 180 миллиард һум самаһы тәшкил итте, был 2014 йылғы һандарҙан 7-10 процентҡа күберәк. Тулайым төбәк продукты үҫеше буйынса республика Рәсәйҙең уңышлы биш төбәге иҫәбенә инә.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Указы менән Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты булдырылды. Республика Башлығының икенсе указы менән Фәрит Риф улы Ғүмәров Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп тәғәйенләнде.

✓Башҡортостан парламентарийҙары федераль ҡануниәткә микрофинанс ойошмалары өсөн регламенттарҙы камиллаштырыуға йүнәлтелгән үҙгәрештәр индерергә ниәтләй. Ошо хаҡта Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев белдерҙе. Билдәләнеүенсә, бөгөн "тиҙ займдар" биреүсе контораларҙың, шулай уҡ коллекторҙар хеҙмәтенең эшләүе йәһәтенән хәлде анализлау кире күренеште күрһәтә. Бындай структуралар кешенең ауыр тормош хәлендә тороп ҡалыуынан йәки халыҡтың иҡтисади, хоҡуҡи наҙанлығынан файҙаланып, йыш ҡына бурысҡа алыусыға ҡарата тупаҫ эшмәкәрлеген тормошҡа ашыра.

✓Башҡортостанда көҙгө сессия ваҡытында республика Дәүләт Йыйылышы 84 закон проектын ҡараған, бөгөн шуларҙың алтмышы закон статусын алған. Закон сығарыу башланғыстарының яртыһынан ашыуын (55,4 процент) даими комитеттар индергән. Отчет осоронда төбәк парламенты 500-гә яҡын федераль закон проектын, Дәүләт Думаһы һәм Рәсәйҙең башҡа субъекттарындағы коллегалары тәҡдим иткән башланғыстарҙы һәм мөрәжәғәттәрҙе ҡараған. Республика парламенты спикеры Константин Толкачев Дәүләт Йыйылышының 2015 йылғы эшмәкәрлегенә йомғаҡ яһағанда ошо хаҡта һөйләне.

✓ *Милләттең юғары мәҙәниәт усағы булараҡ, театр халыҡты яҡшылыҡҡа әйҙәргә тейеш. Ә ул сығымдарын аҡлар өсөн русса спектаклдәр уйнарға мәжбүр. Киләсәктә үҙен аҫырар өсөн театр ҡытай теленә күсһә лә аптырарлыҡ булмаҫ.*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ЭЙ, ТУҒАНДАР, НАҘАНЛЫҠТАН ҠУРҠЫУ КӘРӘК!

**Иртәнсәк торғас та кухнялағы радиоалғысты тоҡандырам. Сәғәт 7 тулыу менән "Юлдаш" каналынан өлгөр, уңған, шаян өс егет - Марсель, Йәмил һәм Филүс "Иртәнсәккәй тороп..." тигән өс сәғәтлек тапшырыуҙарын башлап ебәрә. Үкенескә, мин уның яртыһын ғына тыңлап өлгөрәм, сөнки эшкә сығып китергә тура килә. Егеттәрҙең эшенә баһа биреү өсөн шуныһы ла етә, әлбиттә: афарин, егеттәр, рәхмәт һеҙгә, тип әйтеүҙән башҡа һүҙ юҡ.**



Хәҙер уларға шул тиклем өйрәнеп кителде, ял көндәрендә йәки профилактика сәғәттәрендә был тапшырыу эфирға сыҡмаһа, бер төрлө яманһыу булып тора. Программа йәнле һәм ҡыҙыҡлы ғына түгел, мәғлүмәттәргә лә бай булыуы менән айырылып тора. Бер-береһен бүлдермәй, матур итеп алып барыуҙары, кинәйәләп, шаяртып алыуҙары ла күңелгә ятышлы, урынлы. Тағы ла шуныһы оҡшай: егеттәр бер ваҡытта ла туҙға яҙмаған нәмәләр хаҡында һөйләп, ваҡыт уҙғармай, хата мәғлүмәттәргә лә юл ҡуйылмай, һәр һүҙҙәрен үлсәп, телмәр мәҙәнилектәрен генә түгел, үҙҙәренең дә тәрбиәле, мәғлүмәтле булыуҙарын күрһәтә, көнүҙәк темаларҙы таба белә, тыңлаусыны ихтирам итә.

Юғиһә, эшкә китеп барғанда автобус водителенең "зауҡына" буйһоноп, "Русское радио"ны тыңлап барырға ла мәжбүр булаһың йыш ҡына. Ҡарлыҡҡан тауышлы алып барыусы бер ир-егет оятһыҙ көләмәстәр һөйләй ҙә, башҡа алып барыусылар менән бергәләп, хахылдап көлөшәләр. Тыңлаусыны бар тип тә белмәйҙәр. Кем өсөн эшләйҙер инде улар? Шулай ҙа был яҙмамда әйтергә теләгәнем икенсе ине. "Юлдаш" егеттәренә рәхмәт һүҙен форсат тыуғанда әйтеп ҡалайым, тинем. Ә баяғы һүҙ ошо тапшырыуға, йәғни унда ҡатнашыусы радио тыңлаусыларға төбәлә. Егеттәр республикабыҙ тәбиғәте, әҙәбиәте, мәҙәниәтенә бәйле "Тылсымлы балаҫ" викторинаһы алып бара. Бик шәп "лакмус ҡағыҙы" булды әле ул бәғзе бер наҙандарға. Һорауҙар бөтөнләй ҡатмарлы түгел, мәктәп уҡыусыһы ла яуап бирә алырлыҡ еңел. Башында саҡ ҡына уйы, моңо, белеме булған кеше уйлап та тормай яуап бирергә һәм бүләкте һә тигәнсе оторға тейеш, минеңсә. Өҫтәүенә, яуапты тиҙләтеүсе өс төрлө вариант әйтелә. Эш, әлбиттә, бөтөнләй ҙә бүләктә түгел. Таң менән "Юлдаш"тың телефон һандарын йыйып, унда шылтыратырға йөрьәт иткәс, үҙеңдең белем һәм дә мәҙәни кимәлеңде самалау кәрәк тә бит. Юҡ, ябай ғына һорауға ла яуап бирә алмай хур була шул күптәр. Егеттәр улай итеп тә, былай итеп тә ҡарай, бөтөн вариант-яуаптарҙы тик "сәйнәп" кенә ҡаптырмай яуапһыҙ яуап биреүселәргә, тик белмәгән кешегә... Йәнем көйөп, шул мәлдә радионы һүндереп ҡуям. Егеттәрҙең ниндәй һорауҙарына яуап ала алмауын теркәп бармағаныма үкенәм, эшкә ҡабаланғанда, уның ҡайғыһымы. Ошо араларҙағы тапшырыуҙарҙан иҫтә ҡалған бер нисәһе түбәндәгеләр: З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтен, билдәле мәғрифәтсе, ғалим, ислам дине белгесе Ризаитдин Фәхретдин тураһында, Кинйә Арыҫлановты, өс Советтар Союзы Геройы биргән ауыл исеме (яуап тулы булманы) Кинйәбыҙҙы, Ашҡаҙар йылғаһы тураһында һәм башҡа шуға оҡшаш тарих, география, әҙәбиәт, мәҙәниәт буйынса ябай ғына һорауҙарға ла яуапты белмәй булып сыҡты замандаштар. Бик йәл генә түгел, хурлыҡ бит был! Исмаһам, балаларының, ейәндәренең тарих, география, әҙәбиәт дәреслектәрен асып ҡараһасы улар радиоға шылтыратырҙан алда. Китап түгел, гәзит тә уҡымай, тимәк, был кешеләр. "Киске Өфө", "Башҡортостан", "Йәшлек" гәзиттәренең береһен генә алдырып уҡып барған хәлдә лә, ниндәйҙер мәғлүмәткә эйә була алырҙар ине. Уҡымаған, тома наҙан быуын да түгел бит улар. Өлкән тигәндәре лә үткән быуаттың 50-70-се йылдарында мәктәптә белем алған кешеләр. Урта йәштәгеләр менән йәштәр тураһында әйтеп торорға ла түгел: алған белемдәре онотолмаған да әле, ә барыбер Башҡортостаныбыҙ хаҡында бер ни ҙә белмәйҙәр: Айҙа йәшәйҙәрме ни! Был мәҡәләне яҙыуға, ниһайәт, 23 декабрҙәге тапшырыу "һуңғы тамсы" булды. Иртә менән бер ханым, исемен Лилиә тине, булһа кәрәк, шылтырата. Егеттәр быға шундай һорау бирә: "Ул 1968 йылдың 1 ғинуарынан баҫылып сыға башлай. Нимә тураһында һүҙ бара?" Эфирҙа - тынлыҡ. Икенсе варианты яңғыраталар: "Уның тәүге етәксеһе итеп яҙыусы Кәтибә Кинйәбулатова тәғәйенләнә". Оҙаҡҡа һуҙылған тынлыҡ... "Баҫылып сыға, тигәс, тимәк, нимә инде ул?" тигәнерәк асыҡлауҙы мәғлүмәттәр ҙә әйтеп ҡарай алып барыусылар. Ханым, әйтерһең дә, ауыҙына һыу уртланы. Аптырағас, егеттәр "Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн был журналдың бөгөнгө мөхәррире Гөлназ Ҡотоева" тип, "кәртте" бөтөнләй асып һалды. Иҫ китмәле хәл, ләкин, ышанаһығыҙмы - яуап булманы. Дөрөҫ, һәр кем дә Ҡотоеваны белеп тә бөтөрмәй торғандыр, ләкин билдәле яҙыусы Кәтибә апайҙы, ул йылдарҙа бик популяр булған, заманында унда Рәми Ғарипов, Әнисә Таһирова, Гөлфиә Юнысова, Йомабикә Ильясова эшләп киткән "Башҡортостан ҡыҙы" журналын белмәү ғәфү итерлек хәлме? Бөгөн популярлығы кәменеме әллә журналдың? Ундай сүрәттә лә республикабыҙҙа махсус ҡатын-ҡыҙҙар өсөн нәшер ителеүсе берҙән-бер журнал бит ул. Уның хаҡында ир-егеттәр ҙә яҡшы белә, моғайын. Был ханым тамам ояҡҡа ҡалыуын аңланымы икән? Тауышына ҡарағанда, урта йә өлкәнерәк йәштә булырға оҡшаған.

Әйткәндәй, йәштәр араһында ла йыш осрай бындай маңҡорттар. Үҙен ихтирам иткән, тыуған ерен, илен, өҙөлөп яратҡан кешенең күңеле һәр ваҡыт камиллыҡҡа, белемгә ынтыла. Маҡтанғандан түгел, мин үҙем, мәҫәлән, Башҡортостан картаһын алдыма асып һалып, сәғәттәр буйы роман уҡыған һымаҡ ҡарап ултырырға, карта буйлап "сәйәхәт ҡылырға" яратам. Был миңә кәрәк һәм ҡыҙыҡ. Ә бына мин йәшәгән йортта бер күрше бар. Республикабыҙҙың, әйтәйек, төньяғында йәки көнсығышында ниндәй райондар урынлашҡанын да белмәй. Яҙыусылар, артистар, ғалимдар тураһында - ләм-мим. Ундағы йылғалар, күлдәр, тауҙар тураһында әйтеп торорға ла түгел. Уның ҡарауы, баҙарҙа йә магазинда ит, картуф хаҡы күпме, ҡайҙа нимә арзанырaҡ хаҡҡа һатыла - теҙеп әйтеп бирер: бик һәйбәт белә. Шулай инде, кемгә - нимә был фани донъяларҙа...

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# БАЙРАМ ТАМАШАЛАРЫ... беҙҙең балалар өсөн түгелме?

**Яңы йыл байрамы, тәү сиратта, балалар өсөн ҙур шатлыҡ. Бүләктәр, тәм-том, һырғалаҡтар, боҙ ҡаласыҡтары - барыһы ла улар өсөн. Тап ошо байрамға инселәп, театр-филармониялар махсус тамаша, әкиәттәр әҙерләй. Тик беҙҙе бер нәмә борсой: ниңә Яңы йыл тамашаларын ойоштороусылар башҡорт балаларының ҡыҙыҡһыныуын бөтөнләй иҫәпкә алмай? Һуңғы ике йыл тирәһе балаларыбыҙ өсөн башҡортса иртәлектәрҙе күтәп ала алмайбыҙ.**

Туған телдә һөйләшеү - ғаиләлә башлана, тип әйтергә яраталар хәҙер мәктәптә башҡорт теле дәрестәренең ҡыҫҡартылыуын аҡларға сәбәп эҙләгәндә. Бына беҙ ғаиләлә улдарыбыҙ менән бер рус һүҙе лә ҡушмайынса башҡортса һөйләшәбеҙ, йәғни, әсәй һәм атай булараҡ, был йәһәттән үҙебеҙҙең бурысыбыҙҙы теүәл үтәйбеҙ. Йәнһүрәттәргә лә, уйындарына ла талапсанбыҙ. Әгәр ҙә балаларымдың күңеленә изгелек тойғолары сәсмәй икән, башҡортсаға тәржемә ителһә лә, телевизорҙан боҙоу-емереүгә көйләнгән геройҙар хаҡындағы ҡайһы бер йәнһүрәттәрҙе лә ҡаратмаҫҡа тырышам.

Йыл да Яңы йыл иртәлектәрен дә күтәп алабыҙ, башҡортса тамашалар ҡарарға өмөтләнәбеҙ. Ләкин... Быйыл да өмөтөбөҙ аҡланманы. Русса барған тамашала балам Ҡыш бабайға ни әҙерләп барған йырын йырлай, ни шиғырын һөйләп ишеттерә алманы. Тимәк, туған телендә һөйләшкән, аралашҡан балаларға "Тамыр" каналының концертынан, өлкәндәр өсөн ҡуйылған концерт, спектаклдәрҙән тыш, байрамса саралар бөтөнләй әҙерләнмәй булып сыға...

Театрҙар етәкселәре, тамашасы башҡортса иртәлектәргә йөрөмәй, тип аҡлана. Быныһында ла дөрөҫлөк барҙыр, әлбиттә, беҙҙең халыҡ балаһында сәнғәткә, әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләргә тырышып тормай, үкенескә күрә. Театрҙар ҙа иртәлектәр менән план үтәп, аҡса йыйып ҡалырға ашығалыр. Шул уҡ ваҡытта беҙ, башҡорт телле ата-әсә, үҙебеҙҙең рухи ихтыяжыбыҙҙы ҡәнәғәтләндерерлек тамашалар талап итергә хаҡлыбыҙҙыр бит инде. Иҡтисади көрсөк, тип, милләтебеҙҙе рухи көрсөк алдына ҡуйыу менән нисек килешмәк кәрәк?

Милли театрҙарҙың маҡсаты аҡса йыйыу түгел, халыҡтың телен, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлау. Милләттең юғары мәҙәниәт усағы булараҡ, ул халыҡты күтәрергә, матурлыҡҡа, яҡшылыҡҡа әйҙәргә тейеш. Ә ул сығымдарын аҡлар өсөн бөгөн русса спектаклдәр уйнарға мәжбүр. Киләсәктә үҙен аҫырар өсөн театр ҡытай теленә күсһә лә аптырарлыҡ булмаҫ. Бына был хәл менән нисек килешмәк һәм ни ҡылмаҡ кәрәк? Һорауымды Мәҙәниәт министрлығына төбәйем һәм уға яуап алырға теләйем.

**Гөлсиә ИШКИЛДИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ 2015 йылда Башҡортостанда Пенсия фондына 72 миллиард һум страховка иғәнәһе ингән. Был уҙған йылғы кимәлдән 2,7 миллиардҡа күберәк. Ведомство керемдәрҙең ыңғай динамикаһын билдәләй. Мотлаҡ медицина страховкаһы фондына 16,3 миллиард һум йүнәлтелгән, был былтырғы күрһәткес менән сағыштырғанда 13,8 процентҡа юғарыраҡ.

✓ 2015 йылда республиканың баш ҡалаһын яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың ҡанатлы һүҙҙәре биҙәгәйне. Әле илдә һәм Башҡортостанда иғлан ителгән Рәсәй киноһы йылына арнап, Өфө урамдарында Рәсәй фильмдарынан һүҙҙәр яҙылған баннерҙар барлыҡҡа килде. "Ҡала рекламаһы" муниципаль ҡаҙна учреждениеһында хәбәр итеүҙәренсә, баннерҙар буш, коммерция фирмалары һатып алмаған щиттарҙа урынлаштырыла. "Башҡортостан" киностудияһына ла башҡорт фильмдарынан фекерҙәр тәҡдим итеү тураһында һорау ебәрелгән.

✓ Быйыл Башҡортостан ауыл еренә эшкә ҡайтҡан медицина хеҙмәткәрҙәренә бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләү өсөн 90 миллион һум аҡса аласаҡ. Компенсациялар индереү ауыл ерендә 5300-ҙән ашыу табипты эшкә урынлаштырырға һәм ауылда сифатлы медицина ярҙамын алырға мөмкинлек бирәсәк. Быйыл ауылға эшкә килгән һәм төбәк власть органдары менән килешеү төҙөгән юғары белемле 50 йәштән өлкән булмаған табипҡа миллион һум күләмендә бер тапҡыр бирелгән компенсация түләнә.

✓ Өфөнөң Орджоникидзе районында наркотиктар һатыу тураһында аноним мәғлүмәт өсөн почта йәшниктәре ҡуйылды. Адрестары: Яңы Черкассы урамы, 11, Ҡулса урамы, 43, Блюхер урамы, 28, 50, 16, Коммунарҙар урамы, 66/3, Вологодская урамы, 76/3, Шота Руставели урамы, 18а, Тыныслыҡ урамы, 12, Калинин урамы, 16 һәм Азатлыҡ урамы, 17.

✓ Өфөлә республика журналистары араһында ойошторолған конкурс еңеүселәре тәбрикләнде. Бер нисә ижади конкурс еңеүселәренә дипломдар һәм приздар тапшырылды. Башҡорт телендә - "Башҡортостан" һәм "Киске Өфө", рус телендә "Янаульские зори" һәм "Караидель" гәзиттәренең сайттары баҫмаларҙың иң яҡшы сайттары тип танылды.

**"Башинформ"дан.**

✓ - Өфө ҡалаһының ҡоштар атласын әҙерләүҙең маҡсаты, тәү сиратта, хәҙерге көндә ҡалала ниндәй ҡоштар йәшәүен билдәләү, уларҙың территорияларҙа урынлашыу тәртибен һәм торған урындарын характерлау.



БАШ ЙОРТОБОҘ



# ҠОШТАРҘЫ ҺАНАЙБЫҘ

**Баш ҡалала ниндәй ҡоштар төйәкләнеүен күптәрҙең белгеһе килер ине, моғайын. Ошо йәһәттән Рәсәй Ҡоштарҙы һаҡлау союзының Башҡортостан буйынса бүлеге рәйесе Полина Полежанкина ҡала халҡына эштән бүленеп, ҡоштар һанарға тәҡдим итә. Биш йыл дауамында (2015 йылдың декабренән 2020 йылдың ноябренә тиклем), баш ҡалала төйәкләнеүсе ҡоштарҙың һанын һәм биотопик бүленешен тикшерәсәктәр һәм шунда өфөләргә ҡала ҡоштарының атласын эшләргә ярҙам итеү мөмкинлеге бирелә.**

Өфө ҡалаһының Ҡоштар атласын төҙөү эше Рус географик йәмғиәтенең төбәктәге бүлеге, Рәсәй Ҡоштарҙы һаҡлау союзының Башҡортостан буйынса бүлеге, республиканың балалар экология-биология үҙәге һәм БР махсус һаҡ аҫтына алынған тәбиғәт территориялары дирекцияһы ярҙамында ойошторола. Был эште атҡарып сығыу өсөн тәү сиратта Өфө ҡалаһының бөтә территорияһын икегә ике километр майҙанлы квадраттарға бүләсәктәр. Ҡоштар һаны һәр төр ҡошто күреү осраҡтарына һәм уларҙың тауышын ишетеп теркәүгә, табылған ояларына, биотоп структураһы һәм һәр бүлемде ни тиклем тулы өйрәнеүгә ҡарап билдәләнәсәк. Бөтә ҡыҙыҡһынған кешеләр ҙә атлас төҙөүҙә ҡатнаша ала. Улар өсөн ойоштороусылар тарафынан "Бәйләнештә" селтәрендә "Наблюдатели природы Башкирии" тип аталған төркөм асылған, бында эш айышына төшөнөргә, тәжрибә уртаҡлашырға һәм фекер алышырға мөмкин. Бөгөнгө көндә был проектта ун ете кеше ҡатнашырға теләк белдергән, уларҙың дүртеһе республиканың балалар экология-биология үҙәгендә уҡып сыҡҡан профессиональ орнитолог. Баш ҡала ҡоштарын һанау ихтыяжы тураһында Рәсәй Ҡоштарҙы һаҡлау союзының Башҡортостан буйынса бүлеге рәйесе Полина Полежанкина былай тип һөйләй:

- Өфө ҡалаһының ҡоштар атласын әҙерләүҙең маҡсаты, тәү сиратта, хәҙерге көндә ҡалала ниндәй ҡоштар йәшәүен билдәләү, уларҙың территорияларҙа урынлашыу тәртибен һәм торған урындарын характерлау. Бынан тыш, эш барышында беҙ халыҡҡа Өфө ҡоштары тураһында мәғлүмәттәр еткерергә теләйбеҙ. Ҡоштарҙы һаҡлау буйынса мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йәмәғәт ойошмаларының иғтибарын йәлеп итергә, биология уҡытыусыларына дәрес үткәреүҙә һәм экскурсиялар ойоштороуҙа методик ярҙам күрһәтергә лә иҫәп тотабыҙ. Иң мөһиме, ҡала төҙөлөшө өлкәһендә экологик күҙлектән сығып дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул ителһен өсөн мәғлүмәт тупларға уйлайбыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һуңғы йылдарҙа баш ҡаланың үҙәк урамдары киңәйтелеү сәбәпле, юл ситендәге ағастар ҡырҡылып, йәшеллек кәмей төшөүе лә ҡоштарҙың һанына йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Шуға күрә, Өфө ҡалаһының ҡоштар атласын эшләп, ҡаланың ҡайһы өлөшөндә ҡоштар күп йәшәүен билдәләү, уларҙың юғалып барған төрҙәрен асыҡлау киләсәктә Ҡытайҙың турғайҙар менән булған тарихын ҡабатламаҫҡа ярҙам итер, тип ышанайыҡ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠАНУНИӘТТЕ БЕЛӘҺЕҢМЕ?



**1 ғинуарҙан Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтенә бер нисә тиҫтә үҙгәреш индерелде. Уларҙың ҡайһы берҙәре ситләтеп булһа ла, туранан-тура ла урындағы үҙидаралыҡ органдары эшмәкәрлегенә ҡағыла.**

Муниципалитеттағы сираттағы кәңәшмәлә ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов барлыҡ яуаплы структураларға ҡануниәттәге үҙгәрештәрҙе өйрәнеп, эшмәкәрлектәрен уға ярашлы ойоштороуҙы, хакимиәттең рәсми сайты һәм киң мәғлүмәт саралары аша ҡала халҡына аңлатыу эштәре алып барыуҙы йөкмәтте.

Мәҫәлән, 1 ғинуарҙан сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән граждандарҙың мәнфәғәтен хәстәрләгән закондарҙың тотош комплексы ғәмәлгә инде. Улар айырым иғтибар талап иткән категорияға йәмғиәттә үҙҙәрен уңайлы һәм ышаныслы тойорға ярҙам итәсәк. Беренсе тапҡыр власть органдарына һәм дәүләткә ҡарамаған ойошмаларға инвалидтарҙы тормоштоң төрлө өлкәләрендә тәьмин итергә тейешле аныҡ шарттар ҡуйылған. Шулай уҡ эшкә алғанда инвалидлыҡ билдәләре буйынса дискриминацияны тыйыусы ҡануниәт тә үҙ көсөнә инде. Сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән граждандар мәнфәғәтендә эшләй башлаған мәғарифтағы "асыҡ мөхит" тураһындағы законда инвалидтарҙы социаль, инженер һәм транспорт инфраструктуралары, мәҙәниәт һәм элемтә объекттарына, күп фатирлы йорттарҙа дөйөм милеккә ҡаршылыҡһыҙ үтеүгә, шулай уҡ уларҙы реабилитациялауҙы тәьмин итеүгә йүнәлтелгән аныҡ положениелар хаҡында һүҙ бара. Дөйөм алғанда, ҡануниәттәге үҙгәрештәр транспорт һәм элемтәгә, сәнәғәткә, ергә хоҡуҡҡа, тәбиғәтте һаҡлау буйынса эшмәкәрлеккә, тәбиғи ресурстарға, төҙөлөшкә, ҡала төҙөлөшө һәм архитектураға, сауҙаға, торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа һ.б. ҡағыла.

# ЙӘШ СПОРТСЫЛАР - АВСТРИЯЛА



**Австрияның Инсбурк ҡалаһында VII Ҡышҡы Халыҡ-ара балалар уйындары башланды. Унда Өфөнән 16 спортсы ҡатнаша. Барлығы уйындарға 22 илдең 54 ҡалаһынан делегациялар барған.**

Башҡортостандың баш ҡалаһы делегацияһын хакимиәт башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов етәкләй. 2013 йылдың ҡышында бындай уйындар Өфөлә үткәйне. Унда ҡатнашыусылар әлегәсә Өфө һәм Уйындарҙың ойоштороу кимәле тураһында йылы хәтирәләр менән йәшәй.

Ярыштарҙың беренсе көнөндә үк беҙҙең спортсылар барлыҡ дисциплиналарҙа - тау саңғыһы, сноубординг, конькиҙа йүгереү һәм биатлонда ҡатнашты. Алмаз Вәлиев (биатлон), спринтта 20-нән ашыу спортсыны уҙып китеп, алтын миҙал яуланы. Өфөнән Данис Зөбәйеров бишенсе урын алды. Ҡыҙҙар араһында Александра Федорова - алтынсы, Ульяна Борисовская 11-се урында.

Үҫмерҙәр араһында "Сноуборд-кросс" дисциплинаһында Кирилл Педь көмөш призер булды.Ҡыҙҙар араһында ошо дисциплинала Яна Вәлиева бронза миҙал яуланы. Маргарита Аҙнабаева финал ярыштары һөҙөмтәләре буйынса бишенсе урында. "Слалом-гигант" дисциплинаһында өфөләр араһында иң яҡшыһы - Артемий Исмәғилев (алтынсы урын), артабан Александр Ғәлиәкбәров (һигеҙенсе урын) килә. Ҡыҙҙар араһында Татьяна Гришина - 25-се, Елизавета Воробьева 37-се урын алды.

# ЯЛ ИТӘМ, ТИҺӘҢ...



**Башҡортостандың баш ҡалаһында халыҡтың ял итеү урындарын төҙөкләндереүгә етди иғтибар бирелә. Был йәһәттән һуңғы өс йылда ғына Өфөлә тулыһынса 21 ял зонаһы ремонтланған һәм 17 яңы зона булдырылған.**

Төҙөкләндереү эштәре барышында 185,5 мең квадрат метр самаһы майҙанға тротуар плиткаһы һалынған, 63,4 километр араға борт таштары ҡуйылған, 115,8 мең квадрат метр майҙанға төргәкле газон һалынған, 1182 фонарь (2696 светильник) ҡуйылған, 500 эскәмйә һәм шунса уҡ сүп һауыты урынлаштырылған, 4664 дана ағас, 216,3 меңдән ашыу үҫенте ултыртылған. Ял урындарын реконструкциялағанда спорт һәм балалар майҙансыҡтарын төҙөүгә лә ҙур иғтибар бирелә. Әлеге ваҡытта Еңеүҙең 50 йыллығы исемендәге скверҙа балалар һәм хоккей майҙансығы, спорт комплексы ҡуйылған. Был эш артабан башҡа ял зоналарын ремонтлағанда ла дауам ителәсәк.

2016 йылда Өфөлә В. И. Ленин исемендәге майҙанда фонтан төҙөү, И. Якутов, М. Ғафури исемдәрендәге, "Беренсе май", "Нефтехимиктар" мәҙәниәт һәм ял, Еңеү парктарын, В. Маяковский, В. И. Ленин исемендәге скверҙарҙы, Дан бульварындағы аллея һәм Дорофеев урамындағы бульварҙарҙы ремонтлау планлаштырыла.

# ХОСУСИЛАШТЫРЫП ҠАЛ!

**Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала 560 446 торлаҡ фонды объекттарына ҡарата граждандарҙың 1 196 970 хоҡуғы теркәлгән.**

Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, 2013 йылдың башында төбәктә, бөтә илдәге кеүек үк, торлаҡты хосусилаштырыу әүҙемләште. Ул ваҡытта март айында ғына торлаҡ биналарына 10 585 хоҡуҡ теркәлгән. 2014 йылда хосусилаштырыу сиктәрендә граждандарҙың теркәлгән хоҡуҡтары һаны кәмене, әммә ай һайын республика биләмәһендә 3500 самаһы хоҡуҡ теркәлде.

Башҡортостан халҡына сираттағы тапҡыр бушлай хосусилаштырыу ваҡытының тамамланыуы хаҡында иғлан ителгәс, 2014 йылдың аҙағында 2015 йылдың башында мөрәжәғәттәр күбәйә башланы, тип билдәләнеләр Росреестрҙа. Күптәр быны 2015 йылдың 1 мартына ҡәҙәр эшләп ҡалырға ашыҡты. Уҙған йылдың һуңғы айҙарында ошондай мөрәжәғәттәрҙең һаны өс меңдән саҡ ҡына күберәк тәшкил итте.

1992 йылда иғлан ителгән торлаҡты бушлай хосусилаштырыу 2007 йылдың 1 ғинуарында Рәсәйҙең яңы Торлаҡ кодексын ҡабул иткәс тамамланырға тейеш ине. Әммә һуңынан уның ваҡыты күп тапҡыр оҙайтылды - тәүҙә 2010 йылдың 1 мартына тиклем, аҙаҡ 2013 йылдың 1 мартына ҡәҙәр, артабан - 2015 йылдың 1 мартына һәм һуңғы тапҡыр 2016 йылға тиклем.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан Хөкүмәте 2015-2018 йылдарҙа граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡтан күсереү буйынса республика программаһына үҙгәрештәр индерҙе. Төбәк Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, программаның өсөнсө этабына Өфө, Әлшәй, Бәләбәй, Илеш, Шишмә һәм Яңауыл райондарындағы иҫке йорттар индерелгән.

✓Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге мәғлүмәттәре буйынса, граждандарҙың 82 проценты йәшелсәгә һәм еләк-емешкә хаҡтың артыуын билдәләй. 75 проценты - иттең, 72 проценты һөт продукттарының ҡиммәтләнеүен тойған. Халыҡтың 66 проценты - икмәккә, 62 проценты - шәкәргә, 61 проценты ярма һәм макаронға хаҡтың күтәрелеүен теркәгән. Хеҙмәттәр һәм аҙыҡ-түлеккә ҡарамаған тауарҙар араһында рәсәйҙәрҙең 74 проценты коммуналь түләүҙәрҙең ҡиммәтләнеүен, 54 проценты бензинға хаҡтың артыуын билдәләй.

✓31 декабрҙә, 5 һәм 9 ғинуарҙа Республика ҡан ҡойоу станцияһы Яңы йыл доноры көндәрен ойошторғайны. Яңы йыл каникулдарында төбәк халҡы 160 литрҙан ашыу ҡан биргән - 497 кеше донор булған, тип хәбәр итә республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте. Республика ҡан ҡойоу станцияһы Башҡортостанда төп донор үҙәге булып тора. Йыл һайын ул 100 меңдән ашыу донорҙы ҡабул итә һәм төбәктең дауалау учреждениелары өсөн 45 мең литр самаһы ҡан әҙерләй. Республикала "Почетлы донор" исеменә лайыҡ булған 10,5 меңдән ашыу кеше иҫәпләнә.

✓Декабрҙә йомғаҡлау иншаһы буйынса "икеле" билдәһен алған ун беренсе класс уҡыусылары 3 февралдә уны ҡабаттан яҙа ала. Башҡортостанда 19 181 уҡыусының 283-ө (1,47 процент) эште башҡара алмаған. 4 декабрҙә сығарылыш класс уҡыусылары йомғаҡлау иншаһын яҙҙы. Инша яҙыу ун беренсе класс уҡыусылары өсөн мотлаҡ. Уның һөҙөмтәләре Берҙәм дәүләт имтиханына инеү хоҡуғын бирә. Мөмкинлектәре сикләнгән уҡыусылар инша урынына изложение яҙа ала. Резерв көндәр - 3 февраль һәм 4 май.

✓25 ғинуарҙа Башҡортостанда Рәсәй киноһы йылын рәсми асыу тантанаһы була. Тантана Өфөләге Рәсәй кинематографияһы үҙәгендә - "Родина" кинотеатрында уҙа. "Родина" кинотеатры директоры урынбаҫары Рида Үтәшева хәбәр итеүенсә, көндөҙгө сәғәт 2-лә йәшел залда балалар "Башҡортостан" киностудияһының анимация фильмдарын ҡараясаҡ.

АФАРИН!

# ТЕЛЕН ҠӘҘЕРЛӘГӘН ХАЛЫҠ...

## үҙе лә ҡәҙерле булыр



**(Башы 1-се биттә).**

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада әллә нисә быуын уҡыусыһына ҡанат ҡуйыусы, әллә күпмеһен башҡорт теле уҡытыусыһы, журналист булырға этәреүсе сара. Быйыл да олимпиада 295 уҡыусыға үҙ белемен тикшереп ҡарау мөмкинлеге бирҙе. Шулар араһынан ун өс уҡыусы күрше Силәбе, Ҡурған, Ырымбур өлкәләренән килгәйне. Улар барыһы ла викторина һорауҙарына яуап бирер, инша яҙып, шиғыр һөйләп һәм телмәр оҫталығын күрһәтеп, тырышлыҡтары өсөн ғәҙел баһа алды. Баһалама комиссияһы ағзаһы, БДУ-ның башҡорт тел ғилеме һәм этномәҙәни белем биреү кафедраһы мөдире Рәмилә Хөснөтдинова әйтеүенсә, уҡыусыларҙың белем кимәле түбән түгел.

- Викторина һорауҙарына яуап биргәндә бер аҙ кәйефте төшөргән моменттар булһа ла, дөйөм алғанда, уҡыусылар башҡорт теленең ҡағиҙәләрен белә. Улар фонетика, морфология, синтаксис буйынса анализды яҡшы эшләй. Әммә һүҙ төркөмдәре менән һөйләм киҫәктәрен бутайҙар, сифаттан килгән хәбәрҙе айыра белмәйҙәр. Шулай ҙа инша яҙыу мәлендә Аҡмулланың әҫәрҙәрендә әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләре, заман проблемалары, милләттең киләсәге тураһындағы һорауҙарҙы асып, үҙ фекерҙәрен белдереп, йөкмәткеле итеп яуап бирә алыуҙары ҡыуандырҙы. Тикшерелгән иншалар араһында "Беҙ - милләтебеҙ киләсәге" тигән эш булғайны, ысынлап та, беҙ бөгөн ошо уҡыусылар йөҙөндә милләтебеҙҙең киләсәген, телебеҙҙе үҫтереүселәрҙе күрҙек, - тине Рәмилә Янсаф ҡыҙы, ығы-зығы, ваҡ мәшәҡәт тамамланып, эштәрҙең остарына сыҡҡас.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиаданың йомғаҡлау тантанаһында еңеүселәрҙе һәм призерҙарҙы БР Мәғариф министры урынбаҫары Венера Вәлиева, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов, РФ Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы рәйесе Зөһрә Рәхмәтуллина, ЮНЕСКО эштәре буйынса БР Комиссияһының баш белгесе Таһир Зәйнуллин тәбрикләне. Улар олимпиадала ҡатнашыусыларҙың уҡытыусыларына, ата-әсәһенә был балаларҙа телгә һөйөү тәрбиәләгән өсөн рәхмәтләрен еткерҙе. Зөһрә Рәхмәтуллина, донъяла глобалләштереү процесы барғанда, күп халыҡтар үҙ телдәрен онотҡанда, беҙҙең балаларыбыҙ башҡорт телендә һөйләшеү генә түгел, ошондай бәйгеләрҙә ҡатнашып, халҡының рухына, милләтенә тоғро булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт телен уҡытыу, балаларҙың телде белеү кимәле тураһында бик күп бәхәстәр ҡубып торһа ла, йыл һайын үткәрелгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиаданың ҡатнашыусылар һаны кәмемәүе ҡыуандыра. Быйыл уның һөҙөмтәләре буйынса йомғеһе ун абсолют еңеүсе билдәләнде, ә ун беренсе синыфтар араһында башҡорт мәктәптәренән Стәрлетамаҡ ҡалаһының Ленин исемендәге 2-се һанлы лицей-интернаты уҡыусыһы Фирғәт Шәмиғолов еңеүсе тип табылды.

- Был кимәлдәге олимпиадала тәүге тапҡыр көсөмдө һынап ҡараным, шуға быңдай юғары уңышҡа өлгәшермен тип уйламағайным да. Әммә йыл дауамында бар тырышлығымды һалып, ныҡлы әҙерләнеп килгәс, олимпиада һынауҙарын үтәүе бик үк ҡыйын булманы. Ғөмүмән, башҡорт балалары өсөн башҡорт телендә иректе һөйләшеү, инша яҙыу ҡыйын түгел. Минең өсөн әҙәбиәт теорияһы буйынса һорауҙарға яуап биреүе генә бер аҙ ауыр бирелде... - ти Фирғәт Шәмиғолов.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр, тигән һүҙҙәрҙе һәр ваҡыт иҫтә тотһаҡ, балаларыбыҙҙың башҡорт телендә һөйләшеүен ошондай олимпиадалар барышында ғына ишетеп һөйөнмәсбеҙ, ә көндәлек тормошта үҙара аралашыуҙарына ла өлгәшербеҙ. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада тағы бер тапҡыр ошо ябай хәҡиҡәткә төшөндөрҙө. Был бәйгелә ҡатнашыусы һәр бала башҡорт теленә ҡарата ихтирамлы булыуын күрһәтте.**

Сәриә ҒАРИПОВА.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ШУНДАЙ ТАШЛАМАЛАР...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин төбәктәрҙең 80 йәштән өлкән кешеләрҙән капремонт өсөн түләтмәү хоҡуғы тураһындағы законды хупланы. Күптән түгел ошо хаҡтағы указға ҡул ҡуйылды.**

Был документта "РФ субъекты законы буйынса капиталь ремонтҡа взнос түләү сығымдарын яңғыҙ йәшәгән һәм эшләмәгән торлаҡ милекселәренең 70 йәштән өлкәндәренә - 50 проценттка, 80 йәштән өлкәндәргә 100 проценттка ҡаплатыу мөмкинлеге" ҡаралыуы тураһында әйтелә. "Пенсия йәшендәге, бер ҡайҙа ла эшләмәүсе граждандар менән бергә йәшәгән" 70 һәм 80 йәштәге милекселәр ҙә ошо уҡ ташламанан файҙалана ала. Капиталь ремонтҡа взнос түләү сығымдарына 50 процент ташлама менән 1-се һәм 2-се төркөм инвалидтары, инвалид балалар һәм инвалид балалары булған граждандар ҙа файҙалана ала.

Республика парламенты пенсионерҙарҙан торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләтеүҙе еңелләштереү буйынса закон проекттарын ҡарай ҙа инде. Тыл хеҙмәтсәндәре ошо йылдан торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙә 50 процент ташлама аласаҡ. "1941 йылдың 22 июненән алып 1945 йылдың 9 майына тиклемге осорҙа (СССР-ҙың баҫып алынған территорияһында эшләгәнде иҫәпләмәйенсә) тылда алты айҙан да кәм эшләмәгән кешеләр ташламаға эйә була ала. Ошо уҡ категорияға Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы фиҙакәр хеҙмәте өсөн СССР ордендары һәм миҙалдары менән наградланған кешеләр һәм хеҙмәт ветерандары ла инә. Улар торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү сығымдарын ҡаплатыуҙа 50 процент компенсация менән файҙалана ала", тип хәбәр итте БР Дәүләт Йыйылышының Һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитеты рәйесе Николай Никитин.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ИМТИХАНДАР ЕТӘ

**Быйыл Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыуға ғаризаны 1 февралгә, төп дәүләт имтиханында (туғыҙынсы класс уҡыусылары өсөн) ҡатнашыу өсөн 1 мартҡа тиклем бирергә кәрәк, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Мәғариф министрлығынан.**

Быйыл мәктәпте тамамлаусылар Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыуға ғаризаны уҡыған урыны буйынса яҙа. Уҙған йылдарҙағы сығарылыш уҡыусылары һәм сит ил граждандары муниципаль йәки төбәк мәғариф идараларығы органында имтихан тапшырырға теркәлергә тейеш.

2016 йылда Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашыусыларға ҡағылышлы үҙгәрештәр булмаясаҡ. Аттестат алыу өсөн уҡыусыға рус теленән һәм математиканан БДИ бирергә кәрәк. Былтыр икенсе дисциплина база һәм профилле кимәлдәргә бүленде.

Быйыл туғыҙынсы класты тамамлаусыларға рус теле һәм математиканан тыш, һайлау буйынса ике предметтан һынау тоторға кәрәк. Уларҙың исемлеген ғаризала күрһәтеү мөһим. Өҫтәүенә уҡыусы үҙенең ғаризаһында дүрттән ашыу предметты күрһәтергә хоҡуҡлы.

# ДӘРЕС ВАҠЫТЫ ҠЫҪҠАРҘЫ

**2016 йылдың 2 ғинуарынан "Дөйөм белем биреү ойошмаларында уҡытыуҙы ойоштороуға һәм шарттар булдырыуға санитар-эпидемиологик талаптар" санитария ҡағиҙәләренә үҙгәрештәр ғәмәлгә инде. Үҙгәрештәр 2015 йылдың 24 ноябрендәге Рәсәйҙең баш дәүләт санитар табибы ҡарары менән раҫланған. Был хаҡта "Башинформ" агентлығына Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау һәм кеше именлеге өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт идаралығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр.**

Көн дауамында йөкләмәнең дөйөм күләме беренсе класс уҡыусылары өсөн дүрт дәрестән һәм аҙнаһына бер тапҡыр физкультура дәресе иҫәбенә биш дәрестән; 2-4 класс уҡыусылары өсөн биш дәрестән һәм аҙнаһына бер тапҡыр физкультура дәресе иҫәбенә алты дәрестән; 5-7 класс уҡыусылары өсөн - 7; 8-11 класс уҡыусылары өсөн һигеҙ дәрестән артмаҫҡа тейеш, тип билдәләнә ведомствоның белдереүендә. Физкультуранан икешәр дәрес уҙғарырға мөмкин (саңғыла шыуыу, бассейнда йөҙөү).

Беренсе класс уҡыусыларын уҡытыуға талаптар үҙгәрҙе - ғинуар-майҙа көнөнә һәр береһе 40 минутлыҡ дүрт дәрес үткәрелә. Шулай уҡ үҙгәртелгән санитар ҡағиҙәләрҙә 1-11 класс уҡыусылары өсөн компьютер һәм интерактив таҡта менән эшләү ваҡыты яҙылған. Мәҫәлән, 1-2 класс уҡыусылары өсөн дәрестә компьютер менән эшләү ваҡыты 20 минут, 3-4 кластар өсөн - 25, 5-6 кластар өсөн - 30, 7-11 кластар өсөн 35 минут тәшкил итә.

"БАШИНФОРМ".

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығыҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Сәс ҡойолһа...

❖ 1-әр ҡалаҡ бал, алоэ һуты, 1 балғалаҡ һарымһаҡ һутын быяла һауытта болғатып, һыуыҡтыста һаҡлайбыҙ. Ҡулланыр алдынан 1 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 1 йомортҡа һарыһы өҫтәп болғатабыҙ һәм баш тиреһенә һөртәбеҙ. Целлофан урап, 20 минут тотабыҙ. Йыуабыҙ һәм тағы ла 1 йомортҡа һарыһын һөртөп, сәсте сайҡатабыҙ.

❖ 100 грамм кесерткәнде 2-3 ҡалаҡ һеркә өҫтәлгән ярты литр һыуҙа 30 минут ҡайнатырға. Аҙнаһына 2-3 тапҡыр йоҡлар алдынан сәс төбөнә һөртергә.

❖ 20 грамм дегәнәк тамырына 10 грамм бәйгәмбәр тырнағы сәскәһен ҡушып, 1 литр һыуҙа 10 минут ҡайнатырға. Йылы көйөнсә баш тиреһенә һөртергә.

## Сәс тамырын нығытыу

❖ Һуғанды ҡырғыстан ҡырып, 4 балғалаҡ һуған һутына 1 балғалаҡ бал өҫтәп, 40 минутҡа баш тиреһенә һөртергә. Шампунь ҡулланмай ғына йылы һыу менән йыуырға.

❖ Башҡа массаж эшләү ҙә файҙа бирә. Уны ҡулдар йәки махсус щетка менән яһайҙар. Һәр кис сәстәрҙе 5 минут тирәһе тараҡ менән тарау уларҙы нығыта, һығылмалы һәм ялтырыраҡ итә.

❖ Сәсте дөрөҫ йыуыуға ла иғтибар бирегеҙ. Тәүҙә сәсте тарарға, һуңынан 50-55 градустағы йылы һыуҙа йыуырға. Бындай температуралағы һыу сәстәрҙе таҙарта, ҡан әйләнешен, матдәләр алышыныуын яҡшырта. Сайҡатҡанда һыуға лимон кислотаһы өҫтәргә, сөнки шампунь составындағы һелтеләр сәскә ултыра, ә әселәтелгән һыу уны сайып төшөрә. Ҡайны берәүҙәр сәсен кер һабыны менән йыуа, әммә был ныҡ зарарлы, ул сәстәрҙе киптерә.

❖ Шампунь урынына гәрсис порошогы ҡулланып ҡарағыҙ. 1 литр һыуға 2 ҡалаҡ порошок өҫтәйҙәр.

❖ 1 ҡалаҡ ҡомалаҡ тубырсығына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 30 минут төнәтергә. Сәстәрҙе ошо төнәтмә менән йыуырға.

❖ Сәстәр ҡойолоп, баш пеләшләнә башлағанда дарыуханала һатылған бәйгәмбәр тырнағы төнәтмәһен 1:3 күләмендә һыу менән иҙеп, баш тиреһенә һөртергә.

Айбикә ЯҠУПОВА.

✓ Әле юлда уҡ Фәнүр кейәүем Ҡыш бабай костюмын кейеп алды, ейәнсәрем Алина - Ҡарһылыу. Башҡаларыбыҙ ҙа хәлебеҙсә кейенешеп, Роза ҡоҙағыйыбыҙҙың урамынан икенсе бер ҡоҙағыйыбыҙҙың йортона тиклем йәйәүләп үттек.



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҺАЙЫҪҠАНДАЙ...
## һаҡ бул

**Борон "һайыҫҡан - хәбәр килтереүсе" сюжеты күп халыҡтарға хас булған. Уның ҡысҡырыуы, осошо, нисек итеп ҡайҙа ҡуныуына тиклем ҙур мәғәнә бирелгән һәм юралған. Тимәк, боронғо кешеләр һайыҫҡан кешегә генә хас юғары аҡылға эйә, тип иҫәпләнгән.**

"Урал батыр", "Иҙеүкәй менән Мораҙым", "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" (Ғ. Сәләм версияһы) эпик әҫәрҙәрендә һәм "Алтынсәс" әкиәтендә кешесә һөйләшкән һайыҫҡан образдары бар. "Төлкө менән һайыҫҡан" әкиәтендә һайыҫҡан хәйләкәрлектә хатта төлкөнө уҙҙырып ебәрә һәм уны еңә: бөркөткә ярҙам иткәне өсөн төлкө һайыҫҡанды язаға тарттырырға була. Һайыҫҡан төлкөгә уны төпһөҙ биҙрәгә ултыртып упҡынға ташларға кәңәш итә. Төлкө шулай эшләй ҙә, һайыҫҡан төпһөҙ биҙрәнән сығып осоп китә.

Башҡорттарҙа "Һаҡлыҡты һайыҫҡандан өйрән" тигән әйтем киң таралған. Ошо уҡ ҡараш яңы тыуған сабыйға: "Һайыҫҡандай һаҡ бул" тип теләк әйтеүҙә лә сағыла (Күмертау районы).

Һайыҫҡандың кешегә, кешенең һайыҫҡанға әүерелеү мотивы рус фольклорында ла ла осрай. Батырҙар тураһында урыҫ халҡының эпик йыры - былиналарҙа быны йыш күрәбеҙ, мәҫәлән, Марина Мнишек һайыҫҡанға әйләнеп осоп китә. Ғөмүмән, рустар һайыҫҡанды кендек әбейенә тиң күрәләр.

Убырлы ҡарсыҡ һайыҫҡанға әүерелә ала, тигән ышаныу ҙа булған. Рус халҡында, әгәр ҙә ихатала һайыҫҡан шыҡырлаһа, ауырлы ҡатын өйҙән сығырға тейеш булмаған. Сөнки һайыҫҡандың убырлы ҡарсыҡ булыуы ихтимал. Ул мөрйәнән өйгә инеп, ҡатындың тыумаған балаһын урлай, тип ышанғандар. Тикшеренеүселәр фаразынса, бур һайыҫҡан тигән әйтем ошонан килеп сыҡҡан. Убыр-һайыҫҡан ир-егеттән ҡурҡа, шуға ла ире өйҙә булмағанда ауырлы ҡатын билен иренең билбауы менән урап ята. Убырҙан ҡотолоуҙың тағы бер ысулы булған: ул килеп күренгәс тә ҡатын өҫтөндәге күлдәгенең иҙеүен йыртып ебәрергә тейеш булған, шул саҡта убыр ғәфү үтенеп уның аяғына йығылған (Ырымбур өлкәһе). Шулай уҡ изге ҡош һайыҫҡандың йомортҡаһын эсеү күренеше ҡыҙыҡлы. Был хәтерҙе нығыта тип иҫәпләгәндәр. Болгар халҡында һайыҫҡан "хәтер", "аң" төшөнсәләре менән бәйле. "Һайыҫҡан уның мейеһен эскән" тиҙәр улар, был аңынан яҙҙырған тигәнде аңлата. Ошо уҡ халыҡта һөт тешен һайыҫҡанға ташлайҙар. Йәғни, изге ҡош алмашҡа балаға ныҡлы тештәр бирә. "Мә, һайыҫҡан, һөт теше, миңә тимерен бир!", - тип, теште өйҙөң ҡыйығына ташлайҙар. Башҡорттарҙа иһә һөт тешен эткә ташлағандар. Төшкән теш - ул баланың үҙен белдерә, тимәк, тотем ҡош, тотем йәнлек уны үҙенә хас күркәм сифаттар менән бүләкләргә тейеш була.

Һайыҫҡандың иң төп сифаттарының береһе - күп таҡылдау, йәғни, күп "һөйләү". Шуға ла һөйләшмәгән кеше һөйләшеп китһен өсөн сербтар шундай йола үткәрә: ай тулғанда ун һайыҫҡанды үлтереп, телдәрен ҡырҡып алып, киптереп, иҙеп, шул кешегә эсергәндәр. Һипкелдәрҙе һайыҫҡан йомортҡаһы менән дауалайҙар, бының өсөн уларҙы йомортҡа менән һыйпап алыу ҙа етә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЯҢЫСА ЙОЛАЛАР

# ЯҢЫ ЙЫЛДЫ...
## урманда ҡаршыланыҡ

**Балалар үҫеп, тыуған йортобоҙҙо ташлап киткәс, бер үҙемә моңһоу булып ҡалды. Ләкин был оҙаҡҡа барманы, улар мине лә үҙҙәре янына- баш ҡалабыҙ Өфөгә күсереп алды. Ауылымды, өйөмдө бөтөнләйгә ташламаным шулай ҙа, Учалы районына, Мулдашҡа әленән-әле ҡайтып-китеп йөрөйөм.**



Әйтеүемсә, дүрт балам да - ике ҡыҙым, ике улым да Өфөлә йәшәй, бөтөнөһө лә үҙ милләтебеҙҙән иш табып, матур, етеш ғаилә ҡорҙолар, балалар үҫтерәләр. Күңелем тыныс улар янында. Ейәнейәнсәрҙәремде ҡарашам, үҙемсә тәрбиә һабаҡтары күндерергә тырышам уларға. Туған телебеҙҙе, йыр-моңдарыбыҙҙы онотмаһындар, ғаиләлә башҡортса һөйләшһендәр, башҡортса уҡыһындар - бөтөн теләгем шул. Шөкөр, балаларым бер-береһе менән үҙ-ара тығыҙ аралашып, татыу йәшәйҙәр: байрамдар, тыуған көндәр, башҡа берәй төрлө ғаилә тантанаһы булһынмы - гел бергә йыйылышып үткәреүҙе хуп күрәләр. Әйткәндәй, Яңы йылды ла беҙ ана шулай бергәләшеп-гөрләшеп ҡаршыланыҡ. Шул хаҡта ҡыҫҡаса ғына һеҙгә лә һөйләп киткем килә. Ойоштороу яғына килгәндә, ул яҡтан Рита ҡыҙымдың һәләттәрен танымау мөмкин түгел. Юҡҡа ғынамы ни ул "Пышка" кеүек эре компания төркөмөндә директор урынбаҫары вазифаһын уңышлы башҡарыусы менеджер булараҡ билдәле һеҙгә. Яңы йылды бергәләп тәбиғәт ҡосағында ҡаршылау идеяһы тап уның башына килде лә инде. Был план бөтәбеҙгә лә оҡшаны, айырыуса - балаларға! Күп уйлап торманыҡ, өс машинаға тейәлдек тә, сығып та киттек. Дөрөҫ, беҙҙең уй тәүҙәрәк Яңы йылды Торатауҙа, башҡорт Ҡыш бабайы янында ҡаршылау ине, ләкин тап 31 декабрҙә ул эшләмәй булып сыҡты. Беҙҙең маршрут шуға ла Белорет - Учалы йүнәлешенә йөҙ тотто. Ҡышҡы тәбиғәт, айырыуса Белорет яҡтарының тәбиғәт мөғжизәләренә һоҡланып, байтаҡ юл үтеп киткәнбеҙ, бына Белорет ҡалаһы ла артта тороп ҡалды, ә сәғәт уҡтары төнгө 12-гә яҡынлай. Беҙ райондың Уралтау тигән ауылы янындағы юл айырмаһында туҡталыш яһап, Яңы йылды ҡаршыларға ҡарар иттек. Бөтөн кәрәкле нәмәләрҙе, хатта утынына, самауырына тиклем үҙебеҙ менән алғанбыҙ. Тиҙ генә ҡышҡы тәбиғәт ҡосағында, ҡар өҫтөндә дөрләтеп усаҡ тоҡандырып ебәрҙек. Берәүебеҙ гармун уйнай, башҡаларыбыҙ бейей, ашарға йүнәтә - өшөргә ваҡыт та булманы хатта. Шулай итеп, ун ике тулғаны ла һиҙелмәй ҡалды. Президент В. Путиндың телмәрен тыңланыҡ та, "ура" ҡыҫҡырып, бер-беребеҙҙе ҡотлашып, Яңы йылды ҡаршы алдыҡ: ҡотло булһын, хәйерле булһын Яңы 2016 йыл! Донъялар имен торһон, тыныслыҡ, татыулыҡ алып кил барса халыҡтарға! Үҙебеҙ һау-сәләмәт булайыҡ, балаҡайҙарыма уңыш, бәхет юлдаш ит, тип һорайым Хоҙайымдан эстән генә Яңы йыл тыуған еребеҙгә аяҡ баҫҡан минуттарҙа...

Яңы йылды, шулай итеп, юлда ҡаршыланыҡ. Үҙ ғүмеремдә ошолай матур һәм ғәҙәти булмаған шарттарҙа яңы йыл ҡаршылағаным юҡ ине әле. Рәхмәт инде балаҡайҙарыма, ҡыуанып бөтә алмайым. Бер тигәс тә, ҡышҡы сәфәребеҙҙе дауам итеп, иртәгәһенә Учалыла, тыуған ауылыбыҙҙа ла туҡтап ҡунаҡ булдыҡ, туғандарҙы күрҙек, мунса яғып, күңелебеҙ булғанса сабындыҡ. Хәл-әхүәлдәрен белештек. Ҡышҡы сәйәхәтебеҙ маршрутын артабан Силәбе өлкәһендә дауам иттек. Марат улымдың кәләше Флүрә киленебеҙҙең тыуған яҡтары - Уй районы Булат ауылына табан киттек "туп-тура ҡарап", Туҡайса әйткәндә. Унда ла беҙҙе әҙерләнеп көтөп торғандар. Әле юлда уҡ Фәнүр кейәүем Ҡыш бабай костюмын кейеп алды, ейәнсәрем Алина - Ҡарһылыу. Башҡаларыбыҙ ҙа хәлебеҙсә кейенешеп, Роза ҡоҙағыйыбыҙҙың урамынан икенсе бер ҡоҙағыйыбыҙҙың йортона тиклем йәйәүләп үттек. Урам тулы халыҡ - беҙҙе сығып ҡарап ҡалалар, ә беҙгә - ҡыҙыҡ! Силәбеләр бик ҡунаҡсыл, ихлас халыҡ. Етеш, бай йәшәйҙәр, күп итеп мал аҫырайҙар, шуға ла һуғымдары мул: йылҡы, ҡаҙ ите, ҡаҙылыҡтары, тултырмалары - табындары һыйҙан һығылып тора. Бишбармаҡты беҙҙәге кеүек, телende йоторлоҡ итеп бешерәләр. 2 ғинуар көнө шулай ҡунаҡ булып, 3-ө көнө сәфәребеҙҙән ҡәнәғәт булып, ҡайтып киттек. Бына был, исмаһам, байрам булды бөтәбеҙгә лә. Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр Яңы йылды гел генә өйҙә ултырып, бер ҡайҙа сыҡмай, ашапэсеп ҡаршыларға ғәҙәтләнгән. Үҙем дә элегерәк ауылда йәшәгәндә шулай итә инем. Клубҡа сығып килһәң - киләһең, сыҡмаһаң, ятаһың да йоҡлайһың. Хәҙер, бындай сәйәхәтебеҙҙән һуң, мин улай итә алмам инде: бигерәк матур, серле, илаһи төн икән ул - тәбиғәттә Яңы йыл төнө!

**Лилиә НАФИҠОВА,**
**хаҡлы ялдағы медицина хеҙмәткәре.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...



# БОҘ ҺЫНДАР...
## ауылдарға ла байрам килтерә

**Ни тиһәң дә, мөсәл алмашыныуы кеше күңелендә яңы өмөттәр уята. Һәр кем проблемаларҙы иҫке йылда ҡалдырып, тик яҡшы уйҙар, күтәренке кәйеф менән яңы йылға аяҡ баҫырға теләй. Бер аҙға ғына булһа ла тылсым көсөнә, мөғжизәгә һәм әкиәткә ышанып, уй-хыялдарҙың ысынбарлыҡҡа әйләнеүенә өмөт итә. Был байрамдың тағы бер мөһим сифаты - ул бөтә кешеләрҙе ойоштороп, бер-береһенә иғтибарлыраҡ булырға өйрәтә.**

Мәҫәлән, быйыл Баймаҡ районы ауыл биләмәләре араһында ҡарҙан һәм боҙҙан эшләнгән ҡаласыҡтар буйынса ярыш ойошторолған. Был ҡаласыҡтарҙың төрлөлөгө, матурлығы иҫ китерлек. Мәҫәлән, райондың "Боҙ ҡаласыҡтары" конкурсында Гран-при яулаған Түбәнге Иҙрис ауылы халҡы ҡарҙан һәр ун ике мөсәлдең һынын әүәләгән, әкиәт геройҙарын, санаға егелгән аттар, йәнлектәр, һырғалаҡтар эшләгән. Түбәнге Иҙристәргә ысын башҡорт Ҡыш бабайы һәм Ҡарһылыуы килгән, улар ауыл халҡына байрам кәйефе һәм күңелле ял бүләк иткән. Ошо көндө ауылға ҡунаҡҡа ҡайтып төшкән Ғәзиз Ғарифуллин әйтеүенсә, балалар һәм ололар өсөн ойошторолған тамаша бөтә ауылдаштарҙы берләштереп, күңелдәрен күтәреп, Яңы йылдың мөғжизәле һәм күңелле байрам булыуына тағы бер ҡат инандырған. Әйткәндәй, Түбәнге Иҙрис ауылы ошо "Боҙ ҡаласыҡтары" конкурсында йыл да әүҙем ҡатнашып, призлы урындар яулай икән. Быйыл район кимәлендәге еңеүе өсөн бөтә ауылдаштар Граф күленә барып ял итеү мөмкинлеге алған.

Баймаҡ районының Билал ауылы биләмәһенә ҡараған ауылдар буйлап ҡар һәм боҙҙан эшләнгән ҡаласыҡтарҙы тикшереп йөрөгән баһалама ағзаһы Райхана Булатова менән аралаштыҡ.

- Сәфәребеҙ Һәмән ауылынан башланды, - тип һөйләне ул. - Ундағы халыҡтың сослоғона, егәрлегенә, берҙәмлегенә һәр ваҡыт һоҡланабыҙ. Был бигерәк тә Туҡмаҡ урамында һиҙелә: Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, бер түгел ике

*ТӨП СЫҒАНАҠ*

**Билдәле булыуынса, XVIII - XIX быуаттың беренсе яртыһында Рәсәй төрлө илдәр кешеләре өсөн "барырға ашҡынып торған ер"гә (земля обетованная) әйләнә. Рәсәй дәүләтенең мәнфәғәттәрен һанға һуҡмаған, еңел тормош, байлыҡ һәм дәрәжә эҙләп килгәндәр байтаҡ була. Әммә араларында илдең иҡтисадын, уның хәрби һәм сәйәси ҡеүәтен, фәнен һәм мәҙәниәтен үҫтереүгә булышлыҡ иткәндәрҙе лә осратырға мөмкин. Һуңғылар иҫәбенә И.Ф. Бларамбергты индерергә була.**



# БАШҠОРТТАР ТУРАҺЫНДА МӘҒЛҮМӘТ...

## Бларамберг хеҙмәттәрендә

Иван Федорович Бларамберг (Иоганн фон Бларамберг) 1800 йылда Майндағы Франкфурт ҡалаһында тыуа. 1820 йылда ул Гессен университетына уҡырға инә, математика, статистика, хоҡуҡ белеме курстары буйынса лекциялар тыңлай. 1823 йылда атаһының ҡустыһы, билдәле археолог, 1797 йылдан алып Петербургта, Одессала йәшәгән Иван Павлович Бларамбергтың саҡырыуы буйынса Рәсәйгә килә. Иоганн тәүҙә бер йыл тирәһе Мәскәүҙә йәшәй, урыҫ телен, тарихты, географияны өйрәнә. 1824 йылда Рәсәй гражданлығын ҡабул итә һәм Иван Федорович Бларамберг булып китә. 1825 йылда ул Юл төҙөү корпусы институтына уҡырға инә һәм 1826 йылда уны иң алдынғы уҡыусылар рәтендә тамамлап, поручик чины ала. Шулай итеп, Иван Федорович Рәсәй дәүләтенә тырышып хеҙмәт итә башлай.

Бларамберг 1840-1855 йылдарҙа Көньяҡ Уралда, Ырымбур губернаһында хеҙмәт итә. 1840 йылда уны подполковник чинында Айырым Ырымбур корпусына ебәрәләр. 1841 йылда ул хәрби отряд башлығы вазифаһында Бохара һәм Хиуа дипломатик миссияларын һаҡлап бара. Шул ваҡытта Бларамберг Ҡаҙағстан далалары, уға сиктәш Рәсәй губерналары, ундағы халыҡтар тураһында материал йыя башлай. 1845 йылда И.Ф. Бларамбергты Айырым Ырымбур корпусының обер-квартирмейстеры итеп ҡуялар һәм уға полковник дәрәжәһе бирелә. 40-сы йылдарҙа Иван Федорович эше буйынса Ҡаҙағстанда, Башҡортостанда күп тапҡыр була, ул ерҙәрҙә топографик тикшереүҙәр үткәрә, карталар төҙөй. 1853 йылда генерал-губернатор В.А. Перовскийҙың Аҡ Мәсеткә походында ҡатнаша. Әйткәндәй, И.Ф. Бларамберг В.А. Перовский менән яҡын таныш була. 1852 йылда Бларамбергка генерал-майор чины бирелә. 1855 йылда уны Петербургка хәрби министр ҡарамағына күсерәләр. Шулай итеп, Иван Федорович Бларамбергтың Ырымбурҙағы ун биш йыллыҡ хеҙмәте тамамлана.

И.Ф. Бларамберг үҙенең хәтирәләрендә байтаҡ урынды ғүмеренең Ырымбур осорона бағышлай. Бында ул Көньяк Уралдың тәбиғи-географик шарттары тураһында ентекләп яҙа. Ырымбур крайында төрлө халыҡтар йәшәгәнлеген билдәләй һәм уларҙың ҡайһылары тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирә. Башҡорттар тураһында Бларамберг былай тип яҙа: "Башҡорттар Ырымбур губернаһының бөтөн округтарында тиерлек таралып ултырған. Улар Вятка губернаһының көнсығыш округтарын, Пермь губернаһының көньяғын, шулай уҡ Урал казактарының төньяҡ ерҙәрен биләй". Бөтә башҡорттар мосолман динен тота, тип тә әйтеп үтә. Ул: "Башҡорттарҙың бер өлөшө ултыраҡ ғүмер итә һәм игенселек менән шөғөлләнә, ҡалғандары тик көҙгөһөн һәм ҡышҡыһын үҙҙәренең йорттарына күсә. Май айынан алып 15 сентябргә тиклем улар ауылдарынан 5-30 саҡрым алыҫлыҡта күсмә тормош менән йәшәй, малсылыҡ һәм ҡортсолоҡ менән шөғөлләнә. ...Ҡыш көнө башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йөн иләй, өй эштәрен башҡара. Яҙ етеү менән башҡорттар ауылдарын ҡалдырып, мал-тыуар һәм кәрәк-яраҡтарын алып, бай көтөүлектәргә, күрше далаларға, тауҙарға сығып китә", - тип яҙа. Бларамберг башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте тураһында ла әйтеп китә: "1848 йылда башҡорттар һәм мишәрҙәр 17 кантонға бүленә. Ырымбур сик буйы һыҙаты (Оренбургская пограничная линия) эргәһендәге дүрт кантондың халҡы хәрби хеҙмәткә алына, ә ҡалған кантондар башҡорттары, мишәрҙәре хеҙмәт итеү урынына йыл һайын өс көмөш һум түләй. ...1847 йылда 16 мең башҡорт хәрби хеҙмәттә тора, 68626 кеше хәрби хеҙмәттән сыҡҡан була". Бларамберг хәтирәләрендә крайҙа йәшәгән казактар, мишәрҙәр, сыуаштар, татарҙар, типтәрҙәр, мордвалар, ҡалмыҡтар тураһында ла яҙа. Автор шулай уҡ Өфө, Ырымбур, Стәрлетамаҡ ҡалалары, йылғалар, рудниктар, заводтар һәм башҡалар тураһында ҡыҙыҡлы белешмәләр бирә. И. Ф. Бларамберг хәтирәләрендә күп тапҡыр Башҡортостан менән һоҡланыуын белдерә һәм йыш ҡына "Башҡортостан гүзәл һәм бай ил" тип ҡабатлай.

Шулай итеп, генерал-лейтенант Иван Федорович Бларамбергтың хәтирәләре бөгөн дә Көньяҡ Уралдың, сиктәш ерҙәрҙең географияһын, тарихын, этнографияһын өйрәнеүселәргә бай һәм ҡыҙыҡлы сығанаҡ булып тора.

**Айбулат ПСӘНЧИН,**
**география фәндәре докторы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Воскресенский заводын 20-се числола ҡалдырып, кискә табан Бүләк тигән башҡорт ауылы йәйләүенә килеп еттек. Ул Бүләк старшина исеме менән аталған, заводтан 50 саҡрым тирәһендә урынлашҡан. Старшина беҙҙе бик алсаҡ ҡаршыланы; беҙ уның тирмәһенә инеп тә өлгөрмәнек, унда башҡорттар килеп тулды. Уларҙың һәр ҡайһыһы беҙҙең бында килеүебеҙҙең ысын сәбәбен белергә тырышты. Тәржемәсе аша аңлатып ҡараһаҡ та (сөнки башҡорттар араһында русса һөйләшеүселәр һирәк), уларҙың шикләнеүен күрҙек һәм үҙебеҙҙең дөрөҫ һөйләүебеҙгә ышандырыу өсөн татарсаға тәржемә ителгән Ырымбур губерна канцелярияһы указын уҡып ҡарарға бирҙек. Ул башҡорттарҙа беҙгә ҡарата ныҡлы ышаныс ҡына түгел, ихтирам да уятты. Уларҙың иң ололары, сүгәләп ултырып, әлеге указды үҙҙәренең башына һалып күрһәтте, был уларҙың указға һис һүҙһеҙ буйһоноуын һәм ярарға тырышыуын белдерә ине.

Шул ыңғайы башҡорттарҙың бүленеше һәм тәртип ҡағиҙәләре тураһында иҫкә алып, уҡыусыбыҙ иғтибарын ҡәнәғәтләндерәйек. Башҡорттарҙың олоҫтарға һәм юлдарға (дороги) бүленеше хаҡында статский советник Рычков әфәнде үҙенең "Ырымбур топографияһы"нда бик төплө яҙып ҡалдырған. Ә мин уларҙың эске бүленеше хаҡында әйтеп үтәм. Башҡорттар араһында старшина беренсе шәхес һанала. Олоҫтарҙа уларҙың һаны төрлөсә, һәм һәр старшина ҡулы аҫтында күпмелер һандағы өйҙәр була. Старшина улар араһында артыҡ ҙур әһәмиәткә эйә булмаған эштәрҙе тикшереп, ҡул аҫтындағыларға яза биреү хоҡуғына эйә. Башҡорттарҙы линия хеҙмәтенә нарядҡа тәғәйенләү, йәиһә ниндәй ҙә булһа ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә айырым төркөмдәр төҙөп ебәреү тәртибен билдәләү ҙә уның ҡарамағында була. Ул шәриғәттә төп урынды биләүсе булып тора; партияларҙа башҡорттарға баш була; хөкүмәт указдары улар исеменә ебәрелә, шуның өсөн улар үҙ халҡы тарафынан ихтирам ителеп, шунан дан менән бергә килем дә ала; көтөүсе лә көтөүенән алып туҡлана бит. Старшина чинын улар Ырымбур губерна канцелярияһы билдәләүе буйынса һәм, башлыса, халыҡ теләгенә ярашлы ала.

Старшинанан түбәнерәк баҫҡысты старшина ярҙамсыһы биләй, уға бер ни тиклем идара итеү хоҡуғы бирелә, бер старшина китеп, икенсеһе ҡуйылғансы, төп урынды ул биләй. Старшина ярҙамсыларынан һуң һәр йөҙ кешегә баш булған йөҙ баштары (сотниктар) килә, уларҙың бар власы ҡул аҫтындағыларҙы тикшереп тороуҙан ғибәрәт була, сөнки уларға тән язаһы ҡулланыу хоҡуғы бирелмәгән. Һәр старшина янында Ырымбур губерна канцелярияһы указы менән мишәрҙәрҙән тәғәйенләнгән писарь булып, уны бар нәмә менән тәьмин итеү башҡорттарға йөкмәтелә. Яҙыу эштәрен башҡарыуҙан тыш, улар башҡорттарҙың нимәләр эшләүен күҙәтеп, тикшереп тора; ебәрелгән указдарҙың теүәл үтәлеүен тәьмин итә; дөйөм тыныслыҡ булдырыу уларҙың төп бурысы булып, уның боҙолоуы хаҡында аҙ ғына булһа ла шик сыға ҡалһа, ул ошо хаҡта тейешле урындарға хәбәр итә. Башҡорттар араһында тейешле даирәләр тарафынан билдәләнеүсе төп шәхестәр ошолар була ла инде. Бында ебәрелгәндәрҙе хеҙмәтләндереү өсөн, башҡа ауылдарҙағы кеүек үк, ылау биреү тәртибен һәм башҡа эштәрҙе белеүсе старосталар һәм десятскийҙар һайлап ҡуйыла.

**(Дауамы бар).**

арыҫлан, ярты урам булып ятҡан йылан, кәрзинен элеп алған кәзә, йыл символы маймыл, фил, жираф - быларҙың барыһын да оҫта ҡуллы һәмәндәр эшләгән. Шулай уҡ Билал ауылының мәктәп урынлашҡан урамындағы боҙ һындарҙың күплегенә иҫ китте. Уларҙы һәр уҡыусы, уҡытыусы, балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре атаәсәләр менән берлектә эшләгән. Күгиҙел ауылының һәр урамын саналар егелгән аттарға ултырып, ел уйнатып елеп ҡарап сыҡтыҡ, урындағы халыҡтың уңғанлығы, ҡунаҡсыллығы һәм талантлы булыуы һоҡландырҙы. Баймаҡ районы сигендә ятҡан Өмөтбай ауылының урамдарын байҡап сығып, клубҡа килеп еткәндә тамам ҡараңғы төшкәйне. Беҙҙе ҡупшы шыршы янында әйлән-бәйлән уйнап йөрөгән балалар, клуб хеҙмәткәрҙәре ҡаршы алды. Бер көн эсендә әллә күпме кешеләр менән аралашып, балаларҙың урам тулып сыр-сыу килеп уйнап йөрөүен күргәндән һуң, Яңы йыл байрамы алдынан ошондай конкурстар үткәреү ғаиләләрҙең һәм күршеләрҙең үҙ-ара татыулығына этәргес булыуына төшөнөп ҡайттым. Оҙайлы ялдарҙа ауыл балалары, өләсәй-олатаһына ҡунаҡҡа килгән бәләкәстәр ҙә кинәнеп уйнағандыр әле ошо матур ҡаласыҡтарҙа, - тип тәьҫораттары менән бүлеште Райхана Эдуард ҡыҙы.

Баймаҡтар Яңы йылды боҙ һындар эшләп ҡаршылаһа, уларҙың күршеләре әбйәлилдәр байрамға арнап, клубтарҙа мажаралы тамашалар ойошторған. Амангилде ауылының клуб мөдире Зифа Ҡужахмәтова әйтеүенсә, Яңы йылды мажаралы тамаша, лотерея уйыны, матур концерт менән ҡаршы алыу амангилделәрҙә матур йолаға әйләнгән.

- Яңы йыл байрамының мажаралы тамашаһына декабрь башында уҡ әҙерләнә башлайбыҙ. Сөнки ауылдаштар был кисәнең ҡыҙыҡлы, матур ял итеп ҡайтырлыҡ булыуын теләй, - тип һөйләй ул. - Халыҡ иҫке йылдың ауырлыҡтарын, күңелһеҙ минуттарын артта ҡалдырып, Яңы йылға күтәренке кәйеф, яҡты уй-хыялдар менән аяҡ баҫырға тырыша. Шуға мөғжизәле мажаралар тап ошоға булышлыҡ итер, тигән ышанысыбыҙ бар. Әйткәндәй, был саралар ололарға һәм йәштәргә айырым үткәрелә. Быйыл тамашаға алтмыш йәшкә еткән олпат ир-аттарҙың күп килеүе ҡыуаныслы булды, улар араһынан 37 кеше маскарад костюмында килде, 12 кеше беҙҙең сәхнәләштереүҙә ҡатнашты. Йыл да лотерея уйыны уйнатабыҙ, уның бүләктәрен ауылдаштар үҙҙәре билдәләне. Быйыл иң уңышлы кешеләргә бер тоҡ һоло, бер төк бесән, ун бәйләм селек һеперткеһе, өс тоҡ бойҙай кеүек кәрәкле әйберҙәр эләкте. Беҙҙең сараны үткәрергә булышлыҡ итеүсе ауылдаштар араһында бағыусыларыбыҙҙың бик йомарт һәм ярҙамсыл булыуын да әйтеп киткем килә. Ауыл халҡының сараны күтәрмәләп килеүен, клуб хеҙмәткәрҙәре үткәргән уйын-ярыштарҙа ихлас ҡатнашыуын тырышлығыбыҙ өсөн бирелгән баһа тип ҡабул иттек. Әйткәндәй, 13 ғинуар иҫкесә Яңы йылды ҡаршы алғанда бағыусыларҙың ғаиләләрен, ауыл халҡы өсөн байрам ойоштороорға ярҙам иткән үҙешмәкәр фольклор һәм вокаль ансамблдәре ағзаларын, ауылдаштарҙы саҡырып, "Зәңгәр ут" кисәһе үткәрҙек.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

***✓ Әлбиттә, иҡтисади яҡты ла онотторға ярамай, инвестицияларҙы ҡалаларға ғына түгел, хатта ауылдарға йәлеп итеү юлдары эҙләнһен ине. Ауыл халҡында ер бар, ә бит уны эшкәртергә, ашларға техникаһы ла, башҡаһы ла кәрәк.***

# Йәмғиәт фекеренә фән өсөн дә,

**Социология - йәмғиәтте өйрәнеү фәне, тағы ла ябайлаштырыбыраҡ әйткәндә, кешеләрҙе өйрәнеү ысулдарының береһе. Ә бөгөнгө ҡатмарлы заманда, йәмғиәттә ярлылар һәм байҙар, белемлеләр һәм белемһеҙҙәр, тағы ла шундай ҡапма-ҡаршы аңлатмалы категориялар барлыҡҡа килгәндә, власть менән халыҡ араһында бәйләнеш алыҫлашҡан кеүек тойолғанда, йәмғиәт фекеренә ҡолаҡ һалыу бик тә кәрәктер, моғайын. Был хаҡта социологтар үҙҙәре ни уйлай икәнлеген асыҡлау маҡсатынан Рәсәй Фәндәр академияһы Социология институтының Башҡортостан филиалы директоры, Кеше потенциалын өйрәнеү үҙәге етәксеһе, социология фәндәре кандидаты Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ менән уның урынбаҫары, ғаилә һәм демография мәсьәләләрен өйрәнеү лабораторияһы мөдире, тарих фәндәре кандидаты Гөлдәр ХИЛАЖЕВАны әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

**▸ Бөгөн ил, дәүләт етәкселәре үҙҙәренең сығыштарында, Мөрәжәғәтнамәләрендә кеше факторына етди иғтибар бүлергә саҡыра, уның ҡеүәтен (потенциалын) үҫтереүгә өндәй. Социологияла ла төп урында кеше тора һәм ул кеше потенциалын нисек аңлата?**

**Р. Вәлиәхмәтов:** Яуап биреүҙе мин шундай асыҡлауҙан башлар инем: кеше был тормошта нимә өсөн, кем өсөн йәшәй, йәшәүенең мәғәнәһе нимәлә? Күп ваҡытта был мәсьәләне бары тик иҡтисади күҙлектән сығып ҡына баһалайҙар: кеше эшләргә, хеҙмәте өсөн баһа, йәғни аҡса, ниндәйҙер килем алырға һәм ошо хеҙмәте ярҙамында үҙен-үҙе хәстәрләргә, шул уҡ ваҡытта илде лә ҡайғыртырға бурыслы. Бының менән өлөшләтә ризалашырға мөмкин, әммә был ғына мәсьәләне тулыһынса асмай әле. Кешенең йәшәйеш мәғәнәһе икенселә: ул тыуа, тәүҙә үҙе өсөн белем һәм һөнәр ала, һуңынан, балаларым, тип йәшәй, эшләй, үҙенең белемен үҫтерергә, сәләмәтлеген нығытырға тырыша. Быларҙың барыһы өсөн аҡса кәрәк, шуға ла ул ғүмер буйы аҡса табыр өсөн эшләй. Йәғни, ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, кешенең йәшәү маҡсаты - үҙен белем, сәләмәтлек, мәҙәниәт яғынан тулыһынса ҡайғыртыу, тәьмин итеү, үҫтереү. Бында, әлбиттә, дәүләт, йәмғиәт ярҙамынан тыш бер ниндәй һөҙөмтәгә өлгәшеп булмай, шуға ла кеше факторын, уның ҡеүәтен үҫтереүгә комплекслы ҡараш булырға тейеш.

Бөгөн республикала кеше потенциалын үҫтереү концепцияһының нигеҙе бар тип әйтергә була, беҙ шуға таянып эшләйбеҙ. Эшебеҙ һөҙөмтәһендә оло күләмле (һәр береһе өс йөҙ биттән торған) кеше потенциалын үҫтереүгә арналған өс доклад донъя күрҙе. Рәсәй төбәктәре араһында улар беренсе булып баҫылып сыҡты. Был эшкә Пермь крайында ғына тотоноп ҡараһылар, әммә уларҙың тейешле методикаһы булмау арҡаһында бер дөйөм доклад менән генә сикләнделәр. Методика мәсьәләһенә килгәндә - уның нигеҙендә кеше сәләмәтлегенең, белеменең һәм килеменең (эш хаҡы һәм башҡа төрлө матди табыштар) күрһәткестәре һәм уртаҡ интеграль индексы иҫәпләнеүе тора. Был беҙгә бик ҡыҙыҡлы күренде һәм әлеге ваҡытта тулыһынса ошо методиканы ҡулланып эшләргә тырышабыҙ. Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәре юғары кеше потенциалын тотоп килә, шулар рәтендә Башҡортостан да бар. Ләкин шуны ла әйтеп китергә кәрәк: республикабыҙ алдынғылар рәтендә булһа ла, өс-дүрт йыл инде уртаса интеграль дөйөм күрһәткес - индикатор буйынса бер урында тапанабыҙ, күп кенә өлкәләр ошо арала алға сығып өлгөрҙө. Кеше потенциалын, әлбиттә, үҫтерергә кәрәк, уның күп кенә юлдары бар. Хатта республика өсөн айырым Кеше потенциалын үҫтереү программаһы эшләү һәм уны комплекслы тормошҡа ашырыу бик файҙалы булыр ине.

**▸ Ниндәй күрһәткестәр алға китергә ҡамасаулай һуң?**

**Р. Вәлиәхмәтов:** Беҙгә әле иң ныҡ ҡамасаулағаны: эш хаҡы, унан да бигерәк, башҡа сығанаҡтарҙан тупланған килем. Йән башына уртаса килем буйынса Рәсәй күрһәткестәренән бик артта ҡалабыҙ. Икенсе күрһәткес - мәғариф индексы тигән төшөнсә бар. Уға тағы ике өҫтәмә индекс инә: халыҡты, йәғни алты йәштән 24 йәшкә тиклем балаларҙы һәм йәштәрҙе мәғариф учреждениеларына күберәк йәлеп итеү. Улар белем биреү учреждениеларына ни тиклем күберәк йәлеп ителә, шул тиклем был индекс та арта. Үкенескә күрә, мәғариф индексы, йәғни белем биреү дәрәжәһе буйынса ла позицияларыбыҙҙы юғалттыҡ. Шулай уҡ ҡайһы бер төбәктәр дөйөм индексты кешенең уртаса ғүмер оҙонлоғо ярҙамында "ҡаплайҙар" ҙа, алғараҡ сығалар. Ә беҙ алға сыға алмайбыҙ, сөнки республика халҡының ғүмере һиҙелерлек итеп артмай. 4-5 йыл элек уртаса күҙалланған ғүмер оҙонлоғо буйынса Рәсәйҙең уртаса күрһәткесенән алдараҡ бара торғайныҡ, бер ни тиклем бер иш килдек тә, хәҙер саҡ ҡына төштөк. Шулай ҙа, әйтеп китеүемсә, кеше потенциалы юғары булған 20 төбәк иҫәбендә торабыҙ әле.



***Кеше потенциалын үҫтереү өсөн, концепция яғынан ҡарағанда, ҡалала шарттар һәйбәтерәк. Әммә бизмәндең икенсе яғында башҡортлоҡто, башҡорт рухын, мәҙәниәтен, телен һ.б. нисек һаҡлап ҡалырға тигән һорау тора. Мин бында ныҡ итеп уйланылған, айырым махсус бер сәйәсәт алып барылырға тейеш, тип уйлайым. Хатта Көнбайыш илдәренең тәжрибәһен үҙебеҙгә алһаҡ та насар булмаҫ. Уларҙа хәҙер, киреһенсә, ҡалаларҙан ауылға тартылалар. Беҙгә лә шундай программа булдырырға кәрәк. Ауыл биләмәләрендә, район үҙәктәрендәге кеүек, белем биреү, мәҙәниәт усағы, китапхана, фельдшер-акушер пункттары бер ҡыйыҡ аҫтында булған комплекслы үҙәктәр төҙөү маҡсатҡа ярашлы булыр ине, минеңсә. Сөнки ауыл халҡына ла тейешле шарттар тыуҙырылыуы зарур. Тимәк, ауыл ғына ҡалаға түгел, ҡала ла үҙенең инфраструктураһы, тәжрибәһе, белеме, белгестәре менән ауыл яғына йөҙ бороп, ауыл яғына тартылырға тейеш.***

**Г. Хилажева:** Кеше потенциалын тап демография процестары асыҡ сағылдыра. Республиканы беҙ уҙған быуаттың 70-80-се йылдарында академик Мазһар Иҫәнбаев бүлгән ете социаль-иҡтисади зона (үҙәк, төньяҡ-көнбайыш, көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш, төньяҡ, Урал, көньяҡ) буйынса тикшерәбеҙ һәм, дөйөм алғанда, ҡыҙыҡлы һөҙөмтәләр күрергә мөмкин. Мәҫәлән, был зоналарҙың иҡтисади йәһәттән үҫеше төрлө булғанлыҡтан, уларҙа социаль һәм демографик процестарҙа ла айырма бик ҙур. Тимәк, кеше потенциалын үҫтереү өсөн шарттар ҙа төрлө. Ауыл ерҙәрендә был шарттар юҡ, тиергә мөмкин, быны тыуым, үлем һәм миграция процестары ла асыҡ сағылдыра. Бер яҡтан, тыуым ҙур, ләкин үлем күрһәткестәре лә юғары, шуға күрә, тәбиғи артым буйынса ауылдар ҡалаға ҡарағанда, хатта мегаполистарҙа тыуым түбәнерәк булһа ла, арттараҡ тора.

Демографик процестарҙы сағыштырғанда, ҡала менән ауыл - икеһе ике донъя кеүек. Быға тормош кимәленең төрлө булыуы ла, инфраструктура ла йоғонто яһай, үлем күрһәткесе генә түгел, миграция процестары ла булышлыҡ итә. Үкенескә күрә, беҙ тап ауыл ерендә кеше потенциалын юғалтабыҙ. Бында шуны билдәләп китергә кәрәк, демографтар халыҡты өс төп төркөмгә бүлә: хеҙмәткә яраҡлы йәштән бәләкәйҙәр, хеҙмәткә яраҡлылар һәм ололар. Тап ошо хеҙмәткә яраҡлылар, бигерәк тә ир-ат, сәләмәтлек буйынса ла, үлем буйынса ла, миграция буйынса ла ныҡ ауыр хәлдә. Дөйөмләштереп әйткәндә, республика халҡының бөтөн күрһәткестәр буйынса ла ҡатмарлы хәлдә булған уртаса тибын шулай ҡылыҡһырларға мөмкин: ул 30-40 йәштәрҙәге, сәләмәтлеге лә, эш урыны ла, ғаиләһе лә булмаған ауыл ир-аты.

**▸ Башҡортостан райондары социаль-иҡтисади күрһәткестәр буйынса ныҡ айырыла, тинегеҙ. Хәҙер күпселек төбәктәрҙән халыҡ йә күпләп күсенә, йә ситкә эшкә китә...**

**Г. Хилажева:** Миграцияны беҙ өс ағымға бүлеп ҡарайбыҙ: эске, төбәк-ара һәм халыҡ-ара. Республикала 70 процент тирәһе эске миграция күҙәтелә. Нигеҙҙә, халыҡ үҙәк зонаға, йәғни Өфө тирәһенә күсенә. 20-30 процент самаһы - төбәк-ара миграция. Был ағым бөгөн иң көнүҙәк проблемаларҙың береһе булып тора. Сөнки тап ошо төбәк-ара миграция һөҙөмтәһендә беҙ кеше потенциалын юғалтабыҙ. Иң сәләмәт, иң аҡыллы, иң әүҙем, иң йәш, ғаилә ҡороп, демографик үҫешкә йоғонто яһарҙай кешеләребеҙ ситкә китә. Халыҡтың ситкә китеү йәһәтенән һәр саҡ минус менән киләбеҙ.

Халыҡ-ара миграцияға килгәндә, Башҡортостандың демографик үҫеше өсөн улар әллә ни йоғонто яһамаһа ла, барыбер иҡтисади һәм йәмғиәттәге эмоциональ мөхиткә, психологик торошҡа тәьҫир итә.

**▸ Һуңғы ваҡытта, башҡорттарҙы ауылда ҡалдырырғамы, әллә ҡалаға күсерергәме, тигән бәхәстәр йыш ишетелә. Сөнки оптималләштереү процестары тәү сиратта ауылдарға ҡағылды, мәҙәни-көнкүреш объекттары ябылды. Тимәк, урбанизация процестары ҡотолғоһоҙ һәм шунһыҙ беҙ ауыл кешеһенең потенциалын күтәрә алмаясаҡбыҙ. Икенсе яҡтан ҡарағанда, был милләтебеҙгә зыянға ла булыуы ихтимал, сөнки башҡорт ғүмер буйы үҙенең ерендә йәшәгән. Әгәр уны ерҙән айырһаҡ, артабан ерҙән дә, телдән дә яҙып ҡалырға мөмкинбеҙ, тигән хәүеф тыумаймы...**

**Р. Вәлиәхмәтов:** Был мәсьәләгә ҡараш, ысынлап та, ике төрлө, әммә беҙгә уның оптималь баланс һаҡлаған бер юлын табырға кәрәк. Мәсьәлә нимәлә? Асыҡтан-асыҡ әйтергә кәрәк: ҡала ерендә башҡорт, ысынлап та, урыҫлаша. Ҡала ерендә генә түгел, хәҙер район үҙәктәрендә лә, хатта ҡайһы бер ауылдарҙа ла балалар шуға дусар. Ауыл ерендәге башҡорт мөхите былай ҙа кәмей. Халыҡ булып һаҡланып ҡалабыҙ, телде, мәҙәниәтебеҙҙе ауылда һаҡлайбыҙ, тиһәк, был дөрөҫ сәйәсәт, дөрөҫ эш. Әммә ысынбарлыҡтың күҙенә тура ҡараһаҡ, ауыл тирәһендә кеше потенциалын үҫтереү, сәләмәтлеген нығытыу, белем алыу мөмкинлектәре сикле. Кеше потенциалын үҫтереү өсөн, концепция яғынан ҡарағанда, ҡалала шарттар һәйбәтерәк. Әммә бизмәндең икенсе яғында башҡортлоҡто, башҡорт рухын, мәҙәниәтен, телен һ.б. нисек һаҡлап ҡалырға тигән һорау тора. Мин бында ныҡ итеп уйланылған, айырым махсус бер сәйәсәт алып бары-

**✓ Халыҡҡа: "Идеаль хәл-торошта нисә бала табыр инегеҙ, хәҙер нисә балағыҙ бар, нисәүҙе табырға планлаштыраһығыҙ?" тигән һорау биреп, тыуымдың тормошҡа ашмаған ҡеүәте асыҡланды.**



# ҠОЛАҠ ҺАЛЫУ...

## идара итеүселәр өсөн дә кәрәк

лырға тейеш, тип уйлайым. Хатта Көнбайыш илдәренең тәжрибәһен үҙебеҙгә алһаҡ та насар булмаҫ. Уларҙа хәҙер, киреһенсә, ҡалаларҙан ауылға тартылалар. Беҙгә лә шундай программа булдырырға кәрәк. Ауыл биләмәләрендә, район үҙәктәрендәге кеүек, белем биреү, мәҙәниәт усағы, китапхана, фельдшер-акушер пункттары бер ҡыйыҡ аҫтында булған комплекслы үҙәктәр төҙөү маҡсатҡа ярашлы булыр ине, минеңсә. Сөнки ауыл халҡына ла тейешле шарттар тыуҙырылыуы зарур. Тимәк, ауыл ғына ҡалаға түгел, ҡала ла үҙенең инфраструктураһы, тәжрибәһе, белеме, белгестәре менән ауыл яғына йөҙ бороп, ауыл яғына тартылырға тейеш. "Земство табибы" тигән хәрәкәт китте бит, шуның кеүек, башҡа белгестәрҙе лә ауылдарға ебәреү яғын уйларға кәрәк.

Әлбиттә, иҡтисади яҡты ла онотоişға ярамай, инвестицияларҙы ҡалаларға ғына түгел, хатта ауылдарға йөләп итеү юлдары эҙләнһен ине. Был мәсьәлә, бәлки, беренсе сиратта торалыр. Шул уҡ эшҡыуарлыҡ буйынса ҡарағанда ла, ауыл халҡында ер бар, ә бит уны эшкәртергә, ашларға техникаһы ла, башҡаһы ла кәрәк. Ергә лә ҡала яғынан ярҙам килергә тейеш.

**Г. Хилажева:** Башҡортостан ауыл халҡы проценты буйынса Рәсәйҙә лидерҙарҙың береһе. Беҙҙә дөйөм халҡтың 40 проценты самаһы ауыл халҡы өлөшөнә тура килә. Шуға күрә, ауылда барған ваҡиғалар күпселек осраҡта тотош республикалағы хәл-ваҡиғаларға йоғонто яһай. Һәм ауылда демография хәл-торошон яҡшыртыу, кеше потенциалын күтәреү өсөн нимә эшләргә кәрәк, тигән һорауға яуап бер генә, уның башҡа варианттары юҡ: тормош кимәлен һәм сифатын күтәрергә, инфраструктураны яҡшыртырға.

**▸ Социология ниндәй дисциплиналар менән бергә үрелеп бара йәки тығыҙ бәйләнештә тора. Улар бер-береһен нисек итеп тулыландыра?**

**Р. Вәлиәхмәтов:** Социология - социаль фәндәр араһында иң киң йүнәлешле, шул уҡ ваҡытта ентекләп өйрәнә торған фәндәрҙең береһе ул. Ҡайһы бер ваҡытта социологияны анкетаға, кешенең фекерен өйрәнеүгә генә ҡайтарып ҡалдыралар. Был бик тар ҡараш. Был төптө дөрөҫ түгел. Кешенең фекерен өйрәнеп, үҙебеҙгә мәғлүмәт кенә йыябыҙ. Һөнәр эйәләренең үҙҙәренең эш ҡоралы булған кеүек, анкета - социологтар өсөн төп ҡорал. Элегерәк социология фәненә бигүк иғтибар булмаһа, хәҙер күп ғалимдар, социология фәне беҙҙе берләштерә, тип белдерә. Һуңғы ваҡытта был йүнәлеш бик көслө, социология фәнен, ысынлап та, һанға һуғыу ғына түгел, уның күп кенә теорияларына, принциптарына таянып, үҙҙәренең фәндәрен киңәйтәләр. Социология өлкәһендә 60-лаған төр бар. Уларҙың барыһы ла социология күҙлеге аша өйрәнелә. Мәҫәлән, кешенең демографик проблемаларын, сәләмәтлеген, ғүмер оҙайлығын, хатта үлемен дә, тыуыуын да социологик күҙлектән ҡарамай булмай. Шуны уҡ миграция процестарына ҡарата ла әйтергә мөмкин. Беҙгә ҡайһы саҡта рәсми статистика күрһәткестәре етмәй. Улар күп ваҡытта юҡ та. Етмәгән мәғлүмәтте социологик ысулдар менән табырға тырышабыҙ. Политологияға килгәндә лә ябай ғына миҫал килтерергә була - һайлау алдынан булған ваҡиғалар бер нисек тә социология фәненән башҡа үтмәй. Һайлау кампанияһы үҙе үк социологияның бик ҙур бер өлөшө. Тағы бик күп өлкәләрҙе миҫалға килтерергә була. Социология, ысынлап та, уларҙы берләштерә, дөйөмләштерә, сөнки был фәндең үҙәгендә кеше тора.

**Г. Хилажева:** Демография проблемаһы буйынса социологик тикшеренеүҙәр халыҡтың фекерен һәм күҙаллауын асып бирә. Бер миҫал: халыҡҡа: "Идеаль хәл-торошта нисә бала табыр инегеҙ, хәҙер нисә балағыҙ бар, нисәүҙе табырға планлаштыраһығыҙ?" тигән һорау биреп, тыуымдың тормошҡа ашмаған ҡеүәте асыҡланды. Планлаштырған һан менән ысынбарлыҡтағы һан араһындағы айырма бик ҙур. Бынан һәм аныҡлаштырып бирелгән һорау яуаптарынан сығып, шундай һығымта яһарға мөмкин: айырым категория өсөн торлаҡ шарттары, финанс мәсьәләһе хәл ителгәндә, демография мәсьәләһен яҡшыртырға мөмкин. Һәм беҙ был фекерҙе үҙебеҙҙең тәҡдимдәребеҙҙе яҙғанда ла индерәбеҙ. Был миҫалдар социологик ҡоралдарҙың нисек эшләүен күрһәтә лә инде.

**Р. Вәлиәхмәтов:** Күптән түгел генә беҙҙә Юғары иҡтисад мәктәбенең демография институты директоры Анатолий Вишневский булып китте һәм, демография проблемаһын тикшереүгә социологик ҡараште, социологик ҡоралды индереү менән көслөһөгөҙ, тип белдерҙе. Был, ысынлап та, беҙҙең көслө яғыбыҙ. Йәғни демография процестарын рәсми статистика мәғлүмәттәре буйынса ситтән күҙәтмәйбеҙ, ә тағы ла тәрәнерәк, төпкәрәк инеп, халыҡтың ниәтен, уй-фекерен белеп, тикшеренеүҙәр материалына үҙебеҙҙең өлөшөбөҙҙө индерергә тырышабыҙ. Демографияла фараз бик мөһим роль уйнай, һәм быны кешенең үҙе планлаштырған, шарттар булғанда табырға теләгән балалары һанын белмәй тороп, күҙаллау мөмкин түгел.



**▸ Үткәрелгән тикшеренеүҙәр нисә процентҡа, һеҙҙеңсә, дөрөҫкә, раҫҡа сыға? Сөнки халыҡ телендә йөрөгән көләмәстә һүҙ барғанса, "Бер күршем ит ашай, икенсеһе - дөгө, мин - кәбеҫтә. Уртаса статистика буйынса беҙ барыбыҙ ҙа голубцы ашайбыҙ". Дөрөҫ мәғлүмәт алыр өсөн тикшереүҙәр ниндәй бүленештә үткәрелә?**

**Р. Вәлиәхмәтов:** Респонденттарҙы рәсми статистика - халыҡ иҫәбен алыу материалдарына ҡарап, йәш категориялары буйынса, ир-атҡа, ҡатын-ҡыҙға бүлеп, белемдәрен (юғары, урта, башланғыс), милләтен күҙ уңында тотоп һайлайбыҙ. Социологик һорау алыуҙың үҙенең методикаһы бар, шуға ярашлы эшләйбеҙ. Әгәр хаталар биш проценттан күберәк булһа, эшмәкәрлектең сифаты түбән тип һанала. Яңылышлыҡ 3-5 процент булыуы мөмкин. Һорауҙарға яуап алыусылар бурыстарына илке-һалҡы ғына ҡараһа, улар тултырған анкеталарҙы ҡулланмайбыҙ. Айырым ҡалаларҙан, райондарҙан, ауылдарҙан алынған яуаптарҙа ниндәйҙер шик тыуһа, уларҙа тағы ла шул уҡ тәртип буйынса ҡабаттан һорау алыу үткәрәбеҙ. Шуны билдәләп киткем килә: был социологтар өсөн генә түгел, фән өсөн дә, халыҡ өсөн дә, идара итеүселәр өсөн дә бик кәрәк. Шуға ла яңылышырға ярамай. Социологик тикшеренеүҙәргә иғтибар менән ҡарарға, кеше фекерен иплəп, матур итеп, бөтөн ҡағыҙәләрҙе тотоп өйрәнергә кәрәк, ошо фекергә таянып эшләгәндә генә файҙа буласаҡ. Беҙ хәҙер иғтибарҙы муниципаль кимәлгә йүнәлтеп, хакимиәт башлыҡтары алдында сығыштар ойоштораbыҙ. Сөнки хакимиәттәрҙең эш һөҙөмтәһе урындағы халыҡ менән бәйле. Халыҡтың ихтыяжын, проблемаларын, теге йәки был мәсьәләгә ҡарашын белмәй тороп, халыҡ мәнфәғәтендә эшләп булмай. Әммә әлегә социологияның, социологик тикшеренеүҙәрҙең әһәмиәтен муниципаль ҡала-райондарҙа бик аңлап бөтмәйҙәр.

**Г. Хилажева:** Шундай билдәләмә бар - һайлау репрезентативлығы. Уны ябай ғына итеп шулай аңлатырға була: бер кәстрүл аш бешергәс, уның өҫтөн генә һалып алырға мөмкин, ләкин был осраҡта аштың түбән тулыһынса тойоп булмаясаҡ; йәки ашты матур итеп болғатып, бөтөн ингридиенттарын бергә ҡушырға кәрәк. Ул ваҡытта ашҡа һалынған бар аҙыҡтарҙың тәмен тойоп буласаҡ. Социологик һорау алғанда ла кешеләрҙе йәш категорияһы, этник һәм социаль төркөмдәр буйынса һайлайбыҙ. 2010 йылдан башлап даими рәүештә Башҡортостандың социаль-иҡтисади, йәмғиәт-сәйәси үҫеше буйынса мониторинг үткәрәбеҙ. Был да үҙенә күрә үҙенсәлекле мәғлүмәт. Сөнки һорауҙар бер үк йәки саҡ ҡына үҙгәртелгән була. Һәм яуаптарҙы сағыштырып, ошо ваҡыт эсендә халыҡтың фекере, властка мөнәсәбәте нисек үҙгәргәнен күҙәтергә мөмкин.

**▸ Статистика һәм социология күҙлегенән ҡарағанда, Башҡортостандың идеаль кешеһе ниндәй булырға тейеш. Уны нисек һүрәтләр инегеҙ?**

**Г. Хилажева:** Башҡортостандың 2030 йылға тиклемге социаль-иҡтисади үҫеше стратегияһын әҙерләү өсөн 6 мең кешенән торған һорау алыу үткәрергә заказ бирелгәйне. Уның һөҙөмтәләрен күҙаллаған маҡсаттарҙың береһе бәхетле кеше ниндәй булырға тейешлеген асыҡлау ине. Был һеҙ биргән һорауға ла ниндәйҙер кимәлдә ауаздаш, тиер инем. Бөгөн үлем күрһәткесе юғары, халыҡтың сәләмәтлеге насар, тибеҙ ҙә, үҙ-үҙеңде һаҡлау тигән төшөнсәне бөтөнләй онотабыҙ. Йәғни кеше үҙенең сәләмәтлеген һаҡлау өсөн аңлы рәүештә нимәлер эшләргә тейеш. Сөнки ниндәй тормош алып барыуыңдың 60 проценты үҙеңдән тора. Быны тикшеренеүселәр ҙә раҫлай. Шуға күрә, минең фекеремсә, идеаль кеше - үҙ тормошо, шул иҫәптән сәләмәтлеге өсөн үҙенә яуаплылыҡ алған кеше. Ул бөтөн яуаплылыҡты дәүләт елкәһенә һалып ҡуймай. Мәҫәлән, сәләмәтлеге насар, түлы медицина хеҙмәтләндереүе алырға мөмкинлеге юҡ икән, әммә сәләмәтлек өсөн файҙалы ризыҡ ашау, тәмәкене, алкоголь ҡулланыуҙы ташлау, иртән гимнастика яһай башлау уның үҙенән тора бит. Эйе, һинең эш урының да булмауы ихтимал, эшеңдән дә сығарыуҙары мөмкин, әммә һин үҙең ниндәйҙер инициатива күрһәтеп, яҙмышыңды үҙгәртергә тырышырға тейешһең барыбер ҙә...

***Бөгөн үлем күрһәткесе юғары, халыҡтың сәләмәтлеге насар, тибеҙ ҙә, үҙ-үҙеңде һаҡлау тигән төшөнсәне бөтөнләй онотабыҙ. Йәғни кеше үҙенең сәләмәтлеген һаҡлау өсөн аңлы рәүештә нимәлер эшләргә тейеш. Сөнки ниндәй тормош алып барыуыңдың 60 проценты үҙеңдән тора. Быны тикшеренеүселәр ҙә раҫлай. Шуға күрә, минең фекеремсә, идеаль кеше - үҙ тормошо, шул иҫәптән сәләмәтлеге өсөн үҙенә яуаплылыҡ алған кеше. Ул бөтөн яуаплылыҡты дәүләт елкәһенә һалып ҡуймай. Мәҫәлән, сәләмәтлеге насар, түлы медицина хеҙмәтләндереүе алырға мөмкинлеге юҡ икән, әммә сәләмәтлек өсөн файҙалы ризыҡ ашау, тәмәкене, алкоголь ҡулланыуҙы ташлау, иртән гимнастика яһай башлау уның үҙенән тора бит. Эйе, һинең эш урының да булмауы ихтимал, эшеңдән дә сығарыуҙары мөмкин, әммә һин үҙең ниндәйҙер инициатива күрһәтеп, яҙмышыңды үҙгәртергә тырышырға тейешһең барыбер ҙә...***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла", тип юҡҡа ғына әйтмәгән боронғолар. Башҡортостан социологтары республикала кеше потенциалы, демография һ.б. мәсьәләләрҙе ентекле тикшереп, эшмәкәрлек һөҙөмтәләре буйынса ҡиммәтле мәғлүмәт тупланған докладтар әҙерләп сығара, ниндәй өлкәгә ныҡлы иғтибар бирергә кәрәклегенә баҫым яһап, күрһәтмәләр әҙерләй икән, уларҙың фекеренә лә ҡолаҡ һалынһын ине.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

Аҙна башында улар менән Палыч хушлашты. Ҡыйын булды уны оҙатыуы. Эҫенешеп киткәйнеләр. Күпме эшкә өйрәтте, әллә ни төрлө тарихтар һөйләне, аҡыл-кәңәш бирҙе. Һуңынан аралашырға тип адрестар менән алмаштылар. Сергей Павлович ашҡынып ҡыҙы янына ҡайтып китте.

Ял көндәрендә Богдан Радионович Булатты препараттар тейәшергә ҡалаға ебәрҙе. Йыш ҡына санитарға ярҙам итеп йөрөп әйләнә ул. Егет үҙе теләп килгән ерҙән ҡасып китмәҫ, тиҙер инде. Ҡасырға уйы ла юҡ Булаттың. Инде араҡыны ауыҙына алмағанына ике ай, әллә дауанан, әллә башҡаһынан эскеһе лә, уйлағыһы ла килмәй. Шулай ғына булһын инде, тип һөйөнә үҙе лә.

Складтан йәшниктәрҙе тейәп бөткәс, санитар ҡайҙалыр йомошон йомошларға китте. Шофер кабинала ойоп алырға булды. Булатҡа ла кузовта ятып торорға урын бар. Шул уй менән өҫкә үрмәләй башлағайны, күҙе ҡаршылағы йортҡа яҙылған таҡтаташҡа төштө: маршал Ворошилов урамы. Бәй... Палычтың урамы ла һуң! Туҡта, ошонан ике йорт аша ғына ул йәшәргә тейеш. Булат водителгә әйтеп тә тормаҫтан кәрәкле йортто эҙләп йүгерҙе һәм күп тә үтмәй ике баҫҡысты бер һикереп менеп ҡыңғырауға ла баҫты. Ишекте килеп асҡандарынса кнопканан бармағын алмаңы, икенсе ҡулын килеп сығыусыны ҡосаҡларға тип әҙерләп күтәрҙе. Әммә көткәне апаһы йәшендәге ҡатын-ҡыҙ булып сыҡҡас, эскә һонолдо:

- Палыч өйҙәме?! Һаумыһығыҙ!

- Һаумыһығыҙ, - ҡатын, егетте баштан аяҡ байҡап, ҡашын төйҙө. - Сергей Павлович санаторийҙа, һеҙ кем булаһығыҙ?

- Мин... уның дуҫы. Эх, китеп өлгөргән икән.

- Өлгөргән тип, дүрт ай элек киткәйне, дуҫы булып шуны ла белмәйһегеҙме? - ханым Булатты атаһының шешәләш дуҫы тип уйланы, күрәһең.

- Уның менән шунда... санаторийҙа булғайным бит. Аҙна элек ҡайтҡайны ла инде.

- Нисек... ҡайтҡайны?

- Ҡайтҡайны, - хәҙер Булат аптыраны. Элекке юлына баҫты микән ни? Кит, булмаҫ, ниндәй уй-хыялдар менән тулы ине.

- Аңлашыла... - күҙҙәренә йәш алды ҡатын.

- Һеҙ Оксана бит әле, - тегеһе "эйе" тигәндә белдереп баш ҡаҡты. - Оксана, Палыч һеҙҙең өсөн тип йән атып ҡайтырға сыҡҡайны, ышанығыҙ зинһар. Унда сакта өйөн генә һөйләне. Бөгөн-иртәгә килеп инер ул. Һеҙ тик көтөгөҙ уны, йәме, борсолмағыҙ...

Ни тип уйларға ла белмәй хәҙер Булат. Шулай уҡ та яңылышты микән ни Палычта? Ҡыҙынан башҡа ҡайҙа китергә мөмкин? Аҙнанан ашыу кемдә була ала? Был донъяла Оксанам менән икебеҙ генә, ти ине, нимә үҙгәргән? Ниндәй хәлдәр булып өлгөргән был ваҡыт эсендә? Тик әлеге һорауҙарға Палычтың үҙенән башҡа берәү ҙә яуап бирә алмай ине. Ул иһә - юҡ.

Ауыр уйҙар менән килеп төшкәйне, бындағы хәлдәрҙән ҡолап китә яҙҙы. Ҡобараһы осҡан Эдик "Софьяның бәпесе үлде" тип ҡаршы алды. Ашҡаҙаны тәңгәләнә килтереп тондорғандай булды. Тын ала алмай һығылып торҙо-торҙо ла, үҙ-үҙен белмәҫтән:

- Нисек үлде ?! - тип ҡысҡырып ебәрҙе.

- Белмәйем. Шулай тиҙәр.

Булат Эдикты һынар ҡулы менән генә ситкә этәреп ебәреп эскә йомолдо. Сафия бүлмәһендә юҡ, сәңгелдәге лә етемһерәп буш тора. Икенсе ҡатҡа атылды. Ҡаттар араһындағы тимер рәшәткәләрҙе тотоп һелкетте, "Богдан Радионович! Сафия! Сафия!" тип йән асман саҡырҙы. Ниндәйҙер кабинеттан сыҡҡан санитарҙарҙың береһе яҡын килде.

- Ниңә ҡысҡыраһың? Врач буш түгел.

- Сафия ҡайҙа? Балаһы...

- Ҡатынды йоҡлаттылар, хәле мөшкөл. Ә бала үлде, Богдан Радионович сәбәбен асыҡлай.

- Ә ниңә үлде?.. - Булат рәшәткәләрҙе һындыра тота яҙҙы.

- Йөрәге сирле булған.

Сафияны өсөнсө көнөнә генә бүлмәһенә төшөрҙөләр. Эдик менән янына ингәйнеләр, балаһының йүргәктәрен ҡосаҡлаған килеш йомарланып тик ята. Берәүҙе лә күрмәне лә, ишетмәне лә, былай ҙа һирәк асылған теле бөтөнләй һөйләшеү һәләтен юғалтҡайны. Егеттәр бер ултырып, бер тороп ни ҡылырға, нисек итеп йыуатырға белмәне.

Хәлде асыҡлап ҡуйыу өсөн Булат Богдан Радионовичтың ҡайтырға сыҡҡанын көтөп алды.

- Ә-ә, һинме, ни хәл? - тип врач, ғәҙәтенсә, беренсе ҡулын һуҙҙы.

- Богдан Радионович, ниңә улай булды икән? - тип тура һораны ул табиптың арыған йөҙөнә төбәп ҡарап.

- Йөрәге дөрөҫ үҫешмәгән, әле бына ҡырҡып ҡарағас шуны асыҡланым. Диагноз яңылыш булмаһын өсөн өҫтәлмә тикшереүгә ебәрҙем.

"Аңлашылдымы" тигәндәй егеткә ҡарап алды ла, тегеһе һаманда нимәләр ишетергә теләгәндәй торғас, дауам итте:

- Әсәнең йөклө ваҡытындағы кисерештәре лә, башҡа факторҙар ҙа йоғонто яһағандыр инде. Тейешле тикшереүҙәр ҙә үтмәгән ине бығаса. Беҙгә ҙур срокта ғына килеп юлыҡты. Ҡалайтаһың, донъяла үлем тигән нәмә лә бар, ул кемде алып китерҙе һинән-минән һорап тормай. - Табип егеттең иңбашынан ҡаҡты ла машинаһына ыңғайланы. - Софьяға күҙ-ҡолаҡ булып торогоҙ, уға еңел түгел.

Уныһын аңлай ҙа ул, тик нисек итеп? Ҡалайтып? Ярҙам итеү сараһын кем әйтер, кем өйрәтер?..

* * *

Ҡайғылары баҫылып өлгөрмәне, Эдикты ла ҡайтарып ебәрҙеләр. Уның урынына килгән бер эскесене үҙ иркенән тыш тейәп ебәргәндәр күрәһең, айнып алды ла, "Кайтарығыҙ! Ебәрегеҙ!" тип боларып аптырата. Иҫәрҙәр йортондағы кеүек итеп бәйләп һалдылар. Шуны ҡарап ултырмаҫ өсөн бүлмәһенә лә йоҡларға ғына инә хәҙер Булат. Күберәген эштә була ла, ашхананан сәй-шәкәр алып кистәрен Сафия янына үткәрә. Бер аҙ асыла башланы бисара. Илауҙың да сиге барҙыр, күрәһең.

Егет сәйле стаканды ҡыҙҙың алдына шылдырҙы ла, икенсеһен үҙе шөрпөлдәтте.

- Һиңә лә ҡайтырға ваҡыт етәлер инде, - тип ҡуйҙы Сафия күңелһеҙ генә.

- Богдан Радионович тағы ла бер ай йөрө ти ҙә ул, белмәйем, ауылда апайҙар нишләйҙәрҙер...

- Һинең көткән кешеләрең бар, исмаһам.

- Ә һинең, Сафия? - Егет күптән күңелен өйкәгәнде асыҡларға теләне.

- Минең - юҡ, - тип өҙә генә яуапланы ла, тәҙрәгә боролоп уҡ ултырҙы. Илай инде хәҙер тағы ла. Булат уны был аҙымдан туҡтатырға теләгәндәй ҡапыл ҡулын һуҙҙы ла, ҙур устары менән ибәтәйһеҙ генә итеп сәсен һыйпаны.

- Илама, Сафия, мин һине үҙем менән алып ҡайтырмын.

Ҡатын ҡапыл ялт итеп әйләнде. Иламай ине ул, киреһенсә, сәсрәтеп ҡарап тора. Әйтерһең, Булат уға насар берәй нәмә әйткән.

- Нимә, мине әллә йортһоҙ бесәй шикелле кемгә етте шуға эйәреп китергә тора икән тиһеңме? Ирһеҙ бала тапҡас та, бөтөнләй бөткәнгә һанайһыңмы?!

- Нишләп, мин былай ғына...

- Былай ғына түгел! Ҡарашыңды һиҙмәйемме әллә?! Ошондай хәлгә ҡалғас та, йөрәге юҡ икән тиһегеҙме?! Һеҙ барығыҙ ҙа бер!

- С-Сафия, туҡтале... Сафия... - Егет ярһып өҫтөнә килгән ҡатындан ҡасып тотлоға-тотлоға ишеккә сигенде. Тик тегеһе ишетергә лә теләмәне:

- Кит! Сығып кит! Килеп йөрөмә бында башҡаса! - Ишек артында Сафияның быуылып үкһегәне ишетелде. - Килеп йөрөмә...

* * *

Ҡайтырға йыйынды Булат. Иртәгә үк юлға сығыр. Сумкаһын төйнәп ҡуйҙы ла, табипты эҙләп китте. Һуңғы көндәр алдына алған эштәрен йомғаҡлап ҡуйыу өсөн генә үҙен көсләп тотоп йөрөнө бында. Бөтөн йәм, мәғәнә бөттө. Ә нимә ине һуң ул йәм? Үҙ-үҙенә ошо һорауҙы бирә лә, яуап тапмай Булат. Сафиялами? Улар бит яҡшылап таныш та түгелдәр. Кем икәнлеген дә белмәй ул ҡыҙҙың, ниндәй милләт, ҡайҙа үҫкән, ҡайҙа йәшәгән - билгеһеҙ. Хәҙер инде белмәҫ тә. "Яҡын килеп йөрөмә" тине бит. Бармаҫ. Инәлеп йөрөй торған ғәҙәте юҡ.

Ҡаттар араһындағы тимер рәшәткә янында була торған ҡарауылсы күренмәне. Өндәшеп ҡараны Булат. Ишеткән, сыҡҡан кеше юҡ. Тауыш сығарайым әле тип ишекте эткәйне, асылды ла китте. Бер аҙ көтә биреп торҙо ла, үтте эскә, бур түгел дә инде ул, врачты күрер ҙә сығыр. Етмәһә бында ингәне лә бар. Ныҡ баҫмаҫҡа тырышып Богдан Радионовичтың кабинеты тәңгәленә үтте лә, эстән һөйләшкән тауыш ишетелгәс, яңғыҙы түгелдер тип, ябылып етмәгән ишек ярығынан күҙ һалды. Телефондан кемдәлер һүгә генә табип, бөтөнләй үҙенә хас булмағанса ҡаты, хатта тупаҫ һөйләшә. Булат ҡырғараҡ китеп торорға уйлағайны ла, ниндәйҙер эске тойомлауымы, һиҙемләүеме уны туҡтап ҡалырға мәжбүр итте. Ирекһеҙҙән эстән ишетелгәндәргә ҡолаҡ һалды.

- Әйтәм бит, клиент йәш, һау-сәләмәт. Һеҙгә кәрәк ағза ла яңыраҡ ҡына үҙ функцияһын башҡара алыуын иҫбатланы. Юҡ, уныһы реализацияланды инде. Тағы ла ике айҙай ял итһә, күсереүҙе күтәрә алырлыҡ була. Нимә тиһең?! Һин нимә, коллега? Мин һиңә сифатлы тауар тәҡдим итәм, ә һин сауҙалашаһың. Был һиңә алкаштарҙың үпкә-бауыры түгел. Ситкә өсләтә арттырып ебәрә алам. Юҡ! Юҡ! Һин берәүгә генә заявка бирҙең, уныһына клиент бар, күптән көтә. Юҡ, дуҫ, уныһы ла һатылған, был тауар үтемле, шулай булғас үҙең ҡара - ризалаш йәки баш тарт. Ыһы, ыһы, ярай, килештек, ярай...

Башҡаса тыңлап тора алмай ине Булат. Ишеткәндәрен аңына һеңдерергә тырышып, инде хәҙер аяҡ остарына баҫып кирегә китте. Рәшәткәне сыҡҡайны ғына врачтың кабинет ишеге асылды һәм егет ҡапыл иҙәнгә сүгәләне лә, эйелгән килеш аҫҡа шыуып төштө. Унан, коридорҙы ике һикереүҙә үтеп, бүлмәһенә инеп ауҙы. Шунда ғына уйлау һәләте ҡайтты үҙенә. "Әстәғәфирулла" тейме әле күршеһе Әлифә әбей ныҡ аптырағанда. Ни тигән һөйләшеү ул был? Кем хаҡында, нимә хаҡында барҙы?.. Тимәк... булыуы мөмкин түгел. Булмаҫ! Бындай ҡырағайлыҡҡа барырға януармы ни Богдан Радионович, яҙа-йоҙа ишеткәндән ундай һығымта яһап булмай. Туҡта, Сафияға барып һорашып ҡарарға кәрәк...

Барғайны, ҡатын эшкә сыҡҡан икән, ҡош-ҡорт ҡарай тинеләр. Эҙләп тапты ла, һүҙҙе нимәнән башларға белмәне. Сафия уны күрмәмешкә һалышты. Үпкәһе бөтмәгән, күрәһең, һаулығын да әллә алды, әллә юҡ.

- Сафия, ҡарале, бер генә һүҙем бар.

- ...

- Бәпәйеңдең кәүҙәһен алып килмәнеләрме әле ?

Ҡатындың ҡулынан емле биҙрәһе төшөп китә яҙҙы. Күҙҙәрен ҙур асып ҡарап ебәрҙе.

- Алып килһәләр ерләшеп китәйем тигәйнем. Үҙебеҙсә ләхетләп. - Ҡатындан һаман яуап булмағас өҫтәп ҡуйҙы, - Мосолман түгелме ни һин?..

- Эй-йе, - тип кенә әйтә алды тегеһе, ниһайәт.

- Шулай булғас, - тип элеп алды егет, - ҡасан килтерәләр?

- Әллә. Богдан Радионовичтан көн дә һорайым, көн дә "иртәгә" ти.

- Үҙем һорармын атыу, ризаһыңмы?

Ҡатын ашығып баш ҡаҡты.

**(Дауамы бар).**



***✓ Филармонияла һәм "Сулпан" балалар театрында эшләүсе һәм республика сәнғәтен үҫтереүгә бар көсөн һалыусы әллә күпме йәш ғаиләләр бер ниндәй уңайлыҡтары булмаған дөйөм ятаҡтың ҡыҫан бүлмәләрендә көн күрергә мәжбүр.***



*РУХИӘТ БАЛҠЫШЫ*

# ХАЛЫҠСАНЛЫҠ...

## төп сифаты сибайҙарҙың



**Урал аръяғы халҡының рухи ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсаты менән асылған Сибай филармонияһы үҙенә генә хас йөҙө һәм тамашасылары, бай тарихы һәм йолалары булған, башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен түкмәй-сәсмәй йыйыусы һәм һаҡлаусы төп сәнғәт ойошмаһы булараҡ билдәле. Бөгөн ул ҡалала һәм Урал аръяғында ғына түгел, тотош республиканың сәнғәт донъяһында алдынғы урын биләй. Ижади коллектив үҙ тамашасыларына өр-яңы һәм оригиналь концерттар, театрлаштырылған тамашалар, шоу-программалар тәҡдим итә. Танылыу яулаған артистар һәм алып барыусылар ҡатнашлығындағы концерт программаларында халыҡ ижадына, классик әҫәрҙәргә һәм популярлашҡан башҡа төр сәнғәт өлгөләренә ҙур урын бирелә. Республикалағы берҙән-бер "Сулпан" балалар театры менән ҡушылып, Сибай концерт-театр берекмәһе тигән берҙәм исем аҫтында йәшәүсе мәҙәниәт усағының яңы етәксеһе Айбулат Миңлеғәле улы Ҡотошов менән әңгәмәбеҙ филармонияның бөгөнгө хәле, киләсәккә билдәләнгән уй-ниәттәре хаҡында.**

**➔ Айбулат Миңлеғәле улы, гәзит уҡыусылар һөйләшеүебеҙҙең асылына тәрәнерәк төшөнһөн өсөн уларҙы филармонияның барлыҡҡа килеү тарихы менән тағы бер тапҡыр таныштырып китеү урынлы булыр, моғайын...**

- Эйе, һүҙҙе баштан башлаған яҡшы... Сибай ҡала Советы президиумының 1993 йылдың 8 июлендәге ҡарарына ярашлы, шул йылдың 1 сентябренән филармония коллективын туплау эше башлана. Яңы ойошҡан коллективтың беренсе директоры Фәтих Хөснөтдинов, художество етәксеһе Әлмира Ҡыуатова була. Артабан эшкә Гөлназ Аҡназарова (бейеү ансамбле етәксеһе), баянсы Санъяр Мәүлетҡолов, йәш бейеүселәр Сулпан Асҡарова, Айтуған Дәүләткирәев, Өфө сәнғәт училищеһының талантлы студенттары Лилиә Ишемйәрова, Нәсимә һәм Азамат Тимеровтар саҡырыла. 1994 йылдың ғинуар айында тамашасылар хөкөмөнә сығарылған "Йырҙарың күп һинең, моңдарың күп, әйҙә, йырла башҡорт балаһы!" исемле концерт программаһы йәш коллективтың тарихына тәүге йылъяҙманы яҙа. Концерт тамашасыларға бик оҡшай, улар һәр сығышты дәррәү алҡыштар менән оҙата. Ошо уҡ йылдың март айында директорлыҡ вазифаһын Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Ринат Ишмуллин ҡабул итеп ала. Ә ҡулдарына квалификациялы белгес дипломы алған кисәге студенттар беренсе гастролдәргә сыға. 1995 йылдың 1 ғинуарынан ҡала филармонияһы Башҡорт дәүләт филармонияһының филиалына әйләнә. 1998 йылда иһә Министрҙар Кабинеты ҡарары менән уға Дәүләт филармонияһы статусы бирелә. Фольклор фестивалдәрендә ҡатнашып, Сибай дәүләт филармонияһы коллективы 1996 йылда - Францияла, 2001 йылда - Грецияла, 2005 һәм 2006 йылдарҙа Төркиәлә Рәсәй исеменән сығыш яһаны. Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Татарстан республикалары, Силәбе, Пермь, Ҡурған, Һарытау, Төмән, Ырымбур өлкәләре, Мәскәү, Санкт-Петербург, Екатеринбург ҡалалары тамашасылары филармония артистарын һәр ваҡыт йылы ҡаршы ала.

**➔ Мәғлүм булыуынса, һеҙ коллектив менән күптән түгел генә етәкселек итә башланығыҙ. Тәүге тәьҫораттарығыҙ менән уртаҡлашып китә алмаҫһығыҙмы?**

- 2004 йылдан 2015 йылға ҡәҙәр филармонияға Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Вәкил Йосопов етәкселек итте. Уның бай тормош тәжрибәһе һәм сәнғәт өлкәһендәге тәрән белеме йәш һәм талантлы коллективҡа артабан үҫергә һәм оҫталыҡ тупларға ярҙам итмәйенсә ҡалмағандыр. Мин Вәкил Барый улына шундай көслө коллектив туплағаны өсөн рәхмәтлемен! Бөгөн коллектив бөтә быуын тамашасыларының күңеленә хуш килерлек концерт программалары тәҡдим итә ала. Бының өсөн кәрәк булған бөтә мөмкинлектәр ҙә - ижади кадрҙар ҙа, матди-техник база ла бар. Филармонияның сәхнәгә ҡуйыу төркөмөндә үҙ эштәрен яҡшы белгән, талантлы кешеләр эшләй. Шуларҙың береһе - художество етәксеһе Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Нәсимә Ғиззәтуллина. Мин уны электән алыштырғыһыҙ нәфис һүҙ оҫтаһы, нәзәкәтле алып барыусы, оҫта ойоштороусы итеп беләм.

Әлеге ваҡытта директор урынбаҫары вазифаһын биләгән атаҡлы бейеүсе - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фәнил Әсәҙуллин тураһында ла тик йылы һүҙҙәр генә әйтеп китергә мөмкин. Үҙ эшен биш бармағы кеүек белгән уҙаман байтаҡ йылдар "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбленә уңышлы етәкселек итте һәм әле лә уның төп көстәренең береһен тәшкил итә. Үҙенә һәм башҡаларға талапсан етәксене филармонияла һәр кем ихтирам һәм хөрмәт итә, уға күптәр кәңәш һорап килә.

Мәғлүм булыуынса, ҡайһы ғына ижади коллективты алма, уның көсөн һәм данын талантлы артистар билдәләй. Бәхетебеҙгә күрә, филармонияның һәр артисы - йөҙөбөҙҙө билдәләр сағыу шәхес. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артистары Баязит Байназаров, Альберт Салауатов, Рөстәм Хәсәнов, республика һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаттары Ғаяз Ғәйетбаев, Сөмбөл Моратова, "Тархан" фольклор-эстрада төркөмө етәксеһе Ринат Ғайсин, йәш артистар Файыл Йортбәков, Зәлиә Нурлы, Айнур Әминев, Эльза һәм Азат Юлдыбаевтар коллективтың төп көсөн тәшкил итә һәм һәр береһе баҙыҡ сығыштары менән һөйөндөрә. Бөгөн филармонияның танылыу яулаған "Тархан" фольклор-эстрада төркөмөндә шөғөлләнеүсе йәш ҡурайсы Айнур Әминев Ишҡәле, Ишмулла һәм Сәйфулла Дилмөхәмәтовтар, Кәрим Дияров, Йомабай Иҫәнбаев ише сәхнә оҫталары нигеҙ һалған сәнғәт һәм оҫталыҡ мәктәбен үткән һәләтле ҡурайсы.

Сибай филармонияһы артистарының көндәлек мәшәҡәтле эше һәм таланты иғтибарһыҙ ҡалмай, әлбиттә. Уҙған йылдар эсендә һигеҙ артисыбыҙ "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы" тигән юғары исемгә лайыҡ булды, ә Айтуған Дәүләткирәев хаҡлы рәүештә "Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы" исемен йөрөтә.

**➔ Сибай филармонияһы республикабыҙҙың бик күп сәнғәт оҫталарын тәрбиәләп сығарҙы...**

- Килешәм, филармония - ысынысындан йәш артистар мәктәбе ул. Башҡорт эстрадаһының бөгөнгө йондоҙҙары Нәсимә һәм Азамат Тимеровтар, Лилиә Ишемйәрова, Фәрүәз Урманшин, Сулпан Асҡарова, Илшат Яхин, Сәғиҙулла Баййегет, Гөлсөм Бикбулатова, Зөлфиә һәм Рәмил Әбүбәкировтар, Фирүзә Париж, Урал Мортазин, Йәмилә Бикбаева һәм тағы ла күптәр ижади эшмәкәрлектәрен нәҡ беҙҙән башлап киттеләр һәм артабан үҫешкә юл алдылар. Беҙ улар менән ғорурланабыҙ.

**➔ Гәзит уҡыусылар, быларҙың барыһы ла ал да гөл икән, тип уйламаҫтар микән?**

- Яҡшы нәмәләр хаҡында күберәк һөйләге килә бит инде... Әммә көндәлек проблемаларҙан, заман шауҡымы арҡаһында килеп тыуған ауырлыҡтарҙан да азат түгелбеҙ шул. Етмәһә, уҙған көҙ башында булған көтөлмәгән ҡаза ла филармонияның, йәғни концерт-театр берекмәһенең бәкәленә һуҡты. Әлеге мәлдә филармония коллективы, ижад эше өсөн мөмкинлектәре бөтөнләй булмаған бинаны ҡуртымға алып, сәхнәһеҙ-ниһеҙ генә эшмәкәрлек итергә мәжбүр. Ә тамашалар Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры, Балалар ижады йорто һәм башҡа мәҙәниәт усаҡтары сәхнәләрендә ҡуйыла. Бының иһә үҙ нескәлектәре бар: беренсенән, сәхнәне ҡуйыласаҡ тамаша-концертҡа әҙерләүҙә өҫтәмә мәшәҡәттәр тыуа, халыҡты йәләп итеү ауырлаша, кәрәккән-кәрәкмәгән сығымдар талап ителә һ.б.

Нисек кенә ауыр булмаһын, ваҡытлыса яйһыҙлыҡтар алдында юғалып ҡалмаҫҡа, яҡшыға өмөт менән халыҡҡа хеҙмәт итеүен дауам итергә бурыслыбыҙ. Был юҫыҡта барыһының да хәлде аңлап, һәр кемдең үҙ урынында үҙенә йөкмәтелгән бурыстарҙы теүәл һәм еренә еткереп үтәргә тырышыуына ҡыуанам. Республикабыҙ башлығы Рөстәм Хәмитовтың, янғындан зыян күргән Сибай филармонияһы бинаһын ике йыл эсендә яңынан тергеҙергә, тигән һүҙҙәре беҙгә киләсәккә өмөт менән ҡарарға, тик яҡшыға ынтылырға ышаныс бирә. Алла бирһә, яҡын киләсәктә тамашасыларыбыҙҙы заманса йыһазландырылған иркен һәм бар яҡлап уңайлы өр-яңы бинала ҡаршы алырыбыҙға иманым камил. Унан килеп, быйылдан беҙҙең ҡалалағы сәнғәт колледжында бейеү класы асылыуы ла киләсәккә яҡты өмөттәр уята. Бит, сер түгел, Башҡортостанда һәм унан ситтә лә ҙур абруй ҡаҙанған, тамашасыларҙың эскерһеҙ һөйөүен, ихтирамын яулаған "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамблендә бейеп йөрөгән ир-егеттәребеҙгә һәм ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға лайыҡлы алмаш әҙерләү хаҡында ла ҡайғырта башларға ваҡыт. Шуға ла мин быйыл мәктәпте тамамлаясаҡ егет һәм ҡыҙҙарҙы нәҡ ошо уҡыу йортона уҡырға килергә саҡырам. Тейешле белем алып, беҙҙә үк һөнәри оҫталыҡ мәктәбе үтеп, артабан оло сәхнәләргә юл алған йәштәргә сәнғәт өлкәһендә карьера яулау күпкә отошлораҡ һәм еңелерәк булыр ине, тимәксемен...

**➔ Ә ижад кешеләренең шәхси тормошо өсөн уңайлыҡтар булдырылғанмы? Икенсе төрлө итеп әйтһәк, һәр артистың ҡайтып инер үҙ йорто, фатиры бармы?**

- Әлбиттә, ижад кешеләренең, йәғни артистарҙың тормошо сәхнә менән генә сикләнмәй. Башҡалар кеүек үк, уларҙың да шәхси тормошо, үҙ ғаиләһе - үҙ донъялары һәм шуның менән бәйле донъяуи проблемалары бихисап. Филармония асылған 90-сы йылдарҙа Сибай ҡала хакимиәтенең ул саҡтағы башлығы - республикабыҙҙа абруй ҡаҙанған уҙаман Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың эскерһеҙ ярҙамы менән ҡаланың мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә анығ ярҙамдар күрһәтелә. Шул арҡала ошо өлкә хеҙмәткәрҙәре өсөн ғүмерлек һәм иң "ауыртҡан" проблемаға - фатир мәсьәләһен хәл итеүгә тейешле иғтибар бирелә һәм аныҡ ярҙам күрһәтелә. Яңы ғына ғаилә тормошо башлаған, йәки ситтән күсеп килеп, Сибайҙа төпләнгән күп артистар фатир алып һөйөнә ул йылдарҙа. Тик һуңғы осорҙа был тәңгәлдә хәлдәр әллә ни маҡтанырлыҡ түгел, хатта аяныслы, тип әйтергә мөмкин. Сөнки, мәҫәлән, филармонияла һәм республикала бер бөртөк кенә булған "Сулпан" балалар театрында эшләүсе һәм республика сәнғәтен үҫтереүгә бар көсөн һалыусы әллә күпме йәш ғаиләләр сит фатирҙарҙа йәки бер ниндәй уңайлыҡтары булмаған, ҡулайлаштырылған дөйөм ятаҡтың ҡыҫан бүлмәләрендә көн күрергә мәжбүр. Был йәһәттән урындағы етәкселек Мәҙәниәт министрлығы, Башҡортостан Хөкүмәте менән берлектә ҡаланың сәнғәт эшмәкәрҙәре өсөн айырым фатир, йәғни күп ҡатлы йорт күтәреү мәсьәләһен хәл итеү юлдарын эҙләһә, ҡалабыҙҙың сәнғәт кешеләре мәҙәниәт донъяһында тағы ла дәртләнеберәк, тағы ла илһамланыбыраҡ тир түкмәҫ инеме ни?.. Беҙҙең филармония ҡаланың, ул ғына ла түгел, тотош Урал аръяғы райондарының йөҙөн билдәләүсе, уның данын арттырыусы, бәҫен юғарыға әйҙәүсе, ахыр килеп, халҡыбыҙҙың ғорурлығы булырҙай милли үҙәк булараҡ та күптән үҙен таныҡан мәҙәниәт усағы ла баһа!

**Мотал РӘМОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ИНТЕРНЕТТАН



# САФ ҺАУА...

## йәнгә лә дауа

■ Томат һәм ликопенға бай башҡа продукттар ир-егеттәрҙе инсульт хәүефенән һаҡлай, тип белдерә Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары. Улар инфаркт һәм инсультҡа килтереүсе сәбәптәрҙе ниндәй матдәләр түбәнәйтеүен асыҡлаған. Һынауҙар 12 йыл дауам иткән, унда 46-65 йәшлек 1031 ир-егет ҡатнашҡан. Был ваҡыт эсендә 67 кешелә инсульт булған. Ғалимдар ҡан составындағы ликопен күләме буйынса ир-егеттәрҙе дүрт төркөмгә бүлгән. Инсульт иң түбән ликопенлы төркөмдә иң күбе булып сыҡҡан. Ликопен - йәшелсә һәм емештәргә ҡыҙыл төҫ бирә торған матдә. Ул томаттарҙа, дөрөҫөрәге, томат һутында һәм пастаһында күп.

■ Әгәр ҙә һеҙ оҙаҡ йәшәргә һәм үҙегеҙҙең йәшегеҙҙән йәшерәк күренергә теләһәгеҙ, селенға бай ризыҡтар менән туҡланығыҙ. Немец ғалимдағы иҫбатлауынса, тап ошо микроэлементттың аҙ булыуы яман шеш үҫеше хәүефен барлыҡҡа килтерә, шулай уҡ организмда ҡартайыу процестарын тиҙләтә. Берлин клиникаһының эксперименталь эндокринология институты ғалимдары менән Брауншвейгтағы Техник университет белгестәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡандағы селенопротеин аҡһымы башҡа аҡһымдар бүленеүҙә ҙур роль уйнай. Һуңғылары организмды ирекле радикалдарҙан һаҡлай, шуға ла селенопротеиндың түбәнәйеүе шунда уҡ насар эҙемтәләргә килтерә. Шулай уҡ ирекле радикалдарҙан һаҡланмаған организм тиҙ ҡартая. Бөгөнгә көнгә селен сығанағы булып аҙыҡ-түлек тора, уларға йомортҡа һарыны, спаржа, бәшмәк, кукуруз, бразиль сәтләүектәре инә.

■ Америка ғалимдары билдәләүенсә, һалҡын һауа сәләмәтлеккә файҙалы. Тышта саф һауала йәйәү йышыраҡ йөрөргә кәрәк, сөнки ҡышҡы һауала кислород 30 процентҡа күберәк һәм тирегә ыңғай йоғонто яһай. Был шөғөлдө кискелеккә, урамда машиналар әҙерәк йөрөгән мәлгә ҡалдырырға кәңәш итә ғалимдар. Йөрәкҡан тамырҙары, баш ауыртыуы менән яфаланыусыларға ла саф һауа кәрәк.

■ Груша һомғолораҡ булырға ярҙам итә, ти Америка ғалимдары. Луизиана университеты белгестәре билдәләүенсә, кем даими рәүештә груша ашай, уларға һимерәү янамай. Грушаның составында клетчатка, С витамины, магний, калий, баҡыр күп. Шуға ла был емеш шәп диетик ризыҡ, ти улар.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# КЕСЕ ТУҒАНДАРЫБЫҘ...

## тәбиғәтте афәттән ҡотҡармаҡсымы?



### Иҫ киткес был ҡама!

Ул һыу йәнлеге. Сәүек эттән ҙур булмаған, оҙон тороҡло, ҡыҫҡа аяҡлы йән эйәһе. Тәпәйҙәрендә һыу ҡошоноҡо кеүек ярылары бар. Һыуҙа иҫ киткес шәп йөҙә, хатта шаршы балығы бәрҙәне ҡыуып етеп ашай ала. Бәрҙе, ҡыҙыл балыҡ, бағыр һирәк осрай торған балыҡтар булараҡ, ҡыҙыл китапҡа индерелгән. Шуларҙы ашап, шаҡтай зыян да яһай икән. Ҡоро ерҙә лә йылдам йөрөй ала, нимәгә көсө етә, бөтәһен дә тамаҡлай. Һыу һәм ҡоро ерҙең афәте кеүек тойолһа ла, ҡиммәтле тиреһе менән файҙалы, икенсенән, һыу буйы санитары, һыу эсен таҙартырға ла онотмай.

Күпселек ваҡытын аҙыҡ эҙләп үткәрһә лә, күңел асырға ла өлгөрә. Кешеләргә оҡшап, улар ҙа уйнарға ярата икән.

Ҡаманың яратҡан уйындарының береһе - ярҙан шыуыу. Текә генә балсыҡлы ярҙы таба ла, шунда шыуғалаҡ яһай. Шыуырлыҡ уйпат ер әҙерләй: таштарын ала, ерен тигеҙләй, улаҡ формаһы килеп сыҡҡас, шыуа башлай. Һыу хайуаны һыуҙан сыҡҡас, гәҙәттә, тиреһен ҡорота, тәрбиәләй. Шыуырға теләгән ҡама улай эшләмәй: һыуҙан сыға ла тура яр башына ынтыла, һыулы тиреһе менән арҡаһына ятып аҫҡа шыуа. Күп тапҡыр шулай эшләгәс, улаҡ тамам һыулана, мәте өҫтө шыйыҡланып, шыуғалаҡ булып китә. Шул саҡта башлана ла инде иң ҡыҙығы. Текә ярҙан ҡама улаҡ буйлап уҡтай аҫҡа оса һәм шап итеп һыуға барып төшә... Атаһы, инәһе, балалары булған ғаиләнең кемуҙарҙан яр башына ынтылып, бер-бер артлы улаҡтан шыуып төшөүе улар өсөн сикһеҙ рәхәт булһа, осраҡлы тап килеп, ситтән ҡарап торған кешегә лә үҙе бер кинәнес.

Ошо күренештән сығып ҡына әйтергә була: ҡама тиреһе иҫ киткес ныҡ, ҡойолоп, ҡырылып бармай. Уның тиреһенән яһалған әйберҙәр оҙаҡ йылдар хеҙмәт итә. Икенсенән, һыуһар һәм шәшке кеүек күп тә түгел, һирәк осрай, сөнки уларҙың йәшәүе өсөн һәр ер яраҡлы түгел, тейешле шарттар ла булмауы мөмкин. Әйткәндәй, һыуһар һәм шәшке тиреләре лә матур, тик ҡама һәм ҡондоҙҙоҡо кеүек сыҙамлы булмай, тиҙ ҡойола, иҫкерә.

Һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа, төҙөлөштәрҙә эшсе ҡулдар етешмәгән осорҙа, ауылдарҙан йәш ҡыҙҙарҙы ҙур төҙөлөштәргә, завод-фабрикаларға йыйғандар. Аслыҡтан интеккән, бушҡа эшләп йөрөгән апайҙар китергә мәжбүр булған: исмаһам, сәғәте менән эшләйһең, эш хаҡы түләйҙәр, ашханаһы ла бар, буш ваҡытта күңел асыу саралары ла күп. Ҡыҙыҡтырырлыҡ сәбәптәре булған инде. Шулай, байтаҡ башҡорт ҡыҙҙары ил буйлап һибелгән. Күбеһе тормошҡа сығып ҡайтмай ҡалған. Һөҙөмтәлә, күпме башҡорт тыумай ҡала, сит-ят милләттәрҙе үрсетергә мәжбүр була. Минең әсәй Силәбе заводына эләгә. Шунда эш хаҡына ҡара ҡыҙыл буҫтауҙан тегелгән ҡышҡы пальто ала. Яғаһы күпереп торған ҡараһыу төҫтәге тиренән, үҙе көмөш кеүек йылҡылдап тора. Әсәй уны күп йылдар кейҙе. Буҫтауы ҡырылып, туҙып бөткәс, верандаға элеп ҡуйҙы. Йәшлек иҫтәлеге итеп һаҡлағандыр инде. Быltыр барғанда ла тора ине. Яғаһы шул көйө, күпереп тора, тик бер аҙ ҡояшҡа уңып, көрән төҫ алған, көйә лә теймәгән. Иҫем китте был тиреңең ныҡлығына: илле йылдан ашыу ваҡыт үткән. Был пальто яғаһының ҡама тиреһенән булыуын етмешенсе йылдар уртаһында ғына белдем: яңы туналған ҡама тиреһен күрһәткәйнеләр. Матурлығына хайран ҡалдым: ҡара-һоро төҫ, ҡояшта көмөш төҫлә ялтырай.

Олатайымдың ҡырпыу бүрегенең ни өсөн затлы булыуын хәҙер инде аңланым. Күҙҙәренең һағышлы ҡарауының сәбәбен дә асыҡланым. Һуғышҡа тиклемге йылдарҙа совет власы ир-атты алыҫҡа тәрлә эшкә ҡыуған. Олатайым кеүек оҫталарға өйҙә тороу һирәк эләккән. Ҡатынын, һөйөклө балаларын өҙөлөп һағынғандыр...

Рауил АЙСЫҒОЛОВ.
Бөрйән районы
Ғәҙелгәрәй ауылы.
(Дауамы бар).

ШУЛАЙ ҘА БУЛА!



# ЫШАНМАҺАМ ДА...

**Мин үҙем ырым-юрауҙарға, сихыр-өшкөрөүҙәргә ышанып бармайым. Ә бына бер ваҡиға көлдөрҙө лә, аҙыраҡ уйландырҙы ла...**

Баҡсала эштәрҙе бөтөрөп, йыйһын йыйып, кәрәген алып, машинаға тейәп, килһе йылға орлоҡҡа тигәнен урынлаштырып, ҡалаға ҡайтырға йыйындыҡ. Беҙҙең баҡсанан Стәрлетамаҡҡа ике юл менән ҡайтырға була: береһе - Ғафури, икенсеһе Ҡырмыҫҡалы райондары аша.

- Әйҙә, Ҡырмыҫҡалы аша ҡайтайыҡ, - тине ҡатын. - Өфөгә һуғылып, балаларҙың, инәйемдең хәлен белеп сығырбыҙ...

Мин риза булдым. "Актерҙар йорто"на инеп, ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итәһе лә бар.

- Өфөнән Стәрлегә юл туры, - тип өҫтәп ҡуйҙы ҡатын.

- Актерҙар йортонoң ресторанына ла һәйбәт кенә, "ялдан артып ҡалған" аҡсаларҙы шул ресторан кассаһына һалып китербеҙ, - тинем шаяртып.

Шулай ниәтләнеп юлға сыҡтыҡ. Көн матур, юл таҡыр, машина һәйбәт, баҡса эштәре тамам. Кәйефтәр күтәренке. Өфөгә етәрәк әллә ниндәр йыр иҫкә төштө бит. Шул көйгә руль артында әкрен кенә һыҙғырып көйләп киләм.

- Һыҙғырма! - тип тыя ҡатын. - Аҡсаңдан яҙаһың әтеү...

Ә мин һаман туктамай дауам итәм.

- Нисек юҡ аҡсаңдан яҙаһың ти инде... - тип, һаман һыҙғырам.

- Һыҙғырма машина эсендә, - тип ҡабатланы ҡатын ҡаты ғына итеп.

Һыҙғырыуҙан туктаным туктауын. Йылмайып ҡуйҙым. Йәнәһе, мин ундай юрауҙарға ышанмайым. Өфөгә һәйбәт кенә килеп еттек. Пушкин урамына боролдоҡ. Ә "Актерҙар йорто" алдында машина ҡуйырға һис урын юҡ.

- Ярай, беҙгә оҙаҡҡа түгел бит, ошонда ғына ҡалдырайыҡ машинаны, элек тә ошонда ҡалдыра торғайныҡ бит, - тинем дә, туктаным бер урында.

Машинаның ишектәрен ябып, икәүләшеп "Актерҙар йорто"на инеп киттек. Тиҙ генә эштәрҙе бөтөрөп, ағзалыҡ взностарын түләп сығыу ниәтем. Ә унда ингәс ни, һүҙ артынан һүҙ эйәреп, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Ашап та тормай, килеп сыҡтыҡ. Тик... ҡалдырған урында машинам юҡ... "Урлағандар!" тигән уй зыу итеп үтеп китте башымдан. Әллә икенсе урында ҡалдырҙыммы икән, тип, тирә-яҡты йүгереп йөрөп эҙләп сыҡтым. Юҡ. Бер ерҙә лә күренмәй. Урлағандар... Ул арала "Актерҙар йорто"нан Әхтәм Әхәт улы Абушахманов килеп сыҡты.

- Ҡайҙа ҡалдырҙың һуң машинаңды? - ти был.

- Бына тап ошо урында, эйе...

- Тимәк, эвакуатор тейәп алып киткән. Борсолма. Хәҙер бер биш минуттан тағы килеп етерҙәр, - ти Әхтәм Әхәт улы көлөп.

Ысынлап та, биш минут үттеме-юҡмы, аллы-артлы тағылышып тигәндәй килеп тә еттеләр. Килеп тә еттеләр, дөрөҫ ҡуйылмаған машиналарҙы тейәй ҙә башланылар.

- Ҡайҙа минең машина, әле генә ошонда ҡалдырғайным?

- А, она уже на Пархоменко, 131.

Ә унда нисек барырға икән һуң, тип уйларға өлгөрмәнем, шунда уҡ бер таксист килеп тә туктаны. "Абый, мин беләмен кайда икәнен, ултырығыз, илтеп ҡуям", - ти. Ни сара ҡылаһың инде, ултырып киттем. 400 һумымды алып ҡалды.

Ә автостоянкала минең кеүек "асыҡ ауыҙҙар" тағы ла күберәк булып сыҡты. Сират алып, бер сәғәттән баҫып торғас, машиналар янына индерҙеләр. Машинамды эҙләп тапҡас, тағы бер бинаға ебәрҙеләр. Унда ла сират. Ул сират күперҙәрен үтеп, машинам янына килһәм, квитанция таптыралар. Яңынан кассаға барҙым. Эвакуатор өсөн - 1500 һум, юл ҡағиҙәһен боҙоп, машинамды ярамаған урында ҡалдырған өсөн шундай уҡ сумма. Ярайһы уҡ аҡсамды ҡалдырып сығып киттем шулай...

Был эштәрҙе тамамлағанда ҡараңғы төшөп килә ине инде. Балаларҙы күреү ҡайғыһы ла китте. Тиҙерәк ҡайтыу яғына тайғы килә. Машинамды Стәрлегә борҙом. Булгаково ауылында туктап, кеҫә төбөндә ҡалған тимер тәңкәләргә ике бәлеш һатып алып ашаныҡ та, шым ғына юлды дауам иттек. Етмәһә, ҡатын:

- Ниңә һыҙғырмайһың, - тип ирештерә.

- Юҡ, - мин әйтәм, - һыҙғырмайым!

Бына ошо хәлдән һуң мин өйҙә лә, машинала ла һыҙғырмайым!

Раuил ГАЛИН.

***✓ Дәрткә баш булмау кешене уның ҡоло итә. Аллаһы Тәғәләгә яҡын булырға теләгән кеше үҙенең теләк-дәртенә ҡаршы барырға тейеш. Тауҙы бармаҡ менән ер итеп тигеҙләү үҙ теләк-дәртеңде һүндереүгә ҡарағанда күпкә еңелерәк.***

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Яҡшы орлоҡто уңдырышлы ергә сәсһәң, ул, әлбиттә, яҡшы уңыш бирә. Иген тәбиғәттең төрлө шарттарын күреп үҫә, ләкин ул бирешмәй, хужалары өсөн күҙ ләззәте булып, уңыш бирә. Әгәр инде уңышһыҙ ергә орлоҡ сәсһәң, унда ҡый үләне генә үҫеп, араһындағы яҡшы үләндәрҙе баҫып ала, үҫергә ҡамасаулай. Уны сүпләп тә, йолҡоп та бөтөрөп булмай.**

# ХӘРАМДАН ТЫЙЫЛАЙЫҠ!



Тормошта кешеләр менән дә шулай: бала тәрбиәләп үҫтереү иген үҫтереү менән бер. Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе барлыҡҡа килтергәндән алып хәрәм ризыҡтарҙан, алама эштәрҙән, насар һүҙҙәрҙән тыйып, китаптар төшөргән. Уларҙың хәләл эштәрҙе, хәләл ризыҡтарҙы ғына хуплаған иң һуңғыһы - Ҡөрьән Кәрим.

Хәрәм, йәғни урлап, алдау юлы менән табылған, араҡы кеүек иҫерткес эсемлектәр һатыу юлы менән алынған ризыҡ, сусҡа ите, Аллаһ исеме әйтеп һуйылмаған ит ашатып үҫтергән баланың тәне - уңдырышһыҙ тупраҡ кеүектәр. Атаәсәнең балаға тик насар һүҙҙәр һөйләп, мәҫәлән, туғандарын, күршеләрен, уҡытыусыларын, тәрбиәселәрен яманлап, башҡалар алдында үҙен тәкәббер тотоп, йә булмаһа, бахыр булып йәшәүе баланың күңеленә насар орлоҡ сәсеү була. Харам ризыҡ ашап үҫкән баланың ҡаны, тәне уңдырышһыҙ ер булһа, ата-әсәнең теленән сыҡҡан насар һүҙҙәр алама орлоҡ булып, бала күңеленә сәселә. Ундай бала үҫкәс тә бер нисек тә алға китә алмай, сөнки уның тәне лә, йәне лә харам булып етешә.

Ризығың аҙ булһа ла, балаңа тик хәләл ризыҡ ашатып үҫтерһәң, баланың тәне уңдырышлы ер кеүек булыр. Ниндәй генә ауырлыҡтар күрһәң дә, насар һүҙҙәр ишетһәң дә, кешеләрҙең хыянатын кисерһәң дә, сабыр итеп, ныҡ булып, күңелеңде һүрелдермәй, балаларыңа барыһын да матурлыҡ, изгелек итеп еткерә белеү - яҡшы орлоҡ сәсеү кеүектер. Быңдай бала тормоштоң ел-ямғырына бирешмәй, аяғында ныҡ баҫып торасаҡ. Араҡы эсеү, насар ғәмәлдәр ҡылыу, кәмһетелеп йәшәү баланың күңеленә оҡшамаясаҡ, хәрәм юлға осраһа, уны ташлап, хәләл юлды һайлаясаҡ. Ул баланы Аллаһы Тәғәлә үҙе етәкләйәсәк, сөнки ата-әсә уны Аллаһтың тыйғандарынан тыйып, ҡушҡандарын үтәп үҫтергән. Шуға күрә балаға хәрәм ризыҡ ашатып йәшәүҙән тыйылырға кәрәк.

Ғайса бәйғәмбәр (салаллаһу-ғәләйһи-сәләм) әйткән: "Күктәге ҡоштарға ҡарағыҙ, ерҙәге йәнлектәрҙе күрегеҙ: улар иген сәсмәйҙәр, ураҡ урмайҙар, уңыш йыймайҙар, әммә Аллаһы Тәғәлә уларҙы туйындыра. Ә һеҙ уларға ҡарағанда күпкә юғарыраҡ түгелме?"

Беҙҙең халыҡ атеистик рухта үҫкәс, балаларға дини тәрбиә биреү юлының дөрөҫ икәнен яңы аңлай башланы. Шул үткән осорҙа бер нисә быуын балалар эскелеккә бирелде, йәшәү мәғәнәһен тапманы, эшһеҙлек көсәйҙе, ғаиләләрҙең тотороҡлоғо түбәнәйҙе. Балалар араһында тәкәбберлектең, тупаҫлыҡтың, битарафлыҡтың, күрә алмаусанлыҡтың ғәҙәти күренеш булыуы йөрәкте һыҙлата. Балаларҙы алама холоҡтарынан йолоп алыу, уларға дөрөҫ тәрбиә биреү өсөн, ата-әсәләргә, тәүбәгә килеп, ҡылған гонаһтары өсөн Аллаһы Тәғәләнән илап-ялбарып ярлыҡау һорап, иман юлына баҫырға кәрәк. Аллаһы Тәғәлә бөйөк ғәфү итеүсе! Ул бар гонаһтарҙы ла ярлыҡай. Тик тәүбәгә килгәс, уларҙы ҡабатламаҫҡа тырышырға кәрәк. Аҡыллы булған кеше: "Атаәсәм мине дөрөҫ юлға баҫтырмаған", - тип үкенергә тейеш түгел, ул үҙе тура юлға баҫырға, аҙашыуҙа булған туғандарын, яҡындарын иман юлына өгөтләргә бурыслы.

**Зәлифә ШАКИРОВА.**
**Әбйәлил районы**
**Асҡар ауылы.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

## НӘФСЕ

37. Нәфсе дәртле һәм асыулы. Нәфсе дәрте ярҙамында үҙе өсөн файҙа килтергән маҡсатына ирешһә, асыуы ярҙамында үҙенә зыянлы нәмәләрҙән ҡотолорға тырыша. Нәфсе ошо ике сифаты урталығында торорға тырыша, береһе саҡ ҡына кәмей башлаһа, нәфсе үҙендә һәм тәнендә етешһеҙлек тоя башлай.

- Әгәр ҙә дәрт саманан тыш арта башлаһа, ыҙғыштар, уҫаллыҡ, үҙһүҙлелек, ике йөҙлөлөк һәм хаяһыҙлыҡ сәскә ата. Дәрттең үҙ самаһында булыуы кешелә тыуған ихтыяжды ҡәнәғәтләндерерлек булһа, еткән;
- Әгәр ҙә кеше үҙенә кәрәгенән артыҡты теләй башлаһа, был күңел боҙоҡлоғона алып килә;
- Әгәр ҙә кеше мохтажлығы булмайынса үҙенә файҙа эҙләһә, һаранға әүерелә;
- Әгәр ҙә ул нимәнелер оҙаҡ ваҡыт теләһә, ҡыл ҡыбырҙатмаһа, ҡул ҡаушырып көтөп ултырыусыға ғына әүерелә;
- Әгәр ҙә ул хыялға ашмаҫлыҡ нәмәне теләһә, әшәкегә әүерелә;
- Әгәр ҙә кеше юғары урын һәм унан кинәнес алырға теләһә, һөҙөмтәлә нәфселегә, шәһүәтлегә әүерелә;
- Әгәр ҙә кеше һәр ваҡыт ҡайҙандыр нимәлер алырға ғына теләһә, унда ике йөҙлөлөк сифаты барлыҡҡа килә;
- Әгәр ҙә кеше нимәлер сарыф итеүҙән ярлыланырмын, тип ҡурҡһа, теләһә нимә уйлай башлай;
- Әгәр ҙә кешенең тәбиғәтендәге дәрте көсһөҙ һәм етерлек булмаһа, һөҙөмтәлә көсһөҙлөк, иҫәүәнлек һәм хуш күңеллелек килә;
- Әгәр ҙә кешенең асыуы саманан тыш артып китһә, уҫаллыҡ, тиҙ ҡыҙып китеүсәнлек, түҙеп тора алмаусанлыҡ, кешене һыйҙырмау сифаты, ялғанлыҡ, тиҫкәрелек, эгоизм, буш ҡыуыҡлылыҡ сифаттары барлыҡҡа килә;
- Әгәр ҙә кеше асыуына баш була алмаһа, был уның тәбиғәтенә һеңә, көнкүрешенә ояләша;
- Әгәр ҙә кешенең асыуы йомшарһа, ул үҙ-үҙен күрә алмай башлай, битарафҡа, ихтыярһыҙға, булдыҡһыҙға әүерелә;
- Әгәр ҙә кешелә дәрт тә, асыу ҙа күп булһа, көнләшеү тойғоһо уяна;
- Әгәр ҙә асыу өҫтөнлөк итһә, ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшкән кешене күрәлмау тойғоһо барлыҡҡа килә.

38. Дәрт һәм Иблис. Иблисте Аллаһы Тәғәләнең асыуы тип тә атайҙар. Иблис гонаһ ҡылырға теләгән кешенең күңелендә барлыҡҡа килә. Иблис дәрт барлыҡҡа килеү менән уға йәбешә һәм уны үҙенсә биҙәп, йөрәккә күрһәтә. Быңдай дәртте ымһыныу тип тә атайҙар.

39. Дәрткә ҡаршы тороу. Суфыйҙар дәртте ике төргә бүлеп йөрөтә: нәфсе дәрте һәм Илаһи мөхәббәт. Илаһи мөхәббәткә эйә кешеләрҙең дәрте самаһыҙ була. Дәрткә баш булмау кешене уның ҡоло итә. Аллаһы Тәғәләгә яҡын булырға теләгән кеше үҙенең теләкдәртенә ҡаршы барырға тейеш. Тауҙы бармаҡ менән аҡтарып, ер менән тигеҙләү үҙ теләк-дәртеңде һүндереүгә ҡарағанда күпкә еңелерәк.

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Өсөнсө сер: үҙеңде ҡабул итеү сәнғәте

Тыуғандан алып биш йәшкә тиклем мейе тиҙ үҫешә. Психологтар был ваҡытты тиҙләтелгән үҫеш осоро (тупланыу осоро) тип атай. Ошо ваҡытта мейе төп мәғлүмәтте, мөһим тойғоларҙы ала һәм тап улар киләсәктә холоҡ-фиғелде формалаштыра ла инде. Әгәр был ваҡытта ата-әсәнең үҙбаһаһы түбән булһа, балаларҙың хисле аңы уларҙың тормошҡа мөнәсәбәтен үҙенә һеңдерә.

Түбән үҙбаһа тыуыуы беренсе хаталаныуҙан, баланы "насар ҡыҙыҡай" йәки "насар малай" тип атағандан уҡ башлана. Ул был һүҙҙәрҙе үҙенсә аңлай һәм үҙен "насар" тип раҫлай башлай. Ә бит ул үҙе түгел, бары тик уның ҡылығы ғына насар ине. Ғөмүмән, насар балалар булмай. Теләһә ниндәй баланың бер генә "насар" яғы бар - нимә ыңғай һөҙөмтә бирә икәнлеге тураһындағы мәғлүмәт юҡлығы. Әлбиттә, балалар эшләргә тейеш булмаған һәм уларҙан тәртип талап иткән нәмәләр ҙә бар. Әммә улар үҙҙәре генә бер ваҡытта ла баланы насар яһамай. Ололарҙан "насар ҡыҙыҡай" йәки "насар малай" тигән һүҙҙе ишеттегеҙ икән, шунда уҡ үҙегеҙҙе ғәмәлдәрегеҙ менән күҙаллай башлайһығыҙ, ә ғәмәлдәрҙең бары тик тәү сираттағы ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү сараһы ғына икәнлеген танымайһығыҙ. Балаға шуны бәләкәй ваҡыттан уҡ аңлатмаһағыҙ, ул үҙен насар тип уйлап, бала саҡта уҡ төпкө аңына һалынған программа буйынса артабан да ыҙалаясаҡ, үҙен кәм итеп тоясаҡ. Һуңыраҡ быңдай хистәр оялыу, үҙ-үҙеңде ашау, выждан ғазабы, һәм иң аламаһы - ғәйеп тойғоһо булып сағылыш табасаҡ.

Түбән йәки кире үҙбаһа сағыштырыу ярҙамында ла формалаша. Ата-әсә баланы ағаһы, апаһы йәки берәй сит кеше менән сағыштыра икән, балаларҙа кәмселек тойғоһо ныҡлы тамыр йәйә. Етешһеҙлектәрен үҙенең шәхесенең бер өлөшө итеп ҡабул итергә мәжбүр иткәс, бала үҙен тиңдәштәре менән сағыштыра, улар менән һоҡлана башлай. Улар көслө рухлы, популяр, һәләтле, үҙ-үҙенә ышанған икәнлегенә инанып, ул тулыһынса үҙен кәм тойоу власына тапшыра. Әгәр ата-әсә ваҡытында тәнҡит һүҙҙәрен, "Быңдай эш эшләү өсөн һин ныҡ аҡыллы малай йәки ҡыҙ", тигән һүҙҙәр менән алмаштырһа, кире көйләнештән ҡасырға ла мөмкин булыр ине.

Ата-әсә тарафынан танылыу тапмау - тәрбиәнең икенсе хатаһы. Күпселек ололар балаларҙың тойғоһона, теләктәренә һәм фекеренә бик аҙ иғтибар бирә һәм "балаларҙың тауышы сыҡмаҫҡа тейеш", "атай менән әсәй күберәк белә", тигән стандарт яуап ҡайтара. Ҡайһы берҙә балаларҙың ҡаршылығын улар үҙҙәрен һанламау, ихтирам итмәү тип ҡабул итә. Абруйлы психологтар быңың менән килешә - быңдай мөнәсәбәт ата-әсәнең үҙбаһаһы түбәнлеген һәм уларҙың һәр саҡ беренсе булырға тырышыуын күрһәтә. Бала саҡта үҙҙәре хыялланып та, тормошҡа ашмаған хыялдарын балалары тормошҡа ашырыуҙы талап иткән ата-әсәләрҙең күплеге лә хайран итә. Ололар балаларҙы уларға тап килмәгән тормош менән йәшәргә мәжбүрләй. Әммә шуны онотторға ярамай: бала һеҙҙең юғары талаптарығыҙға бары тик бер сәбәп буйынса ғына тап килмәүе мөмкин: уның быңың өсөн хис, интеллект һәм физик мөмкинлеге юҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 18 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.20 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Улыбка пересмешника". Мелодраматический сериал. 9-я и 10-я серии (16+).
23.25 Ночные новости.
23.40 "1992". Драматический сериал (16+).
01.40 "Время покажет" (16+).
02.30, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.30 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

Уважаемые читатели! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 11.55.
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Земский доктор-4". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сын моего отца". 1-3 серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.50 "Благотворитель", "Прототипы. Профессор Преображенский. Собачье сердце" (12+).
02.25 "Срочно в номер!" Детективный сериал (16+).
03.25 "Взорвать мирно. Атомный романтизм" (12+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 Новости недели.**
**14.45, 01.30 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Черный генерал" (6+).**
**17.45 Встреча Главы Республики Башкортостан Р. З. Хамитова с победителями конкурса "Человек года-2015" (повтор от 29.12.2015) (12+).**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Асык дарес" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Живой". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 А.Ягафарова "Дочь степей" (12+).**

## 19 ЯНВАРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Улыбка пересмешника". Мелодраматический сериал (12+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят!" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Улыбка пересмешника". 11-я и 12-я серии (12+).
23.25 Ночные новости.
23.40 "1992" (16+).
01.40 "Время покажет" (16+).
02.30 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.430 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Земский доктор-4". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сын моего отца". 4-6 серии (12+).
23.50 "Вести.doc" (16+).
01.35 "Химия нашего тела. Гормоны", "Смертельные опыты. Кровь". Док. фильмы (12+).
03.10 "Срочно в номер!" Детективный сериал (16+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Полезные новости" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.45, 01.15 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Биш дауа" (12+).**
**18.45 Хоккей КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Большая маленькая я". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Ш. Хусаинов "Мама приехала" (12+).**

## 20 ЯНВАРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Улыбка пересмешника". Сериал (12+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 01.40 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.30, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Улыбка пересмешника". 13-я и 14-я серии (12+).
23.25 Ночные новости.
23.40 "1992" (18+).
03.00 Новости.
03.55 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 11.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Земский доктор-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сын моего отца". 7-я и 8-я серии (12+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.35 "Свидетели. Запад есть Запад. Восток есть Восток. Всеволод Овчинников" (12+).
02.40 "Срочно в номер!" Сериал (16+).
0340 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45, 01.15 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**16.00 "Байтус" (0+).**
**16.15 "Капитономика" (0+).**
**16.45 "Клио" (6+).**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Интервью".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Король вечеринок". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Н.Гаитбаев "Не плачь, любимая" (12+).**

## 21 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Улыбка пересмешника". Сериал (12+).
14.20 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 01.40 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.30, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Улыбка пересмешника". 15-я и 16-я, заключительная, серии (12+).
23.25 Ночные новости.
23.40 "Городские пижоны". "1992" (18+).
03.00 Новости.
03.30 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.40 "Земский доктор-4". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сын моего отца". 9-я и 10-я серии (12+).
22.55 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
00.35 "Эдвард Радзинский. Боги жаждут". Главы 3-я и 4-я (12+).
03.05 "Срочно в номер!" Детективный сериал (16+).
04.05 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Дети-герои" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учим башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.45, 01.15 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (6+).**
**17.15 "История признания" (12+).**
**17.30 "Новости культуры".**
**17.45 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Историческая среда" (6+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сочи" (Сочи).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Король вечеринок-2". Худ. фильм.**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Ф.Буляков. "Похищение стариков" (12+).**

## 22 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Улыбка пересмешника". Мелодраматический сериал (12+).
14.20 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. Финал (16+).
24.00 "1992". Драматический сериал (18+).
02.00 "Меня зовут Хан". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.40 "Земский доктор-4". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина". Юмористический фестиваль.
22.55 "Нечаянная радость". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
02.55 "Кузькина мать. Итоги. Бомба для победителей" (12+).
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Перекличка" (0+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.15 "Ал да гөл" (0+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Позывной "Барс" (6+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Быуын" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Король вечеринок-3". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Б.Рафиков. "Прими их, Шамбала" (12+).**

## 23 ЯНВАРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.20, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.20 "Настя". Худ. фильм (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Нина Гребешкова. "Я без тебя пропаду" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Теория заговора" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Спортлото-82". Комедия.
17.10 "Следствие покажет" с Владимиром Маркиным (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 Концерт Елены Ваенги.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Звездная карта". Трагикомедия (16+).
01.00 "Страх высоты". Комедия (16+).
02.50 "Наверное, боги сошли с ума-2". Худ. фильм (16+).
04.45 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

04.25 "Формула любви". Худ. фильм.
06.15 "Сельское утро".
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.00 "Тренды" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Алексей Баталов" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Две жены" (12+).
12.15 "Врачиха". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Врачиха". Продолжение сериала (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Средство от разлуки". Мелодрама (12+).
00.50 "Отец поневоле". Мелодрама (12+).
02.55 "Взрывники". Худ. фильм.
04.35 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Эрнест и Селестина: Приключения мышки и медведя" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Клио" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Вячеславом Черневым (6+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ" представляет…" (12+).**
**16.45 Ф.Буляков. "Голубушки мои" (12+).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-саға" (6+).**
**20.45 "Осрашыу" (12+).**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Четвертый период" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры представляет…" (12+).**
**23.45 "Доктор Т и его женщины". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Концерт ко дню рождения В.Высоцкого "Своя колея".**
**03.45 А.Яхина. "Не ломайте крылья" (12+).**

## 24 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Зубная фея". Худ. фильм (12+).
08.10 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики". "ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Гости по воскресеньям".
13.10 "Титаник". Мелодрама (12+).
17.00 "Точь-в-точь". Финал.
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Своя колея". К дню рождения Владимира Высоцкого. (16+).
00.20 "Уолл-стрит: деньги не спят". Худ. фильм (16+).
02.50 "День благодарения". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.50 "Хозяин тайги". Худ. фильм (16+).
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.10 "Только о любви". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Только о любви". Продолжение сериала (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
24.00 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
01.00 "Хочу замуж". Худ. фильм (12+).
03.00 "Кузькина мать. Итоги. На вечной мерзлоте" (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Осрашыу" (12+).**
**09.00 "Четвертый период" (6+).**
**09.30 Мультфильмы (0+).**
**10.00 "Физра". Спортблог спецкора (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "По следам Акбузата" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Полезные новости" (12+).**
**16.45 С.Сурина. "Золотое сердце" (12+).**
**18.00 "Быуын" (6+).**
**18.45 "Позывной "Барс" (6+).**
**19.00 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.15 "История признания" (12+).**
**19.30 "Любимое дело" (12+).**
**20.00 "Опасные гастроли". Худ. фильм.**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 Мотогонки на льду. Командный чемпионат России. Суперлига (6+).**
**00.30 "Байыҡ" представляет…" (12+).**
**01.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**02.15 Г.Ибсен. "Кукольный дом" (12+).**

✓ *Биш тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина тиҙ уйнала торған шашка буйынса донъя чемпионатында көмөш миҙал яулағайны. Ә Александр Георгиев чемпионлыҡ титулын һаҡлап ҡалды.*



*ҺАҠ БУЛ, КЕШЕ!*

# ҺАҠЛАНҒАНДЫ ХОҘАЙ ҺАҠЛАР

**Бик йыш шулай тип ҡабатларға яратабыҙ ҙа, ҡайһы саҡта бөтөн яуаплылыҡты Аллаһы Тәғәләгә генә ауҙарып ҡуйырға тырышабыҙ, шикелле. Аллаһы Тәғәләгә өмөтлән, тик үҙең дә ауыҙ асып йөрөмә, тигән мәҡәл дә бар икәнен генә хәтерҙә тоторға теләмәйбеҙ. Һөҙөмтәлә - алынған йәрәхәттәр, бәлә-ҡазалар, өҙөлгән ғүмерҙәр...**



Бигерәк тә Яңы йыл каникулдарының ҡайһы бер балалар өсөн аянысла тамамланыуы, көтөп алған ялдарын дауаханаларҙа үткәрергә мәжбүр булыуы ҡыҙғаныс. Мәҫәлән, тотош Башҡортостан буйынса бер тәүлектә генә травмпункттарға йөҙләп зыян күреүсе, шул иҫәптән бәләкәй балалар, мөрәжәғәт иткән. Һәр район-ҡаланың үҙәк майҙанында эшләнгән боҙ ҡаласыҡтарындағы, һырғалаҡтарҙағы күңел асыуҙар күҙ йәшенә мансылған эҙемтәләргә килтермәһен өсөн яуаплылыҡ тәү сиратта ата-әсә елкәһенә ята. Улар балаларҙың үҙҙәрен генә ҡалдырып, боҙ тауҙарында, һырғалаҡтарҙа этеш-төртөшкә юл ҡуйырға, тау шыуғанда хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен (арттан төшөүсе аяғы менән бәрелмәһен өсөн, махсус ҡулайламаларҙа шыуырға, тауҙан аяғүрә баҫып түгел, ултырып төшөргә) үтәү кәрәклеген иҫкәртеп торорға бурыслы. Әммә бик йыш ололар үҙҙәре үк балаларға кире өлгө күрһәтә. Юҡҡа ғына, балалар беҙҙең нимә һөйләгәнде тыңламай, ә нимә һәм нисек эшләгәнде ҡабатлай, тимәйҙәр.

Ололарҙың һаҡһыҙлығы һәм хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәмәүе, уларға етди иғтибар бирмәүе янғын осраҡтарына ла сәбәп булып тора. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Баш идаралығы матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, республикала йыл башынан алып 110-дан ашыу янғын осрағы теркәлгән. Уларҙа 23 кеше һәләк булған. Күп осраҡта янғын сығыуға һүндерелмәгән тәмәке төпсөгө йәиһә ут менән һаҡһыҙ эш итеү сәбәпсе булып тора. Байрам ваҡытында бындай күңелһеҙ күренеш ике тапҡырға арта, тип белдерә янғынға ҡаршы хеҙмәт белгестәре. Шулай уҡ хужаларҙың электр селтәрен үҙ белдеге менән үткәреүе, хаҡы осһоҙ тип, сифатһыҙ сымдар алыуы, ялғау урындарын нығытмауы һ.б. "ҡыҙыл әтәс" ҡотороуға булышлыҡ итә. Юҡҡа ғына халыҡ араһында, һыуҙан ҡала, уттан ҡалмай, тигән мәҡәл киң таралмаған.

**Әйткәндәй, әле күптән түгел Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылында йәшәүсе Рәйлә һәм Ғәлинур Ғәлиуллиндарҙың өйҙәре янып, бәләкәй өс бала менән (3 һәм 7 йәшлек ике ҡыҙ, 5 йәшлек малай) бер нәмәһеҙ урамда тороп ҡалалар. Халҡыбыҙ борон-борондан милләттәштәрен бәлә-ҡаза алдында яңғыҙ ҡалдырмаған. Беҙ ҙә, замандаштар, уларға кейем-һалым, донъя кәрәк-ярағы, аҡсалата мөмкин тиклем ярҙам итербеҙ, тигән өмөттәбеҙ. Теләүселәр Ғүмәрова Сәимә Ғәйнулла ҡыҙы (89371537897) исемендәге 6390 0206 9005 5194 73 номерлы Сбербанк картаһына аҡса күсерә ала.**

*О, СПОРТ!*

# КЕМДӘР УЛАР...

## иң көслө спортсылар?

**2015 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостандың иң көслө спортсылары билдәләнде. Башҡортостан Республикаһы Йәштәр сәйәсәте һәм спорт буйынса министрлығы тарафынан төҙөлгән исемлектең башында йөҙөүсе Полина Егорова һәм шорт-трексы, олимпия уйындары чемпионы Семен Елистратов урын алған. Икенсе урында - рапирасы Артур Әхмәтхузин. Биатлонсы Антон Бабиков менән бобслейсы Илвир Хузин - өсөнсө баҫҡысты бүлешә. Шашкасылар - Тамара Танһыҡҡужина һәм Александр Георгиев иһә - шартлы пъедесталға бына баҫам, бына етәм, тип тора, йәғни улар - дүртенсе баҫҡыста. Әйткәндәй, былтырғы рейтингта Тамара Танһыҡҡужина Айнур Шәйбәков менән бишенсе баҫҡысты биләгән булған, быйыл Тамара Танһыҡҡужина бер баҫҡысҡа юғарыға күтәрелде.**



Спортсыларҙың быйылғы уңыштарына ҡыҫҡаса байҡау яһайыҡ. Беренсе баҫҡысҡа ышаныслы күтәрелгән Салауат ҡалаһы ҡыҙы, йөҙөүсе Полина Егорова декабрь урталарында герой-ҡала Волгоградта үткән йөҙөү буйынса Рәсәй беренселегендә иң күп миҙал алыуы менән спорт һөйөүселәрҙе таң ҡалдырҙы. Ул арҡаға ятып, 100 метрға йөҙөү буйынса - алтын, 200 метрға - көмөш менән бронза миҙал алды. Рапирасы Артур Әхмәтхузин 1-3 майҙа Санкт-Петербургта үткән рапира буйынса донъя кубогы этабында Рәсәй командаһы составындағы командалар ярышында алтын миҙал яулаһа, биатлонсы Антон Бабиков иһә 22 декабрҙә Ижевскиҙа үткән "Ижевск винтовкаһы" Рәсәй кубогының өсөнсө этабында беренселекте ҡулдан ысҡындырманы.

Бобслейсы Илвир Хузин 13 декабрҙә Американың Лейк Плесид ҡалаһында үткән Донъя кубогының өсөнсө этабында Рәсәй командаһы составында көмөш миҙалға лайыҡ булды.

Биш тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина тиҙ уйнала торған шашка буйынса Төркиәнең Измир ҡалаһында үткән донъя чемпионатында көмөш миҙал яулағайны. Ә Александр Георгиев (туғыҙ тапҡыр донъя чемпионы) иһә быйыл Нидерландтың Эммен ҡалаһында камерун шашкасыһы Жан Марк Нджофанг менән осрашып, чемпионлыҡ титулын һаҡлап ҡалды.

*ХОККЕЙ*

# ЕҢЕҮҘӘР КӨТӘБЕҘ!

**Бөтә Рәсәй халҡы Яңы йылды оҙайлы ялдар менән ҡаршы ала. Ә илдең хоккей командаларыы өсөн ҡышҡы каникул оҙаҡҡа һуҙылмай. Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей клубы ла 2016 йылдың тәүге уйынын 4 ғинуарҙа уҡ Алыҫ Көнсығышта башлап ебәрҙе.**

Ситтә уҙғарған дүрт матчтың тәүгеһендә юлаевсылар Владивостоктың "Адмирал"ы менән осрашты һәм еңеүгә өлгәште. Матч иҫәбен асыуға өлгәшкән юлаевсылар осрашыу аҙағына тиклем уйын ҡомарын юғалтманы. Өфө командаһы тәүге осорҙа үҙ иҫәбенә - 3, ә өсөнсө осорҙа тағы бер мәрәй яҙҙы. Майҙан хужалары иһә юлаевсыларға тик 2 гол менән яуап биреү мөмкинлеге тапты. Шулай итеп, уйын һөҙөмтәһе 2:4.

Хабаровскиҙың "Амур"ы менән уйын, ҡыҙғанысҡа күрә, Игорь Захаркин командаһы өсөн уңышлы булманы. Тәүге осор ике командаға ла берәр мәрәй килтерҙе. Икенсе осорҙа иһә хужалар уңышлыраҡ булып сыҡты - улар үҙ иҫәбенә тағы ла өс гол яҙҙы. Юлаевсылар быға тик ике гол менән генә яуап бирә алды. Өсөнсө осор тигеҙ иҫәп менән тамамланды, шуға күрә уйын овертаймға күсте. Өҫтәлмә уйын ваҡыты бөтөүгә 32 секунд ҡалғас, "Амур" уйынсыһының голы командаһына еңеү килтерҙе. Матч иҫәбе - 5:4.

"Себер" менән уйында ла юлаевсылар буллит һөҙөмтәләре буйынса еңелеүгә дусар булды. Был матчты ла юлаевсылар ҡыҙыу башланы һәм тәүге осорҙа уҡ ике гол хужаһы булды. Ләкин икенсе осорҙа Новосибирск хоккейсылары боҙҙағы хәлде тулыһынса үҙ ҡулдарында тотто һәм Сведберг ҡапҡаһына ике шайба сәпәне. Осрашыу хужалар файҙаһына - 5:4.

Ике еңелеүҙең ҡонон юлаевсылар Новокузнецкиҙа тулыһынса ҡайтарҙы. Урындағы "Металлург" командаһын юлаевсылар 5:1 иҫәбе менән ҡыйратты.

Өфөләге тәүге уйынды "Салауат Юлаев" Түбәнге Новгородтың "Торпедо"һы менән үткәрҙе. Алыҫтан оҙайлы юл үтеп ҡайтыу тәьҫир иттеме, әллә башҡа берәй сәбәп булдымы, ләкин юлаевсылар ҡунаҡтарға тик бер гол ғына "бүләк" итә алды. Ҡунаҡтарҙың еңеүгә ынтылышы көслөрәк булып сыҡты - "Торпедо" хоккейсылары хужалар ҡапҡаһына 3 гол индерҙе.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (8) дүшәмбе | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:52 | 17:22 | 18:52 |
| 19 (9) шишәмбе | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:54 | 17:24 | 18:54 |
| 20 (10) шаршамбы | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:56 | 17:26 | 18:56 |
| 21 (11) кесе йома | 7:56 | 9:26 | 13:30 | 15:58 | 17:28 | 18:58 |
| 22 (12) йома | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 16:00 | 17:30 | 19:00 |
| 23 (13) шәмбе | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 16:02 | 17:32 | 19:02 |
| 24 (14) йәкшәмбе | 7:52 | 9:22 | 13:30 | 16:04 | 17:34 | 19:04 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 ғинуар "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә

**17 ғинуар "Бер мәл санаторийҙа"** (Н. Ғәйетбай), комедия

**20 ғинуар "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма

**21 ғинуар "Йософ һәм Зөләйхә"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин), музыкаль риүәйәт

**22 ғинуар "Джут"** (О. Жанайдаров), драма

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**16 ғинуар "Ай булмаһа, йондоҙ бар..."** (Т. Миңнуллин), драма

**17 ғинуар "Аладдин: тающий песок, или жгучий снег..."**, әкиәт. Башлана 12.00

**21 ғинуар "Аҙашҡан ҡунаҡ"** (Н. Птушкина), комедия

**22 ғинуар "Тыңлайыҡ ваҡыт аҡҡанын"** (М. Ҡунафин)

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

Йәш "Ҡарауан" төркөмө состав яғынан да, репертуар йәһәтенән дә үҙгәрештәр кисерҙе. Бөгөн төркөм халыҡ-ара, Рәсәй һәм республика конкурстары лауреаттары Эльмир Әбүбәкиров, Марсель Ҡотоев, Тимур Рамазанов, Рөстәм Шаһыбалов кеүек йәш, дәртле һәм ҡыйыу башҡарыусыларҙан тора. Яңы состав, яңы программа яңы исем дә талап итә, тип, **конкурс** иғлан итергә булдыҡ. **Йәш "Ҡарауан" төркөмөнә яңы исем уйлап тап!** 31 ғинуарға тиклем тәҡдимдәрегеҙҙе mansu-rita@mail.ru электрон адресына ("Конкурсҡа" билдәһе менән) ебәрергә, йә 276-24-41 телефонына шылтыратығыҙ. Еңеүсене 1 февраль билдәләйәсәкбеҙ.

✓ *Тыныс йәшәргә теләһәң, телеңде тый, оҙаҡ йәшәргә теләһәң, ауыҙыңды тый.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*

ЗАУЫҠ

# КЕШЕ ҒҮМЕРЕ - ТӨШ КЕНӘ

Урал МОСТАФИН



**Һәр тыуаһы яңы йылды яңы уңыштарға, яңы өлгәштәргә, яңы хистәргә өмөтләнеп ҡаршы алабыҙ. Ҡайһы бер өмөттәребеҙ тормошҡа ла аша. Ул ваҡытта беҙ уны, шулай булырға тейеш ине, тип тыныс ҡына ҡабул итәбеҙ. Ҡайһылары мәңгегә бойомға ашмаҫ хыял, ниәт кенә булып ҡала, ҡайһылары йәнде ҡуҙғытып йөрөй-йөрөй ҙә, үҙенән-үҙе һүрелеп ҡуя. Эх, яҙмышын яҙған ҡәләм кешенең үҙ ҡулында булһа ине, тип үкенеп тә ҡуяһың...**

## Тулы Айҙа...

Тулы Айға күҙҙе терәп,
Һүҙ әйтергә теләй йөрәк.
Йөрәк һүҙең менән бергә
Йәнең тере булыу кәрәк.

Кистән өргән елдәр тымыҡ,
Аң өйөндә һиллек, тынлыҡ.
Күңелемдең "биле" түгел,
Ҡәләмемдең осо һыныҡ.

## Ҡоралай

Керпек, ҡашың һыҙылғандыр
Хаҡ Тәғәлә ҡәләменән,
йөҙөң алсаҡ, мөләйемдер
фәҡәт Уның әләменән.
Уйҙарымды, хистәремде,
һиңә ғишыҡ һүҙҙәремде
яҙыр өсөн хәҙистәргә,
ҡағыҙ кәрәк ҡәләм менән.
Гүзәл буйың-һының менән
йөрәгемде яралайһың,
елпеп кенә төштәремә
килеп тә һин урамайһың.
Йән-тәнемә ут һалыусы
 уйсан, шаян ҡоралайһың,
төңөлгәндә ирендәрең
тәме менән дауалайһың...
Ай нурына тиң ҡарашын
йәшерә ул һаман минән.
Керпек, ҡашын күрер өсөн
фанилыҡтан Күккә менәм.
Өндәшмәһә, күрешмәһә,
һөйләшмәһә минең менән,
ирендәрен үбер өсөн,
эшлә, Аллам, кәсә минән!

## Еңелә

Тормош кешенең яҙмышын
Типкеләйҙер туп кеүек.
Кешеһе лә сама белмәй
Тешләшә бит ҡорт кеүек.

Тормош, типкеләп арыһа,
Тешһеҙ игәүҙәй игәй.
Ғәзиз балаһы булһа ла,
Ул уға, гүйә, үгәй.

Тибешәләр, тешләшәләр,
Кем кемдә еңер икән?
Кеше еңелер, ахыры,
Тештәре төшөп бөткән...

## Ипле йәшәр кәрәк ине

Ипле йәшәр кәрәк ине,
Маһаймай, маһмайланмай,
Тешләгән, йотҡандарыңдан
Ауыҙ-морон майланмай.

Ипле йәшәр кәрәк ине,
Ҡарышмай, ҡаршылашмай,
Күңеленә оҡшаһа ла,
Йоҡмағанға һылашмай.

Ипле йәшәр кәрәк ине,
Алғанда, бирә белеп,
Йөрәгең менән һөйгәндә,
Һөйгәнеңдән үбелеп.

Ипле йәшәр кәрәк ине,
Ҡайҙа һуң самалары?
Йәнде ҡытыҡлай кешенең
"Кашауай саналары"...

Ипле йәшәр кәрәк ине,
Гел үҙең генә булып...

Юҡ шул.
Күңелдә ҡорт саға,
Күҙҙе томалай болот.

## Мәңгелеккә...

Был донъяла әҙәм заты
Тыуып тора, үлеп тора.
Хаҡ Тәғәлә барыһын да
Күреп тора, белеп тора.

Әҙәм заты был донъяны
Төҙөп-ҡора, боҙоп-ҡыра.
Хаҡ Тәғәлә барыһын да
Белеп тора, күреп тора.

Әҙәм заты менән донъя,
Гүйә, еңмеш уйын ҡора.
Хаҡ Тәғәлә отолғанды
Йәһәннәмгә олаҡтыра...

## Әҙәм ғүмере - төш кенә...

Ҡоштар һайрай, салғы сыңлай,
Сәскәләр йығылып шиңә...
Хаҡ һәм нахаҡ ғәмәлдәр күп,
Кеше ғүмере - төш кенә.

Күктән йондоҙ, ерҙән сәскә
Гүзәлдәрҙең түшенә...
Хыял, наҙҙа хыянат күп,
Кеше ғүмере - төш кенә.

Йөрәк тала, хистәр таша
Тәҡәт бирмәй кешегә.
Ғәжизлек тә, ғәрлек тә күп,
Кеше ғүмере - төш кенә.

Кемдер илай, кемдер көлә
Ярар өсөн кешегә...
Тигеҙ килеп, тигеҙ киткән
Әҙәм ғүмере - төш кенә.

ЯҢЫ КИТАП

# ВӘЛИДИ - ТӨРКӨСТАН ТУРАҺЫНДА

**З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Бөгөнгө төркиле Төркөстан һәм яҡын тарих" тип аталған китабының икенсе бүлеге донъя күрҙе.**




Баҫмала Төньяҡ-Көнбайыш Төркөстандың халҡы, географик урыны, тарихы тураһында мәғлүмәт бирелһә, икенсе өлөшөндә тарих тураһында һүҙ бара. Аҫаба халыҡ, Төркөстандың туран һәм башҡа мәҙәниәттәр, күк төркиҙәр һәм ислам, ҡарахан, монгол походтары, шулай уҡ Тимербәк замана тураһында мәсьәләләр күтәрелә. Шул осорҙағы сәйәси ваҡиғаларға ҙур урын бирелә. Тарихсы ғалим Рәсәйҙең XVI-XVIII быуаттарҙан алып XX быуатҡа тиклемге колониаль сәйәсәтен һәм башҡорттарҙың, ҡаҙаҡтарҙың, үзбәктәрҙең һәм Төркөстандың башҡа халыҡтарының милли-азатлыҡ ихтилалдарын ентекле һүрәтләй. Автор шулай уҡ Рәсәйҙә 1917 йылғы революциянан һуңғы тарих барышын, унан һуң башланған һәм туранан-тура үҙе ҡатнашҡан милли-азатлыҡ хәрәкәтен, шул иҫәптән Башҡортостандағы һәм Төркөстандағы ваҡиғаларҙы ла ентекле асып бирә. Китап башҡорт телендә, киң ҡатлам уҡыусылар өсөн тәғәйенләнгән.




**"Китап" нәшриәтендә шулай уҡ "Башҡортостан ере яҙыусылары" тигән белешмә-китап донъя күрҙе.** Китаптың төҙөүселәре - Р.Н. Байымов, Г.Н. Гәрәева, Р.Х. Тимерғәлина урта быуаттарҙан алып беҙҙең көндәргәсә яҙыусылар хаҡында мәғлүмәттәр туплаған. Белешмәлә авторҙарҙың ҡыҫҡаса биографияһы, ижады, төп әҫәрҙәре исемлеге урын алған. Шулай уҡ яҙыусының башҡа телдәрҙән тәржемә иткән әҫәрҙәре, уның ижады тураһында әҙәбиәт билдәләнгән. "Башҡортостан ере яҙыусылары" библиографик белешмәһе милли әҙәбиәт һәм мәҙәниәт проблемалары менән ҡыҙыҡһынған киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнгән. Уның төп маҡсаты - авторҙың әҫәрҙәре исемлеге менән генә таныштырыу түгел, ошо әҫәрҙең әҙәбиәтебеҙгә индергән өлөшөн билдәләү. Шуға күрә белешмә менән әҙәбиәтсе-ғалимдар ҙа, тарихсылар ҙа файҙалана ала. Ул студенттарҙың, уҡытыусыларҙың, китапхана хеҙмәткәрҙәренең өҫтәл китабына әйләнергә тейеш.

**Баҫмаларҙы Өфөлә, Октябрь проспекты, 2 адресы буйынса урынлашҡан "Китап" нәшриәте магазинында һатып алырға мөмкин.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУРҠҠАНДЫ БЕЛГӘН ЭТ...

## нығыраҡ өрөр

Тыныс йәшәргә теләһәң, телеңде тый, оҙаҡ йәшәргә теләһәң, ауыҙыңды тый.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мөхәббәт ләззәте һәм уны юғалтыуҙан ҡурҡыу йәнәш йәшәй.

**(Робин Дональдс).**

Һеҙҙең бар байлығығыҙ - һеҙ үҙегеҙ. Һеҙҙең тәндә ҡояштың меңәрләгән нуры йәшәй.

**(Пабло Пикассо).**

Аҡсаның ҡиммәте шунда: уның менән беҙ һәр кемде шайтаныма олаҡтыра алабыҙ. Был - алтынсы тойғо, ул булғанда ғына ҡалған биш тойғо менән ләззәтләнергә була.

**(Сомерсет Моэм).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Көҙөн бөтөн ҡоштар ҙа көньяҡҡа осорға әҙерләнгәндә, улар араһынан бер ҡош шулай тип белдерә:**
**- Мин бында ҡалам, сөнки мин бәхет ағасы үҫтерергә теләйем, уның орлоғон тап көҙ көнө сәсергә кәрәк...**
**- Ағас бит бик оҙаҡ үҫә, ә ҡоштарҙың ғүмере ҡыҫҡа, - ти ҡоштар тубы юлбашсыһы. - Ағас үҫтереү беҙҙең вазифа түгел, беҙҙең ҡулдан килмәй торған бурыстар бик күп улар...**
**Ҡоштоң ағас үҫтереү теләге шул тиклем көслө була, шуға ул үҙенең ниәтенән ҡайтмауын белдерә. Ләкин туптағы башҡа ҡоштар уның был теләген ҡабул итмәй, уны ғәйепләргә тотона һәм ҡошто хөкөм итеү билдәһе итеп был ерҙәргә ҡабат осоп килмәҫкә ҡарар итәләр.**
**- Һин беҙгә хыянат иттең, һин беҙҙең тарафтан онотоласаҡһың! - тип ҡысҡыра юлбашсы.**
**Был хәлдән һуң күп һыуҙар аға, күп йылдар үтә. Бер саҡ баяғы ҡоштар тубының яңы тоҡомо әлеге ерҙәргә осоп килә. Улар бында оло тарбаҡлы, ҡеүәтле ағас үҫеп ултырғанын күрә. Ул шул тиклем ҙур була - унда осоп килгән бар ҡоштар тубы урынлаша ала. Унан һуң, ағастың емеше лә оҙаҡ ваҡыт бар ҡоштарҙы туйындырырлыҡ була. Иң мөһиме, бында ҡояш йылыраҡ һәм сағыуыраҡ яҡтырта булып сыға. Ләкин ҡоштар тубы башҡалар бәхете өсөн был ағасҡа кем ғүмер биргәнен генә белмәй...**
**... Шуның өсөн, изге эштең башында ғына булғандарҙы ғәйепләргә ашыҡмағыҙ. Ул сәсәсәк орлоҡтоң ниндәй шытым бирере лә, был кеше үҙен ҡорбан итәме, әллә башҡа ниәте бармы икәнен дә беҙ башта белмәйбеҙ. Йыш ҡына изгелек ҡылыусының эш асылын алдан тойомлар хәлдә булмайбыҙ бит. Нисек кенә булмаһын, "Бәхет ағасы" янында булғанда уның кем тарафынан ултыртылыуын иҫкә төшөрөргә онотмағыҙ..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 15 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 1/01